ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

30-5 май - июнь (һабанай - һөтай)

2015

№22 (648)

Золотой фонд прессы 2015

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Бөрйән егеттәренең ҡаһарманлығы**



7

**Кешелектең ҡотолоу юлы -** тәбиғәткә кире ҡайтыу



8-9

**Милли байрамдар...** тәрбиә сығанағы ла



11

**Бәхет өсөн...** атай-әсәй булыуы ла етә



12

**ТВ-программа** 14


***һинең һүҙҙәреңде ишетеүҙәрен теләһәң - ҡысҡырып һөйлә;***
***һинең һүҙҙәреңде тыңлауҙарын теләһәң - мәғәнәле һөйлә;***
***һинең һүҙҙәреңде аңлауҙарын теләһәң - ябай итеп һөйлә;***
***һинең һүҙҙәреңде хөрмәт итеүҙәрен теләһәң - ихлас һөйлә.***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## 1 июнь - Беренсе Бөтөн донъя башҡорттары Ҡоролтайы үткәрелеүгә 20 йыл тула. Башҡорт донъяһындағы ошо тарихи ваҡиғаның әһәмиәте нимә булды?

***Рәшит ШӘКҮР, шағир, филология фәндәре докторы, профессор, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Бөтөн донъя башҡорттары Ҡоролтайы (конгресы) Башҡарма комитетының идара ағзаһы:*** "Беренсе" тигән һүҙ һәр ваҡыт ҡәҙерлерәк тә, әһәмиәтлерәк тә була. Ә инде меңәрләгән йыллыҡ тарих төпкөлдәренән килгән башҡорт халҡы өсөн Беренсе Ҡоролтайҙың ни тиклем ҡәҙерле булыуы тураһында һөйләп тә тормаҫҡа мөмкиндер. Был тулҡынландырғыс оло йыйынға 20 йыл элек, 1995 йылдың ҡояшлы 1 июнь иртәһендә, баш ҡалабыҙҙың күркәм йорто - ул саҡтағы Нефтселәр мәҙәниәт һарайына йыйылдыҡ. Донъяның барлыҡ тарафтарынан, элекке союздаш республикаларҙан, Рәсәйҙең республика һәм өлкәләренән, тыуған Башҡортостаныбыҙҙың ҡала һәм райондарынан 800-ҙән артыҡ делегат ҡатнашлығында үтте ул Ҡоролтай. Уның эшендә республиканың беренсе Президентының, федераль власть вәкилдәренең, сит илдәр һәм федераль Рәсәй субъекттары делегацияларының ҡатнашыуы был ваҡиғаның бәҫен бермә-бер күтәреп ебәрҙе. Ҡоролтайҙа башҡорт милләте алдында торған бик күп проблемалар, халыҡтың артабанғы үҫешен күҙ уңында тотҡан мөһим ҡарарҙар ҡабул ителде, Башҡарма комитет һәм рәйес һайлап ҡуйылды. Башҡорт халҡының был бөйөк йыйынына ул саҡтағы Рәсәй Президенты Борис Ельциндан, хөкүмәт башлығы Виктор Черномырдиндан һәм башҡа бик күп рәсми кешеләрҙән, уңыш теләп, ҡотлау хаттары, телеграммалар килеүе лә күңелде күтәреп ебәрҙе. Ҡоролтайҙа Әхмәтзәки Вәлидиҙең ҡыҙы Иҫәнбикә Туғандың, Рәсәй Геройы Руслан Аушевтың һәм дә айырыуса Германия ҡунағы Маргарет Эрсен-Раштың сығыштарын бөтөн зал йәнләнеп, алҡышлап ҡаршы алды. Маргарет ханымдың тап-таҙа итеп саф башҡорт телендә һөйләгән телмәре һәр кемдең күңеленә майҙай яғылды. Ул ваҡытта беҙ бит әле башҡорт теленә дәүләт теле статусы алыу өсөн көрәш юлында ғына инек. Етәкселәребеҙҙең аңһыҙлығы арҡаһында был мәсьәлә бик оҙаҡҡа һуҙылды. Шундай шарттарҙа Германия ҡунағының сығышы үтә лә ваҡытлы һәм фәһемле булды. Хәйер, ул телмәр хәҙерге ваҡытта ла туған теленең ҡәҙерен белмәгән бәғзе маңҡорттар өсөн һабаҡ булып тора. Йәнә шуны ла әйтеп үтәйем: Маргарет ханым ИНТАС тигән Европа берлеге ойошмаһының тәҡдиме буйынса, Европа методикаһын ҡулланып, башҡорт теле дәреслеген төҙөүҙәре тураһында былай тип һөйләне: "Дәреслек төҙөгәндә башҡорт теле грамматикаһының урыҫ теле грамматикаһы ҡалыбында яҙылғанын күрҙем. Шуға үҙебеҙҙең дәреслектә башҡорт теле грамматикаһын ... уның үҙенсәлектәренән сығып яҙырға тырышасаҡбыҙ. Ошо дәреслегебеҙ, грамматикабыҙ аша башҡорт теле менән Көнбайыш Европаны таныштырырға теләр инем. Был эшемде талиптарым дауам итһә, мин бик бәхетле булыр инем". Һүҙен йомғаҡлап, ҡунағыбыҙ бына тағы ниндәй алтын һүҙҙәр әйтте: "Ә башҡорт йәштәренә әйтер һүҙем шул: тел йәшәһә, халыҡ йәшәй. Телегеҙҙе һаҡлағыҙ, шул осраҡта башҡорт халҡы йәшәр". Бөгөн дә, сирек быуат аша: "Ауыҙыңа бал да май. Амин, шулай була күрһен!" - тип әйткем килә Маргарет ханыма.

Ғөмүмән, Ҡоролтайҙың халҡыбыҙ тормошонда роле бик ҙур булды. Унда ҡабул ителгән документтарға таянып, беҙ күп кенә уңыштарға өлгәштек. Әйткәндәй, Беренсе һәм 2002 йылда үткән Икенсе Ҡоролтайҙың стенографик отчеттары һәр береһе айырым том булып, нәшер ителде.Үкенескә, Өсөнсө Ҡоролтай материалдары ҡульяҙма хәлендә ятып ҡалды. Ә бит бының өсөн беҙ бөгөнгө көнөбөҙ генә түгел, тарих алдында ла яуаплыбыҙ. Республикабыҙ Хөкүмәте был мәсьәләне хәл итеүҙә туранан-тура булышлыҡ күрһәтергә тейеш, тип иҫәплләйем.

**(Дауамы 3-сө биттә).**

*"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ!*

# РУХ-ЙӘН ДАУАҺЫ УЛ

**"Киске Өфө" гәзитен алдырып уҡымағандар күп нәмәнән мәхрүм, тигән фекерҙәбеҙ. Ундағы ҡайһы ғына мәҡәләне алма, уйға һалырҙай тос фекер, зиһендәрҙе яҡтыртып ебәрерҙәй фәлсәфә, күңел имләрҙәй аҡыл хазинаһы.**

**(Дауамын 2-се биттә уҡығыҙ).**




*З. Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте коллективы - әүҙем уҡыусыларбыҙ.*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# 1 июнь - Беренсе Бөтөн донъя башҡорттары Королтайы үткәрелеүгә 20 йыл тула. Башҡорт донъяһындағы ошо тарихи ваҡиғаның әһәмиәте низә булды?

(Башы 1-се биттә).

***Сәйфулла ӘМИРОВ, Мәләүез районы "Көңгәк" гәзитенең баш мөхәррире:*** Беренсе Ҡоролтайға 20 йыл үтеп тә киткән икән. Уға әҙерлек эше бик оҙаҡ барҙы. Ҡарарҙар республика матбуғатында донъя күргәс, урындағы власть органдары ла был эшкә ҡушылды, уларҙың төп ярҙамсылары ролен уҙған быуаттың 90-сы йылдарында яңы күтәрелеш алған милли хәрәкәттең әүҙем ағзалары үтәне. Миңә бер төркөм үҙешмәкәр артистар менән районды тораҡ пункттарына сығып, аңлатыу алып барыу эше йөкмәтелде. Башҡорт йәмәғәтселеген йыйып, бүленгән квотаға ярашлы, Ҡоролтай делегаттары кандидатураларын ҡараныҡ. Ә делегаттарҙы һайлауҙы урындағы власть рәсми ойошторҙо, һәр кандидатҡа һүҙ бирелде, ул милләтебеҙҙең киләсәген нисек күҙаллауы буйынса сығыш яһаны. Быға тиклем милләттең "М" хәрефен дә белмәгән, әммә көслө оратор талантлылар ҙа үтте Ҡоролтай делегаты булып.

Баш ҡалабыҙ Өфөлә үткән форум тантаналы, ҡеүәтле итеп ойошторолдо, уны һүҙ менән аңлатыуы ҡыйын, әйтерһең дә, ошо ике көндә бөтә Ер шары халҡын тик башҡорттар ғына ҡыҙыҡһындыра ине. Йыйында ҡабул ителгән ҡарарҙар милләт проблемаларын төптән белгән кешеләр тарафынан әҙерләнгәйне. Башҡорт, дөйөм төрки халыҡтары тарихына битараф булмаған күренекле шәхестәр: Американан килгән тарихсы Элтон Донелли, үҙебеҙҙең Рәсәй яҙыусыһы Морат Аджиҙы күреүемә, улар менән аралашыуыма сикһеҙ шатмын. Һуңынан уларҙың эҙләнеүҙәре менән танышҡас, милләтебеҙ тураһында ситтәр менән сағыштырғанда үтә аҙ белеүебеҙҙе төшөндөм. Немец ғалимы Маргарет Эрсен-Раш ханымдың сығышын күптәр бөгөн дә хайран ҡалып һөйләй.

Һәр бер ваҡиғаның ыңғай һәм кире яҡтары булған кеүек, ваҡыт та Беренсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына тейешенсә баһа бирер, тип ышанам. Ыңғайы - милләтебеҙ киләсәге, уның теле, көнитмеше һәм башҡа проблемаларға дәүләт кимәлендә иғтибар бирелһә, киреһе, минеңсә, иң аяныслыһы - "Урал" үҙәге, Башҡорт халыҡ партияһы, һәр бер ҡала-райондағы үҙенән-үҙе ойошҡан милли берекмәләрҙең ҡоролтайҙар тарафынан ситкә этәрелеүе, сөнки яңы барлыҡҡа килгән ойошмалар етәкселәре чиновниктар ҡарары менән тәғәйенләнде, улар тарафынан етәкселек ителде.

Шулай ҙа беренсе Ҡоролтайҙа ҡатнашыуым менән ғорурланам һәм кеше ғүмерендә бер генә була торған ваҡиғаның минең өсөн ошо оло йыйын икәнен аңлайым.

***Нияз МӘЖИТОВ, археолог, тарих фәндәре докторы, профессор, 1995-2002 йылдарҙа Бөтөн донъя башҡорттары Королтайы Башҡарма комитеты рәйесе, Салауат Юлаев ордены кавалеры:*** Бынан 20 йыл элек, Беренсе Бөтөн донъя ҡоролтайында мине уның Башҡарма комитеты рәйесе итеп һайлап ҡуйыуҙары үҙем өсөн көтөлмәгәнерәк хәл булды. Уның тарихы ҡыҫҡаса былай: 1991 йылда минең БДУ-ла эшләп йөрөгән саҡ. Бер көн мине университеттың ректоры Р. Ғимаев саҡыртып алды. Барып инһәм, унда Пермь өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе (исем-шәрифен онотҡанмын инде) ултыра. Рәғиб Насретдин улы беҙҙе таныштырҙы һәм миңә мәсьәләне аңлатып бирҙе. Пермь өлкәһе башҡорттары үҙ ҡоролтайын үткәрергә йыйына икән. Уны, ғәжәпкә ҡаршы, нишләптер Татарстан хөкүмәте ойоштора булып килеп сыҡты, рәйестең һүҙҙәре буйынса. "Беҙ бит һуң башҡорттар, ниңә әле, шулай булғас, Башҡортостан был эштән ситтә тороп ҡалырға тейеш, бына һеҙҙән вәкилдәр саҡырырға килдем", ти рәйес. БДУ ректоры Пермгә делегацияны ойоштороу эшен миңә йөкмәтергә ҡарар итеүҙәрен әйтте. Уның был ҡарарын шулай аңлатырға була ине: мин 1956 йылда Пермь унивеситетының тарих факультетын тамамлағайным. Уҡыған саҡта тәүге курстан алып археология төркөмдәре менән Пермь өлкәһен арҡырыға-буйға йөрөп, башҡорт ауылдары тарихын өйрәнеп, ундағы халыҡ тураһында яҡшы хәбәрҙар инем.

Пермгә китерҙән алда мин өлкә буйынса бөтөн булған тарихи документтар, халыҡ иҫәбен алыу материалдарын тағы бер яҡшылап ҡарап, өйрәнеп сыҡтым. Ҡоролтайҙа был хаҡта һүҙ сығасағын яҡшы аңлай инем сөнки. Һәм, ысынлап та, йыйында һүҙ алып һөйләгән татар делегацияһының бөтөн маҡсаты - пермдәрҙе татар итеп күрергә тырышыу икәнлеге асыҡланды. Ләкин Пермь башҡорттары ла бер ҡатлынан түгел ине шул. Башҡортостан делегацияһы етәксеһе мәрхүм журналист һәм депутат Ризван Хажиев менән минең документтарға нигеҙләнгән дәлилле сығыштарҙан һуң күрше дуҫтар хушлашып та тормайынса ҡайтып киттеләр. Ғөмүмән, ул йылдарҙа беҙгә, бер төркөм тарихсы һәм телсе ғалимдар төркөмөнә, телдәре татарға күсеп китһә лә, сығыштары башҡорт булған контингент буйынса тарихи сығанаҡтар, перепись мәғлүмәттәренә нигеҙләнеп аңлатыу эштәре алып барырға тура килде.

**Күптәр тарихи тамырҙарын танып, шәжәрәләрен төҙөп алып, ата-олаталары милләтенә - үҙ асылдарына ҡайтты, ә икенсерәк фекерҙәгеләрҙе мәжбүрләү тигән нәмәгә юл ҡуйманыҡ. Ваҡыты етер - улар үҙҙәре аңлар, тинек. Был өлкәлә ҡайһы бер "дуҫтар" кеүек, ҡоро һүҙ, мәжбүрләү кеүек алымдар менән эшләргә намыҫ ҡушманы, сөнки беҙҙең ҡулда - кире ҡаҡҡыһыҙ тарихи мәғлүмәттәр бар ине.**

Шулай итеп, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетына рәйес итеп һайланғанға тиклем үк мин башҡорт халҡының хәл-торошо, йәшәү шарттары, уй-ниәттәре менән яҡшы таныш инем инде. Халҡыбыҙҙың тормош шарттарын яҡшыртыу, балаларҙы уҡытыу мәсьәләһен күтәреү, башҡорттар йәшәгән райондарҙың социаль-иҡтисади үҫеше прблемаларын өйрәнеп, республика етәкселеге, Хөкүмәт иғтибарын шуға йүнәлтеү буйынса күп эштәр башҡарылды. Үҙем өсөн көтөлмәгәнсәрәк булһа ла, туған халҡыма эскерһеҙ ярҙам итеү теләгән, ғилми-теоретик планда ғына түгел, уны практик эштәр менән бәйләп алып барыу кеүек объективлыҡ принциптарын үҙ итеүемде иптәштәр баһалағандыр, тип уйлайым хәҙер.

Бөтөн донъя башҡорттарының Беренсе йыйынының тормош ҡатмарлашып торған мәлдәрҙә лә халҡыбыҙҙың йәшәү шарттарын, мәҙәни-рухи кимәлен тейешле кимәлдә һаҡлау өсөн милләтте туплау, ойоштороу, берләштереү буйынса әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ ҙур булды. Халҡыбыҙ тормошона икенсе һулыш бирҙе ул. Сөнки ҡара золом йылдары, унан Бөйөк Ватан һуғышындағы юғалтыуҙар, иҫ киткес ауырлыҡтарҙан, ахырҙа, торғонлоҡ йылдарынан һуң халыҡ бер төрлө баҫылып, һүнеп ҡалғайны. Барлыҡ илдәрҙән милләттәштәребеҙҙе йыйнап, кәңәш-төңәш итеү, һәр кем күңеленә үтеп инеп, йүгереп йөрөп аңлатыу эштәре алып барыуыбыҙ халҡыбыҙ ҡеүәтенә ышаныс уятты, көс бирҙе, "йоҡоло" күҙҙәрҙе асып ебәрҙе. Халҡыбыҙҙың ташып барған илһөйәрлек дәртенә һәм энтузиазмына һоҡланырлыҡ ине бит ул мәл! Бөгөн быларҙың бөтәһе лә һүнеп ҡалғандай тойола миңә. Хатта йүнле-башлы ғына итеп үҙ телендә гәзит уҡыған кешеләребеҙ ҙә бармаҡ менән генә һанарлыҡ бит. Тәүге йыйын иң тәүге пункттар иҫәбенә ер проблемаһын - уны хәл иткәндә башҡорт халҡы мәнфәғәттәренән сығып эш итеү мәсьәләһен - ҡуйғайны. Бөгөн ташландыҡ, ҡый баҫҡан баҫыу-ҡырҙарҙы күреп, йөрәк һыҙлай. Шәхси хужалыҡтарҙың хәле хөрт. Ауылдарҙа - эшһеҙлек, ир-егет эш артынан Себер китә... Нисек кенә ауыр булмаһын, яҙмышыбыҙҙы үҙ ҡулдарыбыҙға алып, үҙ көнөбөҙҙө үҙебеҙгә күрергә, берҙәмлек һәм үҙ-ара ярҙамдан баш тартмаҫҡа, эшләп көн күрергә кәрәктер, тием. Беренсе Ҡоролтайҙың башҡорт милләтенә Мөрәжәғәтендә әйтелеүенсә, хеҙмәт - тормош нигеҙе. Тик көсөргәнешле хеҙмәт кенә беҙгә үҙебеҙҙе һаҡлап алып ҡалырға һәм яҡшы йәшәргә мөмкинлек бирәсәк.

***Мәрйәм БУРАҠАЕВА, яҙыусы, педагог:*** Ул йылды мин Ейәнсурала башҡорт гимназияһы асып, шуның директоры булып эшләй инем. Халыҡ педагогикаһы нигеҙендә программа төҙөп, шуны мәктәптәргә индереп ҡарарға тигән ниәтемде ғәмәлгә ашырыу ине бар хыялым. Әмәлгә ҡалғандай, илдәге демократик үҙгәрештәр халыҡ мәғарифы системаһында ла күп кенә яңылыҡтарға юл асты. Төрлө йүнәлештәрҙә инновация уҡыу йорттары программаһы төҙөргә һәм һынап ҡарарға мөмкинлек тыуҙы. Был йәһәттән Бөтөн донъя башҡорттарының Беренсе Ҡоролтайы үтеүе, уның башҡорт халҡының иҡтисади хәле менән бер рәттән, мәҙәни - рухи донъяһын үҫтереү буйынса ҡабул ителгән ҡарарҙары ла беҙгә үҙебеҙ һайлаған йүнәлештә эшләргә мөмкинлек тыуҙырҙы. Ә был бик мөһим ине, сөнки ошоға тиклем бер генә дәрестә лә балаларҙы кешелек донъяһының илһөйәрлек, ғәҙеллек, намыҫ, тоғролоҡ, камиллыҡҡа ынтылыу, һыйышып тыныс йәшәү, кешелеклелек һәм башҡа шундай рухи ҡиммәттәренә махсус өйрәткән программа булманы. Халыҡ педагогикаһына нигеҙләнгән "Тормош һабаҡтары" дәрестәре төп иғтибарҙы тәрбиә ҡанундарына йүнәлтте. Ә халҡыбыҙҙың тәрбиә ҡанундары - уның ауыҙ-тел ижадында. "Урал батыр" эпосының үҙен генә лә тәрбиә ҡанундары тупланмаһы тип әйтергә мөмкин. Үҙен башҡорт тип иҫәпләгән кеше туған халҡы тарихы һәм бөтә донъя тарихы, фәлсәфәһе, ислам дине һәм әхлаҡлылығы буйынса белем менән тейешле кимәлдә ҡоралланған булһын һәм үҙ белемен һәр яҡлап үҫтереү буйынса даими эшләһен, тип аҡҡа ҡара менән юҡҡа яҙылманы бит Беренсе Ҡоролтай резолюцияһында. "Башҡорттарҙың йәш быуыны үҙенең рухи сығанаҡтарына ҡайтһын ине, туған телен, тарихын, әҙәбиәтен өйрәнеп, башҡорт халыҡ эпостарының, легендаларының, шиғырҙарының, поэмаларының, йырҙарының изгелек һәм матурлыҡ сығанаҡтарынан ысын гәүһәрҙәрҙе йыйһын ине. Был һәр башҡорт өсөн юғары рух һәм әхлаҡ нигеҙе булһын. Башҡорт халҡын үҫтереү, ҡотҡарыу һәм һаҡлау юлын беҙ ошонда күрәбеҙ", тигән юлдар ҙа бар әлеге резолюцияла. Сирек быуатҡа яҡын ваҡыт үтте - ошо изге юлдамы беҙ бөгөн?..

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостанда Төрки донъяһын тикшереү халыҡ-ара симпозиумы 2016 йылдың майында М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында үтәсәк. Быйыл симпозиум делегаттарын Алматы ҡалаһы ҡабул итте. Унда ҡатнашыу өсөн Ҡаҙағстанға Төркиә, Әзербайжан, Ҡырғыҙстан, Үзбәкстан, Рәсәй, Италия, АҠШ, Ҡытай, Корея, Нидерландтар, Сербия һәм башҡа илдәрҙән 500-ҙән ашыу ғалим килде. Башҡортостандан унда ғилми эшмәкәрҙәр, магистранттар, БДПУ-ның фәнни эштәр буйынса проректоры Гөлназ Шафиҡова етәкселегендә башҡорт филологияһы студенттары ҡатнашты.

✓ Баш ҡаланың Мәжит Ғафури урамында ШОС һәм БРИКС саммиттары журналистары өсөн матбуғат үҙәге төҙөлөүгә бәйле 12 автобус маршруттарының хәрәкәте үҙгәртелә һәм 19-сы троллейбус хәрәкәте ябыла, тип хәбәр итә Өфө хакимиәте. 28 майҙан 11 июлгә тиклем Зәки Вәлиди урамында Аксаков урамы киҫелешенән алып һәм Ғафури урамында Пушкин урамы киҫелешенә тиклем хәрәкәт ябыла. Зәки Вәлиди урамында 19-сы троллейбус хәрәкәте ваҡытлыса туҡтатыла. 6-сы, 59э, 75с, 202-се, 228-се, 242-се, 249-сы, 255-се, 256-сы, 262к, 266-сы, 290-сы маршруттар буйынса йөрөгән автобустарҙың да хәрәкәте үҙгәрә.

✓ Билдәле виртуоз ҡумыҙсы, Башҡорт дәүләт филармонияһы артисы Миңлеғәфүр Зәйнетдинов "Быуаттар ауазы" халыҡ-ара фестивалендә ҡатнаша. Сара 12 июндән 16-на тиклем Ҡаҙағстандың Кокшетау ҡалаһында уҙғарыла. Музыкант күренекле ҡаҙаҡ композиторы Едиль Хөсәйеновтың саҡырыуы буйынса сығыш яһай. Сарала донъя кимәлендәге 14 фольклор ансамбле һәм музыканттар ҡатнаша.

✓ Өфөнөң "Инеш" нәшриәтендә "Ерәнсәнең 40 әкиәте" тигән яңы китап донъя күрҙе. Ул 488 биттән тора, уны рәссам Диана Фәхрисламова матур һүрәттәр менән биҙәгән. Башҡортса әкиәттәрҙе руссаға талантлы әҙип Илгиз Кәримов тәржемә иткән. Китаптың рецензенты - филология фәндәре докторы, М.Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәте кафедраһы профессоры Әхмәт Сөләймәнов.

✓ Башҡортостанда һабантуйҙар үткәреү ваҡыты билдәләнде. График республика Башлығы указы менән раҫланған. 30 майҙа байрам Стәрлетамаҡ, Салауат, Әлшәй, Ҡырмыҫҡалы һәм Күгәрсен райондарында, 6 июндә барлыҡ муниципалитеттарҙа тиерлек ойошторола. Өфөлә һабантуй 12 июнгә билдәләнгән.

***✓ "Өфө ҡаласығы-II" археология ҡомартҡыһы Көньяҡ Урал биләмәһендә иң ҙурҙарҙан һанала, уның бейеклеге дүрт метрға етә. 2,5 мең квадрат метр майҙан тикшерелгән, миллионға яҡын артефакттар табылған.***

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# СӘЛӘМӘТЛЕК БАЙРАМЫ

**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Өфөнөң В.И.Ленин исемендәге паркында үткәрелгән "Башҡортостан Республикаһында халыҡ сәләмәтлеге көндәре" акцияһында ҡатнашты. Был сара Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы һәм Республика кардиология диспансеры тәҡдиме менән икенсе йыл рәттән ойоштороpла. Был юлы унда 700-ҙән ашыу кеше ҡатнашты.**

Рөстәм Хәмитов Өфө поликлиникаларындағы Сәләмәтлек үҙәктәренең күргәҙмәһе ҡуйылған "Дөрөҫ туҡланыу фонтаны" һәм "Һаулыҡ фонтаны" майҙансыҡтарын ҡараны. Бында ҡала халҡы өсөн офтальмолог, стоматолог, гастроэнтеролог, терапевт һәм эндокринолог эшләне, шулай уҡ ҡандағы шәкәр кимәлен тикшертергә мөмкин ине. Теләүселәр кардиограмма яһатты, дауалау физкультураһы буйынса инструкторҙың күҙәтеүендә тренажерҙа, йүгереү юлында үҙ көсөн һынап ҡараны, белгес менән кәңәшләште.

"Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһы стенды янында республика Башлығы "Витаминлы" һәм "Тынысландырыусы" үлән сәйҙәрен тәмләп ҡараны, һуңынан балалар, үҫмерҙәр һәм студенттар өсөн "Зарядка" флешмобында ҡатнашты. Артабан ул күсмә диагностик модулдәрҙең эше менән дә танышты. Онкомодулдә маммолог һәм онколог ҡабул итте, ә күсмә кардиология модулендә ҡанды, артериаль ҡан баҫымын тикшерткәндән һәм ЭКГ үткәндән һуң табип-кардиолог консультация бирҙе. Республика кардиология диспансеры вәкилдәренең әйтеүенсә, былтыр күсмә модуль Башҡортостандың 32 районына барған. 138 мең кеше тикшереү үткән, пациенттарҙың 29 процентында гипертония асыҡланған.

# ДОНЪЯЛА БЕРӘҮ ГЕНӘ

**Өфөлә инвалид балалар өсөн Рәсәйҙә берҙән-бер ябыҡ теннис корты асылды. Яңы спорт объектын асыу тантанаһы Өфөнөң 13-сө махсус мәктәп-интернатында уҙҙы.**

Теннис корты һигеҙ айҙа, республиканың Социаль маҡсатлы программалар фонды заказы буйынса "Төньяҡ-көнбайыш магистраль нефть үткәргестәр" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең хәйриә иғәнәләренә төҙөлгән. Генераль подрядсыһы - "МонолитПроектСтрой" компанияһы. Компания директоры Светлана Хатимова һүҙҙәренсә, спорт ҡоролмаһының майҙаны 810 квадрат метр тәшкил итә. Төҙөлөш өсөн киткән сығым - 10 миллион һумдан ашыу.

Тренер Вячеслав Шемаев әйтеүенсә, терәк-хәрәкәт ағзалары боҙолған инвалид балалар йәшәгән, белем алған һәм реабилитация үткән уҡыу йортондағы ҙур спорт ҡоролмаһы Рәсәйҙә генә түгел, донъяла берәү генә. Башҡортостандың йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Андрей Иванюта йәш спортсыларға былтыр Сочиҙағы Паралимпиадала булған факелды бүләк итте. Спорт комплексында шулай уҡ тренажер залы, кейем алмаштырыу, душ, тренерҙар һәм медицина хеҙмәткәрҙәре өсөн бүлмәләр бар. Йәш спортсылар яңы майҙансыҡ асылыуын шатланып ҡабул итте. Күҙәтеүҙәр буйынса, теннис уйнау һаулыҡ өсөн бик файҙалы. Тенниссылар саҡырылған ҡунаҡтарға сағыу программа тәҡдим итте, мәктәп-интернат уҡыусылары концерт номерҙары күрһәтте һәм үҙ ҡулдары менән яһаған эштәрен бүләк итте.

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# УҠЫУСЫҢ ЕҢЕҮЕ...

## уҡытыусыға ла баһа



**Ошо көндәрҙә баш ҡаланың өлгөлө педагогтарына һәм мәғариф өлкәһендә эшләүсе етәксе кадрҙарға Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының Рәхмәт хаттары тапшырылды.**

Уҡыусылары төбәк-ара һәм халыҡ-ара олимпиадаларҙа, фәнни-ғәмәли конференцияларҙа еңеү яулаған егерме биш уҡытыусыны һәм алты мәғариф учреждениеһы етәксеһен хакимиәт башлығы Ирек Ялалов исеменән уның урынбаҫары Сынтимер Баязитов ҡотланы.

- Бөгөн Хөкүмәт тарафынан талантлы балаларҙы үҫтереү буйынса ҙур ярҙам күрһәтелә. Баш ҡалала был йәһәттән төрлө олимпиадалар, конкурстар, күргәҙмәләр, ғилми конференциялар үткәрелеп тора. Әлеге көндәге мәғлүмәттәр буйынса Өфөнөң 56 меңдән ашыу мәктәп уҡыусыһы ошо сараларҙа әүҙем ҡатнашҡан, улар араһынан ике мең биш йөҙ бала ҡала кимәлендә үткән, төбәк-ара конкурсарҙа егерме биш уҡыусы еңеүсе тип табылған, йөҙ ҙә илле өсө призлы урындарға сыҡҡан. Республика һәм Рәсәй кимәлендә үткәрелгән олимпиадаларҙа Өфө ҡалаһы мәктәптәрендә белем алыусы уҡыусыларҙың һаны арта барыуы ҡыуандыра, бында педагогтарҙың һәм мәғариф учреждениелары етәкселәренең роле баһалап бөткөһөҙ. Һеҙгә, балаларыбыҙҙың талантын үҫтереүгә күп көсөн һалған алдынғы педагогтар һәм мәғариф учреждениелары етәкселәренә, артабанғы эшегеҙҙә уңыштар теләйем, фиҙаҡәр хеҙмәтегеҙ өсөн оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ, - тине Сынтимер Биктимер улы тантанала сығыш яһап.

Баш ҡаланың төрлө белем биреү учреждениеларының 25 педагогы араһында башҡорт теле һәм әҙәбиәте, рус теле, инглиз теле, немец теле, тарих, информатика, математика, физика, биология, химия, ОБЖ, йәмғиәтте өйрәнеү предметтары буйынса уҡытыусылар бар ине. Шулай уҡ төбәк-ара һәм халыҡ-ара олимпиадаларҙа, фәнни-ғәмәли конференцияларҙа еңеү яулаған уҡыусылары һаны буйынса өлгө күрһәтеүсе учреждениелар етәкселәре - Октябрь районының 93-сө гимназияһы директоры Гүзәл Абдуллина, М.Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһы директоры Гөлназ Әхмәҙиева, Киров районы 153-сө лицей директоры Эльвира Минюк, Ленин районы 4-се мәктәп директоры Татьяна Фомичева, М. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейы директоры Шәмсулла Хәбибрахманов, Ленин районы 39-сы гимназияһы директоры Ирина Кейекбаева ла Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығының Рәхмәт хаттарын алды. Балаларға һүнмәҫлек нур, дәрттәр һалған мәктәп уҡытыусылары һәм директорҙарының хеҙмәтенә баһа уларҙың уҡыусылары күрһәткән өлгәштәргә бәйле икәне, алдынғы педагогтарҙың уҡыусылары ла беренселәр рәтендә булыуына тағы бер ҡат инандырҙы был тәбрикләү тантанаһы.

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА.**

*ҮӘТ ӘЙ!*

# ЕМЕРМӘКСЕЛӘР



**Баш ҡалала "Өфө ҡаласығы-II" археология ҡомартҡыһына ҡул һуҙыу факты буйынса прокурор тикшереүе бара. Объект Өфөнөң тарихи үҙәгендә, Пушкин, Яңы күпер урамдары һәм Салауат Юлаев проспекты араһындағы участкала урынлашҡан.**

Республика Мәҙәниәт министрлығы һәм Өфөнөң Киров районы прокуратураһы берлектә алып барған тикшереүҙе "Боронғо Өфө" музей-ҡурсаулығы башлаған.

- Төҙөлөш ойошмалары, беҙҙең менән килешмәйенсә, күсмә вагондар ҡуйҙы, автотуҡталҡа булдырҙы, бетон япмалы юл һалды, тупраҡ килтерҙе, төҙөлөш материалдары һәм сүп-сар өйөп һалды. 73-сө Федераль закон буйынса, ҡомартҡы биләмәһендә төҙөлөшкә бәйле барлыҡ эштәр ҙә Мәҙәниәт министрлығы менән килешеп башҡарылырға тейеш, - тип хәбәр итте "Боронғо Өфө" музей-ҡурсаулығы директоры Гәүһәр Батталова. - Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы һәм музей-ҡурсаулыҡ ҡомартҡыны һаҡлап ҡалыу өсөн барыһын да эшләйәсәк.

Музей-ҡурсаулыҡ хеҙмәткәрҙәре һүҙҙәренсә, ошоға оҡшаш хәл быға тиклем дә теркәлгән. 2013 йылда 21-се төҙөлөш тресына ҡаршы енәйәт эше ҡуҙғатылған булған, уларҙың эшмәкәрлеге законһыҙ тип танылған. Ойошмаға штраф һалынған. Археологтарҙың ҡаршы төшөүе арҡаһында Пушкин урамындағы йорттарҙың береһен төҙөү туҡтатылған.

"Өфө ҡаласығы-II" археология ҡомартҡыһы Көньяҡ Урал биләмәһендә иң ҙурҙарҙан һанала, уның бейеклеге дүрт метрға етә. Ҡаласыҡта ҡаҙыу эштәре 2006 йылдан алып барыла. Ошо ваҡыт эсендә 2,5 мең квадрат метр майҙан тикшерелгән, миллионға яҡын артефакттар табылған. Бөгөнгө көндә уларҙың күбеһе Башҡорт дәүләт университетында һаҡлана. Хәҙер ҡиммәтле артефакттар "Боронғо Өфө" музей-ҡурсаулығына тапшырыла.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле ҡарамағындағы балалар студияһы йәш һәләттәрҙе студияла шөғөлләнергә саҡыра. Беренсе тур 5 июндә киске сәғәт 6-нан 8-гә тиклем, икенсеһе 28 августа ошо уҡ ваҡытта була. Биш йәштән 12 йәшкәсә балалар ҡатнаша ала. Белешмә өсөн телефондар: 276-34-89, 276-18-19. Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле ҡарамағындағы балалар бейеү коллективы 2008 йылда ойошторолған. Студияла биш йәштән 17 йәшкәсә 200-ҙән ашыу бала шөғөлләнә.

✓Башҡортостанда 175 талпан энцефалит вирусы менән зарарланған, был лабораторияла тикшерелгән 2919 талпандың алты проценты. 195 талпанда боррелиоз ҡуҙғытыусыһы табылған. Роспотребнадзорҙың республика идаралығы мәғлүмәттәре буйынса, бөгөнгө көнгә 3187 кеше, шул иҫәптән 1100 бала талпан ҡаҙалыу сәбәпле медицина ойошмаларына мөрәжәғәт иткән. Дауаханаға килгәндәрҙең - 36,8, шул иҫәптән балаларҙың 80,5 процентына иммуноглобулин профилактикаһы үткәрелгән. Республикала вируслы талпан энцефалиты һәм боррелиоз менән ауырыу осраҡтары теркәлмәгән.

✓Өфөлә Hampton by Hilton Ufa ҡунаҡханаһы асылды. Отелдә - 161 номер, шуларҙың икәүһе һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән кешеләр өсөн тәғәйенләнгән. Ҡунаҡхана "дүрт йондоҙ" категорияһы талаптарына яуап бирә. 29 майҙа ҡунаҡхана рәсми рәүештә эшләй һәм ҡунаҡтарҙы ҡабул итә башланы. Hilton Worldwide компанияһы 1919 йылда ойошторолған. Бөгөнгө көндә уның 82 илдә 3,6 мең отеле бар.

✓Башҡортостандың Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы хәбәр итеүенсә, 12 июнь - Рәсәй көнө - байрам һәм ял көнө булып тора. Шулай итеп, биш көнлөк эш аҙнаһында Башҡортостанда 12, 13, 14 июнь ял көндәре буласаҡ.

✓30 майҙа "Павловка паркы" үҙәгендә "Кәкүк сәйе" этнофестивале ойошторола, тип хәбәр итә республиканың Туризм үҙәге. "Кәкүк сәйе" - башҡорттарҙың май айында билдәләнгән йола байрамы. Байрам ҡунаҡтары "Кәкүк карнавалы"нда, сәй күргәҙмә-йәрминкәһендә, шифалы үләндәр буйынса белгес Гордеевтың "Кәкүк сәйе - рецепт һәм ҡатын-ҡыҙ сәләмәтлеге" семинарында ҡатнаша ала. Фестиваль көндөҙгө сәғәт 12-лә асыла.

АФАРИН!

**2009 йылда Рәсәй, Украина, Абхазия, Черногория, Хорватия, Ҡырғыҙстан, Япония һәм Германияның йәмәғәт һәм хөкүмәт ойошмалары вәкилдәре "Социаль, мәҙәни һәм рухи-әхлаҡи традицияларҙы һаҡлауға һәм үҫтереүгә булышлыҡ итеүсе халыҡ-ара ижтимағи берләшмәләрҙең "Донъя берләшмәһе лидерҙары" союзын" төҙөү тураһында ҡарар ҡабул итә. Ә 2010 йылда ойошманың "Көмөш күгәрсен" билдәһен булдыра.**



# БЫЛ БИЛДӘ...

## милли мәнфәғәтте яҡлаусыға

Был - донъяла аналогы булмаған проект. Уны тормошҡа ашырыу дәүләттәр араһында үҙ-ара аңлашыу һәм файҙалы партнерлыҡ булдырыу рухында дуҫтарса мөнәсәбәттәр урынлаштырыу, мәҙәниәттәр менән алмашыуға булышлыҡ итә. Билдәне тапшырыу тантанаһы иһә Рәсәй Федерацияһының милли мәнфәғәтен донъя аренаһында һөҙөмтәле алға этәреүсе, унның имиджын нығытыусы ысул булып тора. Был наград менән халыҡ-ара хеҙмәттәшлектең дәүләттеке булмаған формаларын киңәйтеүгә үҙ өлөшөн индергән, гражданлыҡ тыныслығын һәм гражданлыҡ йәмғиәтен, халыҡ дипломатияһын үҫтергән, йәмғиәт фекерен, кеше ғүмерҙәрен һәм кеше хоҡуҡтарын яҡлаған, Тыуған иленә һәм үҙ халҡына фиҙаҡәр хеҙмәт иткән кешеләр бүләкләнә. Быйыл уға Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе, Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Румил Талғат улы Аҙнабаев лайыҡ булды. Бында шуны ла билдәләп китергә кәрәк: Рәсәй субъекттары вәкилдәре араһынан быға тиклем был наградаға Ҡарасәй-Черкес, Дағстан республикаларынан, Тверҙән генә вәкилдәр лайыҡ була. Быйыл наградланыусылар араһында шулай уҡ Чечня Республикаһы Президенты Рамзан Ҡадиров та бар.

ЙӨҘ ОЯЛМАҺЫН

# ЙӘШТӘР КҮҘЕ ОСЛО...

**Ошо көндәрҙә Өфө ҡала округы хакимиәтендә "Йәштәр - хатаһыҙ ҡала өсөн" акцияһына йомғаҡ яһалды. Был акция Өфө ҡала округы хакимиәте, баш ҡала райондары хакимиәттәре менән берлектә М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының Башҡорт теле хеҙмәте тарафынан 2010 йылда уҡ ойошторолғайны.**



БДПУ-ның Башҡорт теле хеҙмәте етәксеһе, башҡорт теле һәм уны уҡытыу методикаһы кафедраһы доценты Эльвира Фидаил ҡыҙы Рәхимова белдереүенсә, быйылғы сара сиктәрендә лә, алдағы йылдарҙағы кеүек, баш ҡалала урынлашҡан төрлө ойошмаларҙың, учреждениеларҙың алтаҡталарындағы яҙыуҙарҙың башҡортса дөрөҫ яҙылышы тикшерелгән, һөҙөмтәлә, бөтәһе 378 орфографик, стилистик, грамматик хата асыҡланған, улар отчетта теркәлгән һәм контролгә алынған. Кәңәшмәне асып, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов, акцияла үткер күҙле, битараф булмаған йәштәрҙең ҡатнашыуы икеләтә ҡыуаныслы күренеш, тип, был сараның һәм унда ҡатнашыусыларҙың ролен юғары баһаланы.

Студенттар иһә (ә акцияла БДПУ-ның башҡорт филологияһы кафедраһында белем алыусы 17 студент ҡатнашҡан): "Беҙҙең шелтәләрҙе ишетеп, асыуланған, алтаҡталарындағы хаталарҙы төҙәтергә теләмәгән ҡайһы бер ойошма-учреждениелар вәкилдәренә Сынтимер Биктимер улының хатын күрһәтеү генә тейешенсә тәьҫир итте. Беҙ, бер төптән эшләһәң, һөҙөмтә лә була, тигән һабаҡ алдыҡ. Ҡалабыҙ тағы ла йәмләнһен өсөн был эште артабан дауам итәсәкбеҙ", - тип, тәҫораттары менән уртаҡлашты.

- "Йәштәр - хатаһыҙ ҡала өсөн" акцияһында өсөнсө тапҡыр ҡатнашабыҙ, - тине Эльвира Рәхимова. - Өфө ҡала округы хакимиәте ҡарамағындағы "БР халыҡтары телдәре тураһындағы" БР законын тормошҡа ашырыу буйынса комиссия менән тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ, уның ағзалары ла был эшкә бик күп көс һала, әлбиттә. Комиссия эргәһендәге терминологик хеҙмәт ойошма-предприятиеларҙың алтаҡталарындағы текстарҙы тикшерә, төҙәтә. Әммә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күптәр был хеҙмәткә мөрәжәғәт итеүҙе кәрәкле тапмай. Шулай ҙа була: текстарҙы тикшертеп тә, уны алтаҡтаға күсергәндә хата яһала. Беҙҙең Башҡорт теле хеҙмәте үҙәге бына шул хаталарҙы күҙгә элеп, төҙәтеү яғын ҡарай ҙа инде. Күптән түгел лицензия алдыҡ, сайт булдырасаҡбыҙ. Бәлки, алтаҡталар эшләү буйынса оҫтахана ойоштороп булыр, тигән хыялыбыҙ ҙа бар...

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ИМТИХАНДАР БАШЛАНДЫ!

**Быйыл баш ҡалала Берҙәм дәүләт имтиханын 5393 кеше: әлеге һәм элекке сығарылыш уҡыусылары, һөнәрселек училищеларында белем алыусылар тапшыра. Уҡыусылар араһында башҡа йылдарҙағы кеүек үк иң популяр фәндәр булып йәмғиәтте өйрәнеү (61 процент), физика (37 процент), тарих (25 процент) ҡала.**

Быйылғы уҡыу йылында БДИ-ның йөкмәткеһе һәм структураһы мөһим үҙгәрештәр кисергән. Шуларҙың иң әһәмиәтлеһе - дәүләт йомғаҡлау аттестацияһына юл асыусы йомғаҡлау иншаһын (изложение) индереү, география һәм рус теле буйынса алдан имтихан тапшырыу, математика буйынса БДИ-ны база һәм профиль кимәлдәргә бүлеү, сит телдәр буйынса телдән имтихан тапшырыу өлөшөн индереү һәм алдан үткәрелгән өҫтәмә вуз этабынан баш тартыу.

Аттестат алыу өсөн сығарылыш синыфы уҡыусылары рус теленән һәм математиканан - мотлаҡ, башҡаларын теләк буйынса ирекле рәүештә тапшыра. Уҡыусылар барыһы ла иншаны уңышлы яҙып, аттестацияға үткәрелгән.

БДИ үткәреү тәртибе имтихан тапшырыуҙың алдан биреү һәм төп ваҡытын билдәләй. Быйыл беренсе тапҡыр рус теле һәм географиянан 14 февралдә алдан имтихан тапшырылды. Унда рус теленән уҙған йылдарҙа ҡәнәғәтләнерлек билдәһе алмаусылар ҡабат үҙҙәрен һынап ҡарай ала. Географияны быйылғы сығарылыш уҡыусылары ла тапшыра ала, сөнки предметты уҡытыу 10-сы синыфта тамамлана. Бындай тәжрибә дәүләт имтиханын йыл дауамында тапшырыуҙың кәрәкме-түгелме икәнен асыҡлау маҡсатында үткәрелә.

БДИ-ның 23 марттан 24 апрелгә тиклем уҙған алдан тапшырыу этабында 98 кеше ҡатнашҡан, шуларҙың 10-һы - уҙған йылғы сығарылыштан.

Төп этап, резерв көндәрен дә иҫәпкә алып, 25 майҙан 26 июнгә тиклем дауам итә. Муниципаль кимәлдә Мәғариф идаралығы һәм район бүлексәләре тарафынан төбәк мәғлүмәт системаһын тултырыуҙың сифаты контролләнә, белем биреү процесында ҡатнашыусылар менән мәғлүмәт-аңлатыу эштәре алып барыла.

Ҡала мәктәптәре базаһында 27 имтихан уҙғарыу пункты ойошторолған, улар видеокүҙәтеү, техник ҡорамалдар, тимер эҙләгестәр менән йыһазландырылған. Имтихандар үткәреү осоронда мәктәптәрҙә медицина, полиция, ҡала Йәмәғәт именлеге үҙәге хеҙмәткәрҙәре именлек тәьмин итәсәк.

Шулай уҡ 9-сы синыфты тамамлаусы уҡыусыларҙың йомғаҡлау аттестацияһын ойоштороу ҙа етди мәсьәлә. Быйыл төп дәүләт имтиханын 8625 кеше тапшыра. Йомғаҡлау аттестацияһы барлыҡ предметтар буйынса ла белемде баһалауҙың бойондороҡһоҙ механизмдарын ҡулланып үткәрелә. 20-27 апрелдә улар өсөн алдан тапшырыу этабы үткән һәм һөҙөмтәләр ҡыуандыра.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡолаҡ шаулаһа...

❖ 300 таҙартылған һарымһаҡты ярты литрлы банкаға тултырырға ла, өҫтөнә спирт ҡойорға. 3 аҙна төнәтергә. Ошо төнәтмәне көн һайын ярты стакан һөткә 20-шәр тамсы тамыҙып эсергә.

❖ 1 стакан ҡайнаған һыуға 1 ҡалаҡ мелисса үләнен һалып, сәй кеүек бешерергә. Был үләндең зыяны юҡ, уны оҙайлы ваҡыт һәм сикләнмәгән күләмдә эсергә була.

## Баш ауыртҡанда

❖ Маңлайға, елкәгә йәки сикәләргә сей картуф, сөгөлдөр киҫәктәрен, сирень һәм дегәнәк япрағының өҫкы яғын ҡуйығыҙ.

## Йүтәл

❖ Бигерәк тә яҙ, йәй көнө йүтәл ауыр үтә. 2 ҡалаҡ аҡ майға 2 йомортҡа һарыһы, 1 балғалаҡ бойҙай оно, 2 балғалаҡ таҙа бал ҡушырға. Көнө буйы сәғәт һайын 1-әр балғалаҡ эсергә.

❖ Ҡаҡырыҡты сығарыу өсөн мүк еләге (брусника) һуты сиробын бал менән эсергә.

## Бал ҡорто саҡһа...

❖ Әле умарта ҡорттары асыулы, тиҙ генә кешене сағып баралар. Бал ҡорто саҡһа, был урынды 1 стакан ҡайнаған һыуға 1 балғалаҡ сода, ярты балғалаҡ тоҙ һалып әҙерләнгән иретмә менән йыуығыҙ.

❖ Сағылған урындан ҡорттоң ҡаяуын алып ташлағас, яраға бер нисә сәғәт буйына йыш-йыш синьканың бик үк көслө булмаған иретмәһен һөртөгөҙ.

❖ Шешенеп китмәҫ өсөн дарыуханала һатылған "Супрастин", "Тавегил" йәки "Телфаст" дарыуҙарын эсергә була.

## Кәбеҫтә

❖ Брюссель кәбеҫтәһе - яман шеш сирен иҫкәртеүсе йәшелсә, уны даими ашағыҙ.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# МИФОЛОГИЯЛА - БӨРКӨТ

**Башҡорт мифологияһында бөркөт айырым урын алып тора. Ул шулай уҡ тәүбаба, ҡурсалаусы изге ҡош, күк, ҡояш менән бәйле иҫәпләнә.**

Башҡорттарҙың әкиәт фольклорында кешенең - бөркөткә, бөркөттөң кешегә әүерелә алыу күренеше был ҡоштоң тотем булыуы тураһында һөйләй ҙә инде. "Таҙ батыр" әкиәтен генә хәтергә төшөрәйек. Батырҙың атай итеп алған кешеһе бөркөткә әүерелеү һәләтенә эйә була. Ул был һәләтен Таҙ батырға бирә, ҡошҡа әйләнеү өсөн батыр яурындарын һелкетергә тейеш була. "Иҙеүкәй менән Мораҙым" эпосының бер вариантында Мораҙым Туҡтамыш хандың һаҡсылары торған тауға бөркөттөң ҡанаттарын тағып менә. Башҡорт телендәге ҡыйыу, көслө кешегә ҡарата ҡулланылған "бөркөт" тигән эпитет та кешене бөркөткә тиңләштереү тураһында белдерә. Арғаяш башҡорттары имсәк баланы "балапан" (бөркөт балаһы) тип йөрөтә. "Йәш һунарсы менән мәскәй", "Бәхет күле", "Еҙтырнаҡ" әкиәттәрендә бөркөт кешесә һөйләшә, хатта кешегә әйләнеп, ҡыҙҙарға өйләнеп, кеше кеүек тормош алып бара.

Ваҡытында билдәле ғалим-фольклорсы М. Сәғитов та башҡорт әкиәттәрендә бөркөт тәүбаба булараҡ сығыш яһауын билдәләй. Быны лингвистар ҙа, этнографик материалдар ҙа раҫлай. Бөркөт күп кенә ырыуҙарҙың ҡошо булып иҫәпләнә. Ырыу араларының ҡарағош (тиләү), бөркөт (ҡара табын), бөркөт-ҡатай (ҡатай) тип йөрөтөлөүендә лә ҙур мәғәнә ята. Хатта меңдәрҙең - мөркөт-мең, бишул табындарҙың меркет тигән ырыу этнонимдары "бөркөт" һүҙе менән бәйле булыуы ихтимал (бүрәт ғалимы Галданова, мәҫәлән, "меркит" этнонимын бөркөттө аңлатыусы монгол һүҙе "мэргэд/бургэд"тан килеп сыҡҡан тип иҫбатлай). Балапан, Бөркөт, Ҡарағош, Бөркөтхан исемдәре, Балапанов, Ҡарағошов фамилияларын да миҫал итеп килтерә алабыҙ. Башҡорттар уйлауынса, бындай исем йөрөтөүсе тотем ҡоштоң көсөн, осҡорлоғон, ҡыйыулығын ала.

Тотем ҡош булараҡ, бөркөттө үлтереү, уның ояһын туҙҙырыу, уның ояһы булған ағасты ҡырҡыу борондан тыйылған. Ышаныуҙар буйынса, был йоланы боҙоусыларҙың нәҫеленә яза киләсәк.

Ҡайһы бер мифологик сюжеттарҙан күренеүенсә, бөркөт тәүбаба булараҡ ҡына түгел, ә үлгән кешегә йәнен ҡайтара алыусы булараҡ та ҡабул ителгән. "Таҙ батыр" әкиәтендә бөркөт-бабай геройҙың танауына үҙенең бер йәнен өрөп, уны терелтә.

Фольклорҙа, йолаларҙа бөркөт иң тәүҙә ғаиләне, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙы, бала табыусы ҡатын-ҡыҙҙы һәм йәш сабыйҙы һаҡлаусы булып тора. "Бирәнһылыу - бире ҡыҙы" әкиәтендә бөркөт батырға бире ҡыҙын урлап, ғаилә ҡорорға ярҙам итә, "Санай батыр" әкиәтендә ҡыҙҙар бөркөт тырнағын үрелгән ҡайын ботаҡтарына бәйләп, буласаҡ тормош иптәше тураһында мәғлүмәт ала. Бала ауыр килгәндә, ҡатынға бөркөт тырнағы сайҡатылған һыу эсерәләр. Мәсетле районында табылған көмөш тирәскә урынлаштырылған бөркөт тырнағынан торған муйынса ла, бәлки, ошо уҡ маҡсатта ҡулланылғандыр.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

СИТ ИЛДӘН ХӘБӘР

# ӘСИРЛЕКТӘ ҮЛГӘН ЯҠТАШЫМА...

## аҡ сирень гөлләмәһе...

**Кесе Ватаныма - Пермь өлкәһендәге Барҙымыма ҡайтҡан һайын мәсеткә инмәй ҡалмайым. Унда мине һәр саҡ оло йөрәкле, ихлас имам Нәзир хәҙрәт Кучуков ҡаршылай. Ул эштәрем, сәйәхәтем, сәләмәтлегем менән ҡыҙыҡһына, башланғыстарымды, проекттарымды хуплай, кәңәштәрен бирә.**



Сираттағы ҡайтҡанымда ул миңә бер ҡағыҙ бите күрһәтте. Ул СССР Оборона министрлығының Үҙәк архивы справкаһы ине. Хәрби хеҙмәткәрҙе эҙләү, яҙмышын асыҡлау, ерләнеү урыны тураһындағы запроста Сотанай ауылынан яҡташым Ҡаҙанбаев Гәрәй Моталлап улының мәғлүмәттәре теркәлгәйне. Унда 1908 йылда Сараши ауылында тыуған Гәрәй Ҡаҙанбаевтың 1941 йылдың 24 августында әрме хеҙмәтенә алыныуы яҙылған. Уның менән бәйләнеш 1942 йылдың апрелендә өҙөлә. Ә справканың аҙағында ҡот осҡос хәбәр: 1942 йылдың 5 апрелендә Германияла әсирлектә үлә. Икенсе биттә уның һәләк булған урыны тураһында мәғлүмәт бирелә: "Шталаг 304. Цайтхайн".

Нәзир ағай шул ваҡытта миңә: "Нәсүр улым, һин төрлө ерҙәрҙә йөрөйһөң, төрлө илдәрҙәге кешеләр менән аралашаһың. Әгәр яҡташыбыҙҙың эҙен табыу мөмкинлегең тыуһа, изге эш башҡарыр инең", - тине. Мин документты үҙем менән алдым һәм был һөйләшеүҙе бер ваҡытта ла иҫемдән сығарманым. Һәм бына эҙләнеүҙәрем мине быйыл 9 майҙа элекке концентрацион үлем лагеры Цайтхайнға алып килде. Цайтхайн ситендәге 169-сы федераль трасса буйында урынлашҡан был ҡыҙыл гранит менән көпләнгән биш метр бейеклегендәге мемориал.

1941 йылдың 22 июнендә Советтар Союзына һөжүм итер алдынан вермахт юғары командалығы совет әсирҙәрен урынлаштырыу өсөн яңы 60 лагерь төҙөргә бойора. Уларҙың һәр береһендә 30 мең әсирҙе һыйҙырыу күҙаллана. Ул ваҡытта лагерҙар, башҡалары кеүек үк, Польшаның һәм СССР-ҙың оккупацияланған территорияларында төҙөлөргә тейеш була, 14 лагерға Германияның үҙендә ер бүленә. Уларҙың береһе Цайтхайн полигоны территорияһында була. 1941 йылдың апрелендә бында төҙөлөш эштәре башлана. 1941 йылдың июлендә беренсе әсирҙәр килтерелә. Теркәлгәндән, исем өсөн медицина тикшереүе һәм гигиеник таҙартыу үткәндән һуң, улар башта асыҡ һауа аҫтында йәшәй. Территория бары тик ике ҡат сәнскеле сымдан торған ҡойма менән уратыла. Хәрби әсирҙәрҙе урынлаштырырға бараҡтар ҙа, палаткалар ҙа булмай. Әсирҙәр тәбиғәт көйһөҙлөгөнән йәшенеү маҡсатынан үҙҙәренә землянка ҡаҙып ала. Бараҡтар, аш-һыу урыны төҙөү, ҡоҙоҡтар ҡаҙыу эше бының өсөн етерлек күләмдә әсирҙәр туплангас ҡына башлана. Былай ҙа етерлек кимәлдә ризыҡ менән тәьмин ителмәгән әсирҙәр һыуҙы күләүектәрҙән эсергә мәжбүр була. Бындай шарттарҙа аслыҡтан шешенеү, зәңге, хроник эс китеү киң тарала һәм былай ҙа ауыр һуғыштарҙан, оҙайлы этаптан хәлһеҙләнгән әсирҙәрҙе тағы ла көсһөҙләндерә.

1941 йылдың декабренән 1942 йылдың мартына тиклем сабыртмалы тиф эпидемияһы һөҙөмтәһендә лагерь карантинда була. Әгәр карантин башланғанға тиклем унда 10 677 әсир иҫәпләнһә, карантин бөткәндә, 1942 йылдың апрелендә, был һан ни бары 3729-ға ҡала. Лагерь ҡабул итеүбүлеү урыны булып хеҙмәт итә. Әсирҙәрҙе бер туҡтауһыҙ килтерәләр һәм алып китеп торалар: кемде эшкә, кемде фашистар тарафынан оккупацияланған икенсе илдәргә, кемде үлемгә... Мәҫәлән, 1941-1942 йылдарҙа, Дрезден гестапоһының өс криминалисынан торған оперкоманда тарафынан Цайтхайн лагерынан Бухенвальд концлагерына оҙатырға

**1 мең самаһы әсир "һайлап алына". Улар килтерелеү менән ат һарайында махсус рәүештә совет хәрби әсирҙәрен юҡ итеү өсөн йыһазландырылған камерала атыла. Һуңынан кәүҙәләре крематорийҙа яндырыла. Цайтхайнда барлығы 23 мең совет хәрби әсире юҡ ителә. Улар араһында яҡташыбыҙ Ҡаҙанбаев Гәрәй Моталлап улы ла бар.**

Лагерҙа дүрт зыярат урынлашҡан. Унда яҡташымдың исем-шәрифен оҙаҡ эҙләнем. Мемориал хеҙмәткәрҙәре биргән мәғлүмәт буйынса, Гәрәй Моталлап улының 2-се зыяратта ерләнеүен белдем. Урман араһында йөрөй торғас, ниһайәт, ҡайындар араһындағы зыяратҡа килеп сыҡтым. Уртала ҡыҙыл мәрмәр һәйкәл тора. Ерләнеүселәрҙең исем-шәрифе яҙылған 24 тимер стела. Йөрәк һыҙа... Таныш исемде эҙләйем. Һәр стелала ваҡ ҡына хәрефтәр менән 3888 кешенең исем-шәрифе яҙылған. Барыһын да уҡып сыҡтым, әммә яҡташымдың исемен тапманым. Кис тә етеп килә...

Зыяраттан сыҡтым да үләнгә ултырҙым. Тирә-яҡта бер кем юҡ. Бары тик ҡоштар ғына һайраша һәм ҡайындарға елдәр сер һөйләй. Уйланып, оҙаҡ ултырҙым... Һуңынан Мәккә яғына боролдом да, намаҙ уҡып, ҡабаттан зыяратҡа индем. Был юлы стелаларҙың һуңғыһынан башларға булдым. Эй, Хоҙайым, 10 минуттан таныш фамилияны күрҙем - Ҡаҙанбаев... Уны ҡабат-ҡабат уҡыным. Юҡ, хаталанмайым, яңылышмайым: ингән яҡтан алтынсы стела, уң яҡтағы рәттә өҫтән 32-се фамилия.

Әсирҙәр барыһы бергә оҙонлоғо - 60, киңлеге 1,8 метрлыҡ траншеяла ерләнгәндәр. Ҡәберҙәр өҫтөндә йылы май еленә аҡ, тумалаҡ башлы бәпембәләр эйелеп-бөгөлә. Уларға оҙаҡ итеп ҡарап торҙом. Әйтерһең дә, хәрби әсирҙәр ҡәберҙәренән таҡыр итеп ҡырылған баштарын сығарып: "Кешеләр, беҙ бында! Беҙ Тыуған илебеҙҙе һаҡланыҡ! Онотмағыҙ беҙҙе... Зинһар, онотмағыҙ беҙҙе!" - ти. Күҙ йәштәре аша яҡташымдың исеме эргәһенә алып килгән аҡ сирень гөлләмәһен урынлаштырҙым һәм ҡәбер траншеяһы ҡаршыһына ултырып, тағы бер тапҡыр белгән доғаларымды уҡыным. Яҡташымдың туғандарына тапшырырға тип ҡәберҙән бер ус тупраҡ һалып алдым.

Үҙәк зыяраттағы килеүселәр өсөн булдырылған журналға түбәндәге юлдарҙы яҙып ҡалдырҙым: "2015 йыл, 9 Май. Мин Рәсәйҙән (Пермь крайы, Барҙа ауылы) Нәсүр Йөрөшбаев. Бында яҡташым, 1942 йылдың 5 апрелендә Цайтхайн лагерында һәләк булған Ҡаҙанбаев Гәрәй Моталлап улының иҫтәлеген хөрмәтләргә килдем. Уға һәм фашизм тотҡондарының барыһына ла мәңгелек дан. Беҙ һеҙҙе бер ваҡытта ла онотмабыҙ! Тыныс йоҡлағыҙ, ҡәҙерле туғандар! Барҙа халҡы исеменән - Нәсүр Йөрөшбаев".

1945 йылдың 23 апрелендә Ҡыҙыл Армия частары Цайтхайн лагерын азат итә. Азат ителгәндән һуң бихисап айҙар үткәс тә элекке әсирҙәрҙең күптәре әсирлек эҙемтәһенән вафат була...

**Нәсүр ЙӨРӨШБАЕВ,**
**журналист, кинодокументалист.**

**✓ 1943 йылдың сентябрендә әсирлектән ҡасып, Ҡыҙыл Армияға ҡушыла. Ҡырымды азат итеүҙә ҡатнаша. Севастополдә алғанда, ҡул һуғышында өс дошманды үлтереп, "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән бүләкләнә.**



ЕҢЕҮСЕЛӘР ХӘТИРӘҺЕ

**Мәҡәләнең төп геройҙары - Бөрйән егеттәре Шәмсетдин Көнәфин менән Ҡадир Кинйәбулатовтар хеҙмәт иткән 136-сы уҡсылар дивизияһы составына ингән 733-сө уҡсылар полкы башта Кавказ аръяғында, фашистик Германияның союздашы булған Төркиә сиген һаҡлай. 1941 йылдың 2 сентябрендә дивизия эшелон менән фронтҡа - Украинаға оҙатыла.**

# БӨРЙӘН ЕГЕТТӘРЕНЕҢ ҠАҺАРМАНЛЫҒЫ

Дошман менән беренсе алышта, 28 сентябрҙә 733-сө уҡсылар полкы бер румын бригадаһы һәм ике немец ротаһын ҡыйрата. Артабан дивизия октябрь урталарына тиклем Днепропетровск өлкәһе Павлоград ҡалаһы тирәһендә дошмандың өҙлөкһөҙ атакаларын кире ҡағып, оборона тота. Миңә, мәҡәлә авторына, бер саҡ Павлоград ҡалаһында булырға тура килгәйне. Ҡала тирәһендә совет яугирҙарының туғандар ҡәберлеге күп булыуы тетрәндергәйне. Бында бик ҡаты һуғыштар барған - шуға шаһит был ҡәберлектәр.



*Бөрйән егеттәре - Иҫке Монасип ауылынан Шәмсетдин Көнәфин (уңдан беренсе), Кейекбай ауылынан Әхмәтбаҡый Ҡунаҡбаев, Тимер ауылынан Сәлих Баязитов (уртала), 1940 йыл.*

Октябрҙең икенсе яртыһында дивизия ашығыс рәүештә Луганск өлкәһенә күсерелә. Тиҙ арала оборона ныҡытмалары төҙөлә. 5 ноябрь көнө иртән генерал Клейстың 16 танк дивизияһы "СС-Викинг" мотопехота дивизияһы менән берлектә һөжүмгә күсә. Илбаҫарҙар Грозный, Баку нефтенә, икмәккә бай Кубань өлкәһенә ынтыла. Төп удар Дьяково ауылы янында оборона тотҡан 733-сө уҡсылар полкына тура килә. Полкка ҡаршы ҡорос стена яҡынлашҡан кеүек күренә. Маскировкалап йәшереп ҡуйылған артиллерия уты аҫтында, ҙур юғалтыуҙар кисереп, танкылар кире борола. Автоматсыларҙың да атакаһы кире ҡағыла. Аҙаҡ асыҡланыуынса, совет һалдаттарында паника тыуҙырыу маҡсатында техника һаныш күберәк итеп күрһәтергә теләп, атакаға килгән фашист танкыларына фанеранан эшләнгән танк макеттары тағылған булып сыға. 733-сө полк алдындағы һуғыш яланы янған дошман танкылары менән тула. Был картина беҙҙең һалдаттарға көс-дәрт өҫтәй, дошмандың рухын төшөрә. 6 ноябрь көнө, беҙҙең оборона линияһын көсләп артиллерия утына тотҡандан һуң, немецтар һөжүмгә күсә. Ҡаты алыш башлана. Артиллерия, бомба уты аҫтында ер яна, металл ирей, күкте төтөн менән туҙан ҡаплай. Был көндә лә дошман 45 танкыһын, 1500 һалдат һәм офицерын юғалтып, кире сигенә.

- Тамуҡ булды, тамуҡ. Күп кеше ҡырылды, - тип һөйләй ине ошо алыштарҙа ҡатнашҡан Кейекбай ауылынан Әхмәтбаҡый бабай Ҡунаҡбаев. - Һуғыш бер аҙ тынған ваҡытта Шәмсетдин Көнәфиндың миңә әйткәне хәтерҙә: "Ағай, әгәр тере ҡайта алһаҡ, аралашып, ҡунаҡ булышып ҡына йәшәрбеҙ инде". Икебеҙ ҙә иҫән ҡайттыҡ, нишләптер, саҡырыша алманыҡ.

Бөйөк Октябрь революцияһы көнөнә беҙҙең дивизия һөжүмгә күсеп, дошманға көслө удар яһай. Фашистарҙың байтаҡ тере көсө юҡ ителә, шул иҫәптән 14-се танк дивизияһы командиры генерал Репс үлтерелә. Ҡиммәтле документ, карталар, ҡорал тейәлгән 200 автомашина трофейға алына.

8 ноябрь көнө немецтар реванш алыу ниәте менән авиация ярҙамында ҙур резерв көстәр менән Дьяково ауылы районында һөжүмгә күсә. Арыған, яраланған совет яугирҙарына ярҙам көтөр урын юҡ, төп резерв көстәр Мәскәүҙе һаҡлауға йүнәлтелгән. Техника, тере көстәр нисбәте буйынса бер нисә тапҡыр күберәк булған дошман оборонаны өҙөп, дивизия полктарын айырып ҡамауға ала. Көн аҙағына беҙҙең частар алыша-алыша ҡулсаны йырып сыға. Был көн совет һалдаттарының ныҡлығы, хәрби оҫталығы менән тарихҡа инеп ҡала.

Бер нисә йыл элек интернетта Рәсәй оборона министрлығының сайтындағы электрон архивта яҡташтарыбыҙҙың ҡаһарманлығы тураһындағы документтар табылды. Уларҙың береһе - һуғыштың башынан аҙағынаса булған, үрҙә телгә алынған Шәмсетдин Көнәфин. Хөкүмәт наградаһына тәҡдим ителгән документта түбәндәгеләр яҙылған: "1941 йылдың 8 ноябрендә Дьяково ауылы янындағы ҡаты бәрелештә иптәш Көнәфин Шәмсетдин үҙенең ҡул пулеметынан дошмандың ҡырҡлап һалдат һәм офицерын юҡ итте. Үҙ ҡоралын таҙа, яҡшы сифатта тотҡанлыҡтан, уның пулеметы тотҡарлыҡһыҙ эшләне. Ике тапҡыр ҡулына яраланып, күп ҡан юғалтыуға ҡарамаҫтан, батыр пулеметсы иптәш Көнәфин үҙ ҡоралын ташламай, дошманға ут асыуын дауам итте. Ҡамауҙа ҡалған пулеметсы Көнәфин дошман автоматсылары ҡуласаһы аша үҙенә юл ярҙы, мәргән уты менән үҙ отделениеһына ҡамауҙан сығыуға булышлыҡ итте. Күрһәткән ҡаһарманлығы өсөн иптәш Көнәфин Хөкүмәт наградаһы - Ҡыҙыл Байраҡ орденына тәҡдим ителә".

Үкенескә күрә, Шәмсетдин бабайға ваҡытында наградаһын алырға насип булмай. Ноябрь аҙаҡтарында сираттағы алышта яраланып, һуғыш яланында ятҡанында, эргәһенә ике немец һалдаты килеп, автоматтың тоҫҡай. Шул секундтарҙа яралы яугирҙың яҙмышы хәл ителә. Үҙ-ара бер аҙ һөйләшкәндән һуң, Шәмсетдин бабайҙы әсирлеккә алалар. Хәрби әсирҙәр лагеры лазаретында барлы-юҡлы медикаменттар менән дауаланып, иптәштәре ярҙамында аяғына баҫа. 1943 йылдың сентябрендә әсирлектән ҡасып, Ҡыҙыл Армияға ҡушыла. Ҡырымды азат итеүҙә ҡатнаша. Севастополдә алғанда, ҡул һуғышында өс дошманды үлтереп, "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән бүләкләнә. Һуңғы алған ҡаты яранан һуң хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙ тип табылып, 1944 йылдың августынан санитар поезға келәт мөдире итеп тәғәйенләнә. Һуғыш бөткәнсе фронттан тылға яралылар ташый.

1970 йылдар башында Көнәфин Шәмсетдин бабайҙы мәктәпкә, балалар менән осрашыуға саҡырып, һуғыш тураһында һөйләүен һоранылар. Мыҡты ҡәүҙәле, ҡөр тауышлы, кешегә һәр саҡ яғымлы бабайҙың күҙенә йәш килеп, күңеле тулып, бер һүҙ ҙә әйтә алманы. Һуғыштың һөйләп аңлата алмаҫлыҡ фажиғә - афәт икәне шунан да күренә ине. Ҙур ғаилә башлығы Шәмсетдин бабай фронтта алған яраларынан арына алмай, ҡаты ауырып, 1974 йылда 56 йәшендә донъя ҡуйҙы. 2014 йылдың 8 майында Шәмсетдин бабайҙың ҡан түгеп яулаған Ҡыҙыл Байраҡ ордены юллап алынып, тантаналы рәүештә кесе улы Ихсанға тапшырылды.

Күптән түгел Иҫке Собханғол урта мәктәбенең информатика уҡытыусыһы Рөстәм Вәлиуллин икенсе геройҙы - Ҡадир Кинйәбулатовты тапты. Уның наградаҡағыҙында: "1941 йылдың 8 ноябрендә Дьяково ауылы районында 5-се уҡсылар ротаһының өсөнсө взводына ҡаршы атакаға фашистар ротаһы килә. Беренсе номер ҡул пулеметсыһы, ышаныслы иптәш ҡыҙылармеец Кинйәбулатов һалҡын ҡанлылыҡ менән дошманды кире ҡағырға әҙерләнә. Ошо көндә генә пулеметсы фашистарҙың 60 кешеһен юҡ итә. Дошман атакаһын кире ҡағып, ҡыҙылармеец Кинйәбулатов яралы иптәштәренә ярҙам итә һәм үҙ отделениеһынан ике ҡаты яралыны һуғыш яланынан алып сыға. Күрһәткән батырлығы һәм ҡаһарманлығы өсөн ҡыҙылармеец Ҡадир Кинйәбулатов Хөкүмәттең юғары наградаһына - Ленин ордены менән Советтар Союзы Геройы исеменә тәҡдим ителә", - тиелә.

Артабан ни сәбәплеләр яҡташыбыҙҙың батырлығы Ленин орденына ғына лайыҡ тип табыла, ә Советтар Союзы Геройы исемен биреү тураһында һүҙ онотторола.

Ленин ордены СССР дәүерендә иң юғары награда һанала. Һуғыш ваҡытында был орден менән ҙур батырлыҡ, ҡаһарманлыҡ күрһәткән өсөн бик һирәктәр генә наградлана. Үкенескә күрә, данлыҡлы яҡташыбыҙҙың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ. Меңәрләгән башҡа яу батырҙары менән берлектә уны ла рәхимһеҙ уты һуғыш машинаһы йотҡандыр. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусылар исемлеге яҙылған "Хәтер китабы"нда ла уның исем-шәрифе күренмәй. Бөгөн Бөрйәндә уны хәтерләгән кеше лә ҡалмаған. Ошо мәҡәлә донъя күргәс, Ҡадир Кинйәбулатов тураһында өҫтәмә мәғлүмәт табылыр тип ышанғы килә.

Һүҙ ыңғайы әйтеп үтергә кәрәк, составында үлемһеҙ 733-сө полк булған данлыҡлы гвардия исеме алған 136-сы уҡсылар дивизияһы Дьяково ауылы янында 1942 йылдың июненә тиклем дошманды үткәрмәй тотоп тора.

Ҡайны саҡ, "беҙ дошманды мөғжизә менән ендек", тигән һүҙҙәрҙе ишетергә тура килә. Был мөғжизә Тыуған ил өсөн үҙен ҡорбан итергә әҙер булған совет кешеһенең ҡаһарманлығынан тороуына шик юҡ.

**Заһир ДӘҮЛӘТБИРҘИН.**
**Бөрйән районы.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

## БАШҠОРТТАР
## Башҡорттарҙың этногенезы мәсьәләләре

Беренсе өлкәнән - көнбайышта, Өфө ҡалаһы параллеленән көньяҡта урынлашҡан икенсе йәки көньяҡ-көнбайыш өлкә дөйөм башҡорттарға хас булған антропологик күрһәткестәр менән ҡылыҡһырлана. Был өлкә башҡорттары күпселек осраҡта ҡара сәсле һәм ҡуңыр йөҙлө (69,7 процент ҡуңыр тип), уртаса буйлы (164,8 сантиметр), скелия күрһәткесе көнсығыш өлкә башҡорттарыныҡы кеүек уҡ (87,2). Баш күрһәткесе (түңәрәк башлылар 69,4 процент булғанда 81,3), танау (73,3), йөҙ (76,3), бит киңлеге (143,2 мм) беҙ тикшергән барлыҡ башҡорттарҙан алған уртаса күрһәткестәргә тап килә.

Был өлкәнең ырыу төркөмдәренең дөйөм оҡшашлығы, антропологик сифаттарҙың дөйөм күрһәткесе араһында барыбер ҙә өлкәнә ике: көньяҡ һәм көнбайыш райондарға бүлер айырмалыҡтар бар. Көньяҡ районға барлыҡ ҡыпсаҡтар (гәрәй - һәм ҡарағай-ҡыпсаҡтарҙан башҡа) һәм улар менән йәнәш йәшәүсе бөрйәндәр ҡарай. Төньяҡ район башҡорттары составына табындар, юрматылар һәм меңдәр инә. Был өлкә башҡорттарының пигментация дәрәжәһе, буй оҙонлоғо, танау формаһы, йөҙ күләме һәм формаһы барлыҡ ырыу төркөмдәрендә лә бер иш булып сыҡты. Бары тик иҡе билдә - сағыштырмаса ҡыҫҡа аяҡлылыҡ һәм һиҙелерлек түңәрәк башлылыҡ көньяҡ районы башҡорттарын төньяҡтағыларҙан айыра. Шул уҡ ваҡытта, йөҙ формаһы буйынса ҡарағанда, улар күрше - беренсе өлкәнең көньяҡ башҡорттарына яҡынырaҡ.

Көньяҡ-көнбайыш өлкәнең көньяҡ районы халҡы өсөн төрлө антропологик сифаттарҙың шәхси һәм ырыу төркөмдәре буйынса етди тирбәлеүе хас. Был ошо өлкә халыҡтары составына килеп инеүсе төрлө ҡәбиләләрҙең берәм-бөртөк вәкилдәренең етерлек кимәлдә тигеҙләнмәүен күрһәтә. Икенсе төрлө итеп әйткәндә, бында төп башҡорт ҡәбиләһе бөрйәндәр һәм һуң ғына килгән ҡыпсаҡтар ҡуҙаллана.

Көньяҡ-көнбайыш өлкәнең төньяҡ районында уның составына инеүсе өс ырыу төркөмө араһында уртаса күрһәткестәр бик яҡын. Был районда беҙ Башҡортостандың башҡорттары менән ҡатышып татарҙар, мишәрҙәр, сыуаштар, типтәрҙәр, ә төньяҡтараҡ - мари һәм удмурттар йәшәгән өлөшөнә аяҡ баҫабыҙ.

Ҡәбиләнең йәки ырыуҙың физик тибын теге йәки был халыҡтың килеп ҡушылыуы нисек үҙгәртә алыуын күҙаллау өсөн күрше мең ырыуының слы һәм илкүлмең-күлмендәренең уртаса күрһәткестәрен сағыштырыу ҙа етә. Мин слы-мендәрҙе тикшергән ауылда пигментация бик түбән (33,3 процент). Улар өсөн ҡыҫҡа буй хас (163 сантиметр), ҡыҫҡа аяҡлылар (скелия күрһәткесе 84,4), мезатикефалдар (37,5 процент түңәрәк башлылар булғанда баш күрһәткесе 79,5), сағыштырмаса тар танаулылар (танау күрһәткесе 71,3) һәм оҙонса йөҙлөләр.

*✓ Глобалләшеү күренеше киң һынылыш алған һайын, айырым кешенең йәшәү даирәһе тарая бара. Кеше үҙе башҡалар менән аралашыу сиктәрен яба, ишегенә йоҙаҡ ҡуя, ҡоймалар бейегәйә.*



# КЕШЕЛЕКТЕҢ тәбиғәткә кире

**Дамир менән танышҡандан алып бер туҡтауһыҙ һөйләшәбеҙ, төрлө темаларға әңгәмәләр алып барабыҙ. Бындай фекер алышыуҙар үткән быуаттың 90-сы йылдар башында Дамир Белорет районының "Урал" гәзитендә эшләп йөрөгән саҡта танышҡас та уҡ башланғайны. Тора-бара беҙҙең бындай әңгәмәләшеүҙәр шиғри әйтеш формаһы алып, "Шоңҡар" журналында, "Киске Өфө" гәзитендә, Дамирҙың шиғыр китабында баҫылды. Әле килеп беҙгә"Ағиҙел" журналының бер бүлмәһендә ултырып эшләргә насип булды. Әңгәмә-һөйләшеүҙәребеҙ, хәҙер инде арыуыҡ ҡына тормош тәжрибәһе туплағас, тағы ла тәрәнерәк юҫыҡта дауам итә. Дамирҙың түңәрәк йәше етеп килеүен иҫкә төшөрөп, бер көн диктофонымды тоҡандырып, дуҫымдың ошо фекерҙәрен яҙып алдым. Бында, әлбиттә, шағирҙың мең дә бер кисенең бер кисендә генә әйткән фекерҙәре.**
**Шағир, прозаик, тәржемәсе, журналист Дамир Шәрәфетдинов Белорет районының Көнбә ауылында Зөлфиә һәм Мөлкаман Шәрәфетдиновтарҙың 12 балалы ғаиләһендә 10-сы бала булып донъяға килгән. Дуҫым әңгәмәһен бәхетле баласағын иҫкә алыуҙан башланы.**

## Атайым

Атайым Мөлкаман Әхмәтйән улы ике һуғышта (фин, Бөйөк Ватан һуғыштары) ҡатнашҡан, әммә һуғышта күргәндәрен бер ваҡытта ла һөйләмәне. Осрашыуҙарға йөрөргә тырышманы. Ә бына Германиялағы тормош, немецтарҙың көнкүреше хаҡында һөйләгәне хәтерҙә. Бер эште яңылыш эшләһәң, "немецтар бына уны бер ҡасан да улайтмай", тип әйтер ине. Ғөмүмән, атайыбыҙ һүҙгә әүәҫ булманы. Минең хәбәр һатырға ятыуым күберәк әсәйемдән киләләр. Атайыбыҙ ике генә класс белеме булһа ла, башҡорт телендәге бөтә матбуғатты алдырып, кистәрен шәм яҡтыһында ижекләп уҡып, бик оҙаҡ ултырыр ине. Бик талапсан булды. Ул төн уртаһында эштән ҡайтып инә лә, ашап алғас, ишек алдына, һарайға сығып, көндөҙ беҙгә ҡушҡан эштәрҙең үтәлеү-үтәлмәүен тикшереп инә. Әгәр ҙә эшләнмәгән булһа, иң өлкән ағайҙы шундуҡ уятып, теге эште башҡарырға сығарып ебәрә. Һуңынан тикшерә. Иртәгеһен өлкән ағай инде беҙҙе эшкә егә. Беҙҙең ғаиләнең "баҫҡыслы" субординацияһы шул рәүешле ҡоролғайны.

Ауыл советы депутаты булараҡ та, атайыбыҙ бик талапсан, принципиаль, ғәҙел булды. Иҫләүемсә, бәләкәй сағымда сход йыйып, бер апайҙы ауылдан ҡыуып ебәрҙеләр. Ауылдан ҡыуырлыҡ булғас, ғәйебе лә булғандыр инде. Беҙ бәләкәй саҡта ауылдың община системаһы эшләп, унда атайыбыҙ төп ҡылда уйнай ине.

Мин ун ике йәшемдән атайыма эйәреп урманға йөрөй башланым. Уның ентекле һәм тынғыһыҙ холҡона аптырай инем. Бер генә маҡсат менән йөрөмәне ул урманға. Бер юлы егермеләп эште башҡарырға тип барҙы. Ул бер юлы һәнәк һаплыҡ ҡарай, ағасын ҡырҡһа, ботаҡтарынан миңә миндек бәйләргә ҡуша. Шундуҡ һалабашҡа йүкә ағасы ҡарап ҡайта, ҡайын туҙынан тырыз әтмәләп тә өлгөрә. Урманда йүкә һыҙырырға ла өйрәтте ул миңә. Ғөмүмән, атайым урманда йөрөгәндә ниндәйҙер ағас, үлән, таш күрһә, бынан нимә эшләп була, тип уйлай башлай ине. Уның ошо ғәҙәте миңә күскәндер. Мин дә, журналист булараҡ, ҡайҙалыр нимәлер күреп ҡалһам, ул фотомы, тарихи документмы, башҡа төрлө сығанаҡмы, шуны, кәрәк булыр әле, тип һаҡлайым.

## Бала сағым баҫмаһы

Хәҙерге тормошом менән сағыштырғанда, бала сағым күпкә сағыуыраҡ һәм ҡыҙыҡлыраҡ ине. Был заманға түгел, ә үҙем тыуып үҫкән ғаиләгә һәм яҙмышыма бәйле. Әллә ни ауырлыҡтар, ҙур бәләләр, ҡайғылар эләкмәне бала сағымда. Ул саҡта ҡыҙыҡлы һәм тулы ҡанлы тормош булды. Ауылыбыҙ ҙур түгел, егермеләп кенә өйҙөң һәр береһендә унарлаған бала булып, ҙур бер ғаилә булып йәшәнек. Беҙ, малайҙар һәм ҡыҙҙар, үҙебеҙҙе ҙур бер ғаиләлә йәшәгән һымаҡ итеп тойҙоҡ. Кемдәргә генә барһаң да, уларҙа нисәгә тиклемдер ултыраһың да, йоҡлап ҡалаһың. Иртәгеһенә шул уҡ өйҙән мәктәпкә юлланаһың. Ауылыбыҙ ҡаланың егерме фатирлы биш ҡатлы йорто һымаҡ булды. Ҡалала иһә, биш ҡатлы йортта ғүмер буйына йәшәп тә, күрше күршеһен белмәүе бар. Беҙ бала саҡта, кем әйтмешләй, моғайын, шул коммунизмда йәшәгәнбеҙҙер. Биш йәшлек бала өйөнән сығып китеп, ҡайҙа барһа ла, кемдә ашап-эсеп, йоҡлап сыҡһа ла, ата-әсәһе уның өсөн борсолманы. Ауылыбыҙ үҙ ҡанундары менән йәшәгән үҙенә күрә бер айырым дәүләт, ижтимағи ойошма кеүек ине. Хәҙер ундай ауылдар ҡалдымы икән? Бала сағым бәхетлерәк булған. Сағыштырып ҡарағанда, бөгөн донъя күпкә хәүефлерәк, хөртөрәк, насарыраҡ. Кешеләрҙең тормошон яҡшыртыу һылтауы менән шул тормошто емереү кәрәк булдымы икән? Ул ваҡытта кеше күп йәһәттән яҡлаулы, һаҡлаулы ине. Медицина, мәғариф, фатир бушлай булды, кешенең төп йәшәү сығанағын тәьмин итерлек эше булды.

Беҙҙең ауылда, аптыраған көндән тип әйтәйемме, бик матур бер йола бар ине. Яҙ һайын ауылыбыҙ янындағы Инйәрҙә һыу ташып, ярҙарына кире ҡайтҡас, ауылыбыҙҙың арты менән шыуғанынан алып таяҡҡа таянғанына тиклем сығып, бер көн эсендә яҙғы ташҡын алып киткән баҫма урынына яңыһын һалып ҡуя торғайныҡ. Бер көн эсендә йәйәүле кеше атлап сығып йөрөрлөк баҫма әҙер була. Кис күмәкләп аҡса йыйып, бер кешенең һарығын һатып алып, шуны бешереп, ауылыбыҙ менән йылға ярында байрам ойоштора инек. Беҙҙең өсөн баҫма йылға аша сыға торған ҡоролма ғына түгел, оло донъя менән тоташтырыусы, бер маҡсатта ойоштороусы ысул, сара ла булды. Хәҙер иһә был "баҫма"ны интернет алыштырҙы, тик ул, баҫманан айырмалы рәүештә, кешеләрҙе берләштереү урынына айырҙы ғына. Беҙ, малайҙар, өлкәндәргә эйәреп, ауылыбыҙға исем биргән бәләкәй генә Көнбә йылғаһы аша үҙебеҙгә "баҫма" һалып маташа инек.

*Көндән-көнгә Америка индивидуализмы Рәсәй коллективизмын еңә бара. Был иң беренсе нәүбәттә ғаиләләрҙе, милләттәрҙе, һуңғы сиктә дәүләттәрҙе тарҡатыуға килтерәсәк. Шул уҡ ваҡытта бер үк енестәге кешеләрҙең никахына Европаның алдынғы тип иҫәпләнгән дәүләттәре "йәшел урам"аса. Хәҙер барлыҡ сиктәр юйыла, иң аҙаҡтан кеше бер үҙе тороп ҡалмаҫ, тимә. Донъя берләшкән һайын, кешеләр бер-береһенән алыҫлаша. Тағы ла бер күренеш: ауылдар ҙурайған һайын, уның берҙәмлеге тарҡала башлай. Икенсенән, уртаҡ бәләләр кешеләрҙе берләштерә. Тормош яҡшыра барған һайын кешеләрҙең бер-береһенән алыҫлаша барыуын да ошоноң менән аңлатып булалыр. Йәшәү рәүеше лә кешеләрҙе берләштерә.*

## Айырымланыу

Глобалләшеү күренеше киң һынылыш алған һайын, айырым кешенең йәшәү даирәһе тарая бара. Кеше үҙе башҡалар менән аралашыу сиктәрен яба, ишегенә йоҙаҡ ҡуя, ҡоймалар бейегәйә. Хәҙер балалар ҙа урамға сығып, күрше балалар менән аралашыу, уйнау урынына, өйөндә экранға төбәлә, оло донъяға интернет аша ғына сығыуҙы хуп күрә. Был хәл беҙҙең бәләкәй генә ауылда ла күҙәтелә. Тотош ауылдағы айырымланыу бер хәл, ғаилә эсендә лә һәр кем үҙенең бүлмәһенә бикләнеүҙе хуп күрә. Бер һалға ултырып, бер йылға буйлап йөҙөргә тейешле ғаилә ағзалары һәр ҡайһыһына айырым һал төҙөй. Артабан фатирҙың һәр бүлмәһендә лә телевизор, телефон, интернет барлыҡҡа килә, һәр ғаилә ағзаһы үҙенә еңел машина һатып ала. Бергәләшеп табын янында кис ултырыуҙар ҙа онотола башланы. Был ваҡытта һәр кем үҙ бүлмәһендә айырым программа ҡарай, йәғни айырым тормош менән йәшәй. Көндән-көнгә Америка индивидуализмы Рәсәй коллективизмын еңә бара. Был иң беренсе нәүбәттә ғаиләләрҙе, милләттәрҙе, һуңғы сиктә дәүләттәрҙе тарҡатыуға килтерәсәк. Шул уҡ ваҡытта бер үк енестәге кешеләрҙең никахына Европаның алдынғы тип иҫәпләнгән дәүләттәре "йәшел урам"аса. Хәҙер барлыҡ сиктәр юйыла, иң аҙаҡтан кеше бер үҙе тороп ҡалмаҫ, тимә. Донъя берләшкән һайын, кешеләр бер-береһенән алыҫлаша.

Тағы ла бер күренеш: ауылдар ҙурайған һайын, уның берҙәмлеге тарҡала башлай. Икенсенән, уртаҡ бәләләр кешеләрҙе берләштерә. Тормош яҡшыра барған һайын кешеләрҙең бер-береһенән алыҫлаша барыуын да ошоноң менән аңлатып булалыр. Йәшәү рәүеше лә кешеләрҙе берләштерә. Элек беҙҙең ауылда электр уты юҡ саҡта ҙур мискә менән кәрәсин алып киләләр ине. Шул кәрәсинде һәр өйгә тигеҙ итеп бүлә торғайнылар. Бында, теләйһеңме-теләмәйһеңме, бүлешеүҙә ҡатнашаһың. Сөнки яҡтылыҡ ихтыяжы быны һиңә мәжбүр итә. Хәҙер беҙҙең ауылда "Ильич лампалары" яна һәм кәрәсин бүлеү, йәғни күмәкләшеп бер мәсьәләне хәл итеү ихтыяжы ла юҡҡа сыҡты.

Беҙ әле "Барыбыҙ бер ғаилә, дуҫтарым бихисап" тип "Бәйләнештә" сайтында ултырған булабыҙ. Ысынында беҙ берберебеҙҙән шул тиклем алыҫтабыҙ. Нисек кенә сағыу булмаһын, виртуаль аралашыу тәбиғи аралашыуға етмәй. Нимә ул виртуаль донъя? Ул алдаҡ донъя. Унда һин кем менән аралашып-дуҫлашып ултырғаның ла белмәйһең. Кем әйтмешләй, кемгәлер дуҫ булыр өсөн унын менән кәмендә бер бот тоҙ ашарға ла кәрәк бит әле. Һөҙөмтәлә дуҫлыҡ төшөнсәһенә еңел генә ҡараш барлыҡҡа килә. Ҡыҙҙар, бәлки, был сайт аша ғүмер буйына аралашырға ла ризалыр. Ә беҙ, ир-ат, ул кешене яҡындан күргебеҙ, һөйләшкебеҙ, тотоп ҡарағыбыҙ килә.

Интернетты, компьютерҙы мин кешелек үҫешенең ҡыҫҡа ғына осоролор, тип уйлайым. Әле был осор беҙҙә кәмендә илле йыл бара. Ундай технократик осорҙар кешелек тарихында бик күп булған. Заманында кино һәм кинотеатрҙар уйлап сығарылғас, был күренеш мәңгелек дауам итер, тип уйлағайныҡ. Юҡ, булманы, телевизор уйлап табылғас та, кинотеатрҙарға йөрөмәй башланылар. Шунан компьютер, интернет барлыҡҡа килгәйне, телевизор икенсе планға күсте. Пейджерҙы кеҫә телефондары, хатты электрон почта алыштырҙы. Технократик үҫеш юлы - ул бер ҡайҙа ла алып бармаған юл ул. Ул кешене һәр ваҡыт "тупик"ҡа алып килеп терәй. Килер бер көн, кешелек интернеттан да ялҡасаҡ, уны башҡа ысул алмаштырыр йә булмаһа ул тик эш өсөн кәрәк урындарҙа ғына ҡаласаҡ.

## Иммунитет - тәбиғәттә

Шундай һорау: ни өсөн кешегә ҡарағанда бик күп тапҡырҙар насарыраҡ, санитария нормаларына тап килмәгән шарттарҙа йәшәгән хайуандар һәм йәнлектәр яман шеш ауырыуынан азат һуң? Был һорауға яуап бирер алдынан шундай һорауға ла яуап талап ителә: нимә һуң ул яман шеш ауырыуы? Яман шеш, ҡәҙимге шештән айырмалы рәүештә, бар тәнгә таралып, башҡа күҙәнәктәрҙе лә һәләк итә. Яман шешкә организмдың ҡаршы тороу көсө - иммунитеты булмай. Иммунитет фәҡәт тәбиғәттә йәшәгән тере йәндәрҙә тәбиғи юл менән барлыҡҡа килә. Тәбиғи шарттарҙа йәшәгән организм һәр төрлө сиргә ҡаршы дауаһын да барлыҡҡа килтерә. Хайуандар менән йәнлектәрҙең яман шеш ауырыуынан азат булыуы уларҙың тәбиғәттән айырылмауы менән аңлатыла ла инде. Ә кеше

***✓ Икенсенән, бүреләр бер-береһенә аяулы, үҙ затын боғаҙламай. Ә кеше кешене миллионлап ҡыра. Ошоларҙан һуң кем йыртҡысыраҡ икән?***

күптән инде тәбиғәттән киткән. Беҙ тәбиғәткә экскурсияға, походҡа ғына барып ҡайтабыҙ ҙа, вәссәләм. Беҙ тәбиғәттән ҡасҡанбыҙ ҙа, ауырыуҙарға һәм сирҙәргә килеп ҡапҡанбыҙ. Эт менән бесәй ныҡ ауырый башлаһа, тәбиғәткә сығып китә лә, кәрәкле үләндәрҙе табып ашап, тиҙ генә һауыға ла ҡуя. Беҙ ҙә халыҡ медицинаһына ҡайтырға ынтылабыҙ ҙа ул, әммә бәйләнеш өҙөлгәнлектән, был медицинаның иң примитив ысулдарын ғына ҡулланабыҙ.

Иммунитет - тәбиғәттең үҙендә. Кеше иһә йөҙ йыл инде тәбиғәттән айырылып йәшәй. Һатып алған һөттө һыуытҡысҡа ултыртып, аҙна һыуҙымында эсәбеҙ. Аҙна-ун көн буйына әсемәгән ниндәй һөттәр инде ул? Һауылған һөттөң файҙалы мөҙҙәте ике сәғәт. Беҙ һөттө төрлө химик элементтар ҡушып, оҙаҡ һаҡлап эсеп, үҙебеҙгә зыян ғына килтерәбеҙ.

Прививка ысулы менән иммунитетты күтәрергә тырышатөп маҡсаты итеп ҡуйҙы. Әммә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тәбиғәтте барлыҡ уңайлыҡтары булған йорт һалып ҡына үҙгәртеү мөмкин түгел.

Беҙ айыуҙар тураһында кинолар, тапшырыуҙар ҡарарға яратабыҙ. Ә беҙ бит шул айыуҙарҙан бер яғыбыҙ менән дә айырылмайбыҙ. Аҡылыбыҙ бар, шуға күрә беҙ уларға ҡарағанда яҡшыраҡбыҙ, тибеҙ. Асылда, беҙҙең кеүек юлдан китмәүе менән айыу беҙгә ҡарағанда аҡыллыраҡтыр ҙа әле. Бүрене беҙ, йыртҡыс, тибеҙ, ә бит тәбиғәт уны шулай итеп яралтҡан. Бүреләр ит ашамайынса, ҡан эсмәйенсә йәшәй алмай. Йәшәү рәүештәре шулай булғас, был йыртҡыслыҡҡа инмәй. Шул уҡ ваҡытта кеше шул уҡ бүре ашаған йәнлектәрҙе бешереп, тәмләп тороп ашай. Икенсенән, бүреләр бер-береһенә аяулы, үҙ затын боғаҙламай. Ә кеше кешене миллионлап ҡыра. Ошоларҙан һуң кем йыртҡысыраҡ икән?

себештәрен башҡа ҡоштар баҫып сығара. Билдәле булыуынса, кәкүк балаһын ағыулап үлтермәҫ өсөн йомортҡаһын башҡа ҡоштарҙан баҫтырып сығара. Тап шул осорҙа кәкүктең ауыҙынан ағыу бүленеп сыҡҡанға, тәбиғәт уны ошо юлға баҫтыра. Тағы ла шуныһы ҡыҙыҡлы: кәкүк балаһы ҡайһы ояла морон төртөп сыға, йылы яҡҡа яңғыҙы барып, яҙ кире әйләнеп килгәс, тап шул ояға үҙенең йомортҡаһын баҫтырырға һала. Был саҡта кәкүктең барлыҡ маҡсаты шул ояны табыуға һәм сәпсектең үҙ йомортҡаларын һалған ваҡытын һағалауға ҡайтып ҡала. Кәкүктең балаһын сәпсек баҫып сығарып, ашатып үҫтерһә лә, ул сәпсек булып китмәй, ә кәкүклеккә тоғро булып ҡала. Кешеләр араһында иһә, киреһенсә, ҡыҙ ҡайһы милләт вәкиленә кейәүгә сыға, балаһы шул милләттең вәкиле була ла китә. Тимәк, беҙгә кәкүктәрҙән һәм сәпсектәрҙән күп нәмәгә өйрәнергә кәрәк әле.

Шуға күрә бер һандуғас һайраған ерҙә икенсеһе бер ваҡытта ла һайрамай. Шул уҡ ваҡытта шул һандуғас биләмәһендә әллә нисәмә төрлө ҡоштар йәшәп ятыуы бар, улар бер-береһенә ҡамасауламай. Мин бер таллыҡта ғына һигеҙ төрлө ҡоштоң бер юлы һайрауына шаһит булғаным бар. Ҡоштар үҙ донъяһында камил йәмғиәт, демократик дәүләт төҙөй алған. Беҙгә уларҙан күп нәмәгә өйрәнергә кәрәк әле.

Үткән ялда баҡса тирәһендә эш менән булышып йөрөһәм, былтыр килеп һайраған көйәҙ һандуғас быйыл әйләнеп ҡайтып, шул уҡ урынға ҡуныр, шул уҡ йырын йырларға тотондо. Мин уны былтыр фотоға төшөргәйнем, быйыл да төшөрҙөм. Һандуғас әллә ҡайҙарҙа йөрөп, баҡсама кире әйләнеп ҡайтты.

## Әҙәбиәт - минең хобби

Әҙәбиәт менән шөғөлләнеүҙең, минеңсә, өс сәбәбе бар: ытта иҫкә төшә торған ғәмәл, уны профессияға әүерелдерерлек форсат-мөмкинлек булманы. Әгәр ҙә алтмышынсы йылдарҙа йәшәһәм, профессиональ кимәлдә яҙыусылыҡ менән шөғөлләнә алыр инем. Һаман да әҙәбиәт менән шөғөлләнергә форсат табыуыма үҙемә рәхмәт әйтеп ултырам әле ул.

Аҙ һанлы халыҡтың яҙыусыһы булыу ижадсыны сикләгәнен беҙ бик яҡшы тоябыҙ. Сөнки беҙ иң беренсе нәүбәттә уҡыусыбыҙ, йәғни халҡыбыҙ хаҡында уйларға, борсолоп йәшәргә бурыслыбыҙ. Бында сәйәсәттән алыҫҡа китеп булмай. Беҙҙең уҡыусылар даирәһе бик тар һәм улар беҙҙең эргәлә генә йөрөй. Аудитория тарлығы идея, сюжет тарлығына ла алып килә. Беҙ уҡыусыбыҙҙың ниндәйлеген күҙ алдына килтереп ижад итәбеҙ. Әйтәйек, мин алдан уҡ яҙасаҡ китабымдың Германияла баҫылып сығырын белһәм, башҡорт менталитетын немецтар аңларлыҡ итеп һүрәтләр инем. Беҙ ҡасан баҫылыр, кем уҡыр, тип иҫәп тотоп ижад итәбеҙ. Беҙҙә ижадсы заманға яраҡлаша, киреһенсә булырға тейештер ҙә бит.

# ҠОТОЛОУ ЮЛЫ - ҡайтыу

быҙ. Уның составында көсһөҙләнгән ауырыу, сир вирустары була. Йәғни кешене көтөләсәк ауырыу менән алдан уҡ ауыртып, уға ҡаршы иммунитет уятырға итәбеҙ. Әммә прививка - ул яһалма иммунитет, барыбер ҙә организмдың үҙе барлыҡҡа килтергән иммунитеты түгел. Прививка яһаған осраҡта организм, халыҡ теле менән әйткәндә, "яман өйрәнә" һәм прививка яһамаған икенсе осраҡта ауырыуға ҡаршы тора алмай.

Ауырыған саҡта тән температураң күтәрелһә, ҡыуанырға кәрәк. Сөнки көслө организм ғына үҙендәге вирустарҙы үлтерер өсөн тән температураһын күтәреүгә һәләтле. Беҙ иһә был осраҡта ла тән температураһын төшөрөү сараһын күрәбеҙ. Ҡоштар ни өсөн бер ваҡытта ла ауырымай? Сөнки уларҙың тән температураһы даими рәүештә 41 градус. Ә беҙ медицина фәненән шуны беләбеҙ: бындай юғары температурала барлыҡ вирус-бактериялар, шул иҫәптән яман шеш вирустары һәләк була.

## Кем йыртҡысыраҡ?

Зоотехник булараҡ, хайуандар, йәнлектәр тормошон ситтән күҙәтеп, кешелек өсөн шундай һығымталар яһаным. Кешеләр үҙҙәрен тереклектең шундай бер элиталы өлөшө тип һанап, үҙҙәренең дә хайуан булыуын онотҡан. Үҙен юғары, башҡаларҙы түбән итеп ҡуйған. Йөҙ түгел, хатта мең йыл электер әле кеше үҙен яһалма системалар менән уратып алып, комфортҡа, анһат йәшәүгә ынтылыуҙы үҙенең

Кешелектең ҡотолоу юлы, минеңсә, тәбиғәткә кире ҡайтыуындалыр. Беҙҙең атай-олатайҙарҙың йәшәү рәүеше шулай булған: улар йәй тәбиғәттә йәшәгән, ҡыш ауылға ҡайтҡан.

## Ҡоштар үҙ "милләтенә" тоғро

Башҡортостанда 278 төр ҡош барлығы билдәле. Мин уларҙың яртыһы хәтлеме хаҡында мәғлүмәт тупланым. Уларҙың башҡортса атамаларын, фотоһүрәттәрен таптым. Йыйып бөткәс, киләсәктә уны айырым китап итеп сығарырмын, тим. Бынан тыш, башҡорт аттары тураһында мәғлүмәт туплайым.



***Кәкүк балаһы ҡайһы ояла морон төртөп сыға, йылы яҡҡа яңғыҙы барып, яҙ кире әйләнеп килгәс, тап шул ояға үҙенең йомортҡаһын баҫтырырға һала. Был саҡта кәкүктең барлыҡ маҡсаты шул ояны табыуға һәм сәпсектең үҙ йомортҡаларын һалған ваҡытын һағалауға ҡайтып ҡала. Кәкүктең балаһын сәпсек баҫып сығарып, ашатып үҫтерһә лә, ул сәпсек булып китмәй, ә кәкүклеккә тоғро булып ҡала. Кешеләр араһында иһә, киреһенсә, ҡыҙ ҡайһы милләт вәкиленә кейәүгә сыға, балаһы шул милләттең вәкиле була ла китә. Тимәк, беҙгә кәкүктәрҙән һәм сәпсектәрҙән күп нәмәгә өйрәнергә кәрәк әле. Кәкүк үҙ асылына тоғро.***

Ҡоштар донъяһы ҡыҙыҡлы һәм мөғжизәле. Башҡортостанда йөҙҙән ашыу милләт вәкиле йәшәй, тигән булабыҙ, ә бына өс йөҙгә яҡын ҡанатлы дуҫтар йәшәүе хаҡында хатта уйлап та бирмәйбеҙ. Шул ҡоштарҙың бер төрө - кәкүктәр. Уларҙы паразит ҡоштар тип тә атайҙар. Сөнки улар йомортҡаларын сит ояға һалып, уның

мәгә өйрәнергә кәрәк әле. Кәкүк үҙ асылына тоғро.

Ҡоштар тормошона бәйле тағы бер күҙәтеүем. Йәнлектәр үҙ биләмәһенең сиген һарып билдәләһә, ҡоштар биләмәләре сиген һайрап билдәләй. Әгәр ҙә уларҙың биләмәһендә башҡа төрлө һайрау тауыштары ишетелә ҡалһа, дәғүәләшеү башлана. Әгәр ҙә бер биләмәлә һандуғас билдә һалды икән, унда икенсе һандуғас инмәй.

беренсенән, күңел торошо, йәғни яҙмайынса булдыра алмау, икенсеһе - профессиональ һөнәр, өсөнсөһө - хобби. Мин, әлбиттә, уның профессия булыуын теләр инем, тик әлегә шарттарҙа ул тик хобби ғына. Мин уны хатта күңел торошо тип тә әйтә алмайым. Йәш саҡта - фотография менән, хәҙер баҡсасылыҡ менән шөғөлләнгән һымаҡ булып сыға инде. Әҙәбиәт - буш ваҡ-

Донъялағы барлыҡ һөнәрҙәргә лә профессиональ оҫталыҡ талап ителә. Ижади һөнәрҙәргә лә шундай уҡ талап. Рәссамға, бейеүсегә, композиторлыҡҡа, ҡурайсыға һәм башҡа һөнәрҙәргә уҡыталар, ә бына яҙыусылыҡ һөнәре барыбер ҙә һәүәҫкәрлек булып һанала килә.

Әгәр ҙә һин башҡа эш менән шөғөлләнеп, яҙыусылыҡҡа хобби итеп кенә ҡараһаң, ғүмереңдә бер генә әҫәр яҙыуың ихтимал. Ә башҡа әҫәрҙәрең шул әҫәреңдең варианттары ғына булыуы бар.

Беҙ һаман да совет осорондағы инерция менән ижад итеп киләбеҙ. Гонорар аҙ ғына күләмдә түләнһә лә, энтузиазм, рухи ихтыяж менән йәшәйбеҙ. Рухи ихтыяж менән генә ижад итеү ҙә һәр ваҡыт профессионаллекте аңлатмай. Был осраҡта ижадсы "халыҡҡа бара ул" тигән планка ҡуя. Масса мохтажлығына иҫәп тотоу ҙа яҡшыға алып килмәй, талантлы шәхес булыу ағым ыңғайына барыуҙан ғәйре йылға үренә, тулҡынға ҡаршы барыуҙы аңлата. Бының өсөн иһә барлыҡ ҡалыптарҙы емереп, үҙеңде һындырырға кәрәк.

Киләсәк быуын ижадсылары быға риза булмаясаҡ һәм яҙыусы һөнәрен законлаштарыуҙы талап итәсәк. Тормош алға барған һымаҡ, ә яҙыусы тулҡындың башында түгел, ҡойроғонда һөйрәлеп килә һымаҡ.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

***✓ Туғандарымдың һөйөүен, Мөслимәмә булған мөхәббәтемде шайтан һыуына алмаштырҙым, балаларымдың ышанысын юғалттым, ейәндәремде тубығыма ултыртып һөймәнем… "Фатиха"ны ла аңыма һеңдерә алманым…***




Ҡатын-ҡыҙҙа йәшәүгә ынтылыш, ғаилә именлеге хәстәре көслөрәк шул. Сәбәп табып, Аҫҡарҙың айыҡ сағына тап килтереп, ситтәге балаларын ҡайтарып алды.

- Атағыҙ менән беҙ эскесе хәленә төшөп барабыҙ, - тине ни сәбәп менән саҡырылыуҙарына төшөнә алмай ултырған балаларына Мөслимә. - Мин дә эсәм бит хәҙер, эскем килеп тотам рюмканы. Атағыҙҙың эскесе даны сыҡҡан инде, - илауҙан тыйыла алманы әсә.

Аҫҡар башын баҫып тик ултырҙы. Уға хөкөм сығаралар. Үҙенең балалары! Бер ваҡытта ла бер кемгә лә баш бирмәгән, баш эймәгән кешегә. Ғәрлек!

Аҫҡар иланы. Бала саҡтан алып тәүге тапҡыр. Вәғәҙә бирештеләр, ант ҡылдылар. Ул эсеүҙе ташланы. Кире бригадир итеп ҡуйҙылар, даны ҡайтты, президиумдарҙа ултырҙы, трибуналарға сыҡты. Был юлы ла ул еңде. Хәмерҙе!

Тағы биш йыл үтте. Бирешкән вәғәҙәләрҙең, әйтелгән анттың төҫө уңды, ялҡындары һүрелде. Улар онотола төштө. Араҡы ғаилә байрамдарында, эш урынында ҡорған табындарҙа кире пәйҙә булды. Аҫҡар менән Мөслимәнең тормошонда үҙ урынын ҡабат биләне, йорттарына, бынан ары сыҡмаҫҡа инеп, түрҙән ҡунаҡланы. Эсмәгән осорҙа Аҫҡар мотоциклдан машинаға күсеп ултырғайны. Сираттағы эске мәжлесенән һуң, аяғында саҡ тороуына ҡарамаҫтан:

- Бажамды күрмәгәнгә ней заман. Яратҡан балдыҙымда ҡунаҡ булып ҡайтам, - тине лә, машинаһына ултырып, саң туҙҙырып елдереп сығып та китте.

Юл аҫтында аунап ятҡан машинанан көс хәлгә сығарып, дауаханаға алып килгәндәр уны. Шунда иҫенә ҡайтты.

- Мин ҡайҙамын? Әллә үлгәнменме? - тине күҙен асып, үҙенә текләп торған аҡ һаҡаллы ҡартты күргәс.

- Юҡ, үлмәгәнһең. Аллаһы Тәғәлә ҡурсалаған үҙеңде, - булды яуап.

- Һине, ҡартлас, Хоҙайҙың үҙе, тип торам. Мине уның ҡаршыһына хөкөмгә алып килгәндәр, тигән булам тағын, - Аҫҡар шаяртырға үҙендә көс тапты.

Ауыр һауыҡты ул. Эске ағзалары ҡуҙғалғайны. Баяғы ҡарт менән дуҫлашып китте. Ул диндар кеше ине. Бәйғәмбәрҙәр сәхифәләрен бирелеп тыңланы. Тәҙрә пәрҙәһенең ситен генә күтәреп, бөтөнләй таныш булмаған яңы донъяға баҡҡандай тойҙо үҙен Аҫҡар. Күңелендә билдәһеҙ ашҡыныу һиҙҙе, тормоштоң ысын мәғәнәһен күргәндәй ине. Пак һәм ғәжәйеп сихри донъя. Партия тәғлимәте бутаған зиһене, эшкә бирелгән булмышы, эске табындарында ғына хушланған күңеле - дингә урын ҡалмағайны шул тормошонда. Донъя ығы-зығыһынан дауахана диуары менән ышыҡланған палатала иһә ғәм бөтөнләй башҡа. Унда - күңел хөрриәте. Көнитмеш, йән аҫырамаҡ ваҡлыҡтарҙан азат кешеләр ҡоро.

- Алла булһа, нишләп беҙҙе, көфөрҙәрҙе, ер упмай, һыу баҫмай, ут ялмамай? - фокуҫҡа ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәгән бала кеүек ине Аҫҡар. Бабайҙың һүҙҙәре күңелен ялманы, ә аҡылы: "Мөғжизә юҡ, фани донъянан арыһы -төпһөҙ һәм сикһеҙ мәңгелек ҡараңғылыҡ", - тип ныҡышты.

- Аллаһы Тәғәләнең мәрхәмәте сикһеҙ. Ҡолоноң иманға килеүен сабырлыҡ менән көтә ул. Уны иҫкәртә, һынауҙар ебәрә. Фажиғәгә юлығыуыңды шул иҫкәртеүҙәрҙең береһе тип ҡабул ит. Иманға килеү ҡапыл булмай. Уға һәр саҡ ынтылыу шарт. Бер мәл эске тауыш әшкәртер, юл күрһәтер. Башта "Фатиха" сүрәһен - Китапты башлаусы сүрәне - өйрән, ҡабатлап йөрө. Шунан ары үҫерһең, - шулай тине ҡарт яуап итеп.

Дауахананан Аҫҡар дәртләнеп, ҡанатланып сыҡты. Күңел күҙе асылғандай тойҙо үҙен. Бабай яҙып биргән сүрәне һалып ҡуйған пинжәге кеҫәһен әйләнгән һайын ҡапшап ҡараны.

- Мин бит ғәрәп яҙыуын танымайым, - тигәйне ул ҡағыҙ һуҙған бабайға.

- Ваҡыты етер, күҙең асылыр, - тине лә ҡуйҙы уныһы, уҫал мөғәллимдәй.

Күпмелер ваҡыт Аҫҡар "Фатиха" сүрәһенең иҫләп ҡалған юлдарын ҡабатлап йөрөнө. Бер кем дә күрмәгәндә, бабай биргән яҙыуҙы алып, текләп ултырҙы. Семәрле һыҙыҡ һәм нөктәләрҙең айышына төшөнгөһө килде. Бәлки ай, бәлки ярты йыл шулай хыялый булып йөрөгәндер. Эргәһенән ғәҙимге тормош ағымы үҙенең ғәҙәти көндәрен хисапһыҙ үткәрә торҙо. Аҫҡар ташҡын уртаһында һерәйеп торған ҡолға хәлендә ине. Шаулап аҡҡан һыу үҙе лә баҫа, ағыҙып барған ҡый-ҡыпыр ҙа бер туҡтауһыҙ бәрелә, ян-яғын аяуһыҙ ашай. Ҡолға оҙаҡ һерәйеп тора алманы. Ашалып нескәргән урынынан һынды. Аҫҡар ҙа шулайтты. Кире ҡәҙимге, күнегелгән тормошона ҡайтты. Ағымға ҡаршы тора алманы.

Йәнһеҙ Мөслимәһе янында ултырғанда, "Фатиха" сүрәһен иҫенә төшөрөргә булып, араҡы йыуған мейеһен күпме генә сирып ҡарамаһын, сүрәнең бер генә һүҙе лә теленә килмәне. Мейеһе үлгәйне уның. Оҙаҡ ултырҙы. Ҡуйыра барған төн ҡараңғыһын тоҡанған урам шәмдәре кире сигендерҙе. Ҡарт ҡымшанманы.

Бына бер мәл ул аяғына баҫты, ишек янына килеп, элгестән нимәлер һәрмәп алып, иңбашына һалды, урамға сыҡты. Аяҡтарын көс-хәлгә һөйрәп, урам буйлап атланы.

- Ҡартлас, Яңы йыл менән! - тине бер төркөм йәштәр араһынан берәүһе.

- Артур, яңы йылға бер сәғәт бар бит әле. Иртәләнең, - быныһы яғымлы ҡыҙ бала тауышы ине.

- Барыбер тыуасаҡ бит ул. Бер сәғәт нимә ул сикһеҙ йыһан өсөн.

- Улайға китһә, бер көн, бер ай, бер йыл, бер кеше ғүмере лә бер ни тормай мәңгелек менән сағыштырғанда, - йәштәрҙең бәхәскә ҡоролған әңгәмә тауышы һүрәнләнә барып, еңелсә өргән буран һыҙғырыуы менән алмашынды.

Ауыл да артта ҡалды. Аҫҡар ҡарт һыуыҡты ла, битенә бәргән ҡарҙы ла toймай атлай бирҙе. Көслө шартлауға, тирә-яҡтың яҡтырып китеүенә һиҫкәнгәндәй итте. Туҡтаны. Артына әйләнде. Күк йөҙөн ялмап, яңы йыл салюты аталар ине.

- Егерме беренсе быуатҡа аяҡ баҫтым мин дә. Мин еңдем, Мөслимә! Мин һәр саҡ еңдем! Мин еңеүсе булып килдем был ергә! Егерме беренсе быуатҡа аяҡ баҫмайынса китмәйем, тинем, һәм булдырҙым да. Һине уҙҙырҙым. Хыялланма, алкаш, дөмөгәһең, етә алмайһың, тип еңмешләнһәң дә, Мөслимә. Мин - Еңеүсе-е-е!

Ошо ашҡынып ҡысҡырыуы ҡарттың һуңғы көсөн алды, ахыры. Аяҡтары ишелеп, ул ҡарға ауҙы. Торорға ынтылғайны, быуындарының бөтөнләй хәлһеҙләнгәнен тойҙо. Ҡыл өҙөрлөк тә көре ҡалмағайны.

- ... Абындым. Бәйге арғымағы ише тигеҙ ерҙә абындым... Арығайным шул мин, ауыр йөктән миктәгәйнем. Тарттым да, тарттым йөктө. Үңәсем өҙөлгәнсе, күңелем һиҙгерлеге юйылғансы, һуңғы тойғом ҡороғансы... Шешәне лә ашаҡлап үтә алманым шуға, абындым, хәмергә тонсоҡтом... Туғандарымдың һөйөүен, хәләл көсөм менән яулаған данымды, Мөслимәмә булған мөхәббәтемде шайтан һыуына алмаштырҙым, балаларымдың ышанысын юғалттым, уларға терәк була алманым, ейәндәремде тубығыма ултыртып һөймәнем... "Фатиха"ны ла аңыма һеңдерә алманым... Иманһыҙмын мин... Мөслимәм, бәғерем, балаларым, берүк ҡаты хөкөм итмәгеҙ. Мин иртәрәк китергә тейеш инем... Бәҫһеҙләнмәй... Мин - яуҙа үлмәй ҡалған батыр... Бахыр мин!.. Бахырлыҡҡа хөкөм ителгән батыр... Иманһыҙ батыр!.. - һуңғы һүҙҙәрен оло үкенес менән бышылдап ҡына әйтте. Бәлки, әйтмәгәндер ҙә, уйлаған ғыналыр. Бындай китап һүҙҙәрен Аҫҡарҙың бер ваҡытта ла теленә алғаны булманы бит.

Ярһып йәшәне ул. Яҡындары аслыҡтан интеккәс - тамаҡ хәстәрләне, кешеләр араһында үҙ урынын яулау зарурлығы тыуғас - дан ҡаҙанды, мал-мөлкәт теүәлләр, ғаиләһен аҫырар өсөн емереп эшләне. Тик ғүмеренең бер миҙгелендә сәсәп туҡтаны, йәшәүенең мәғәнәһен юғалтты ... һәм аҫҡа кире мәтәлләп осто...

Күңел бушлығы туҡтатты Аҫҡарҙы. Иман нуры йылытмаған булмышы юлдан яҙҙы, аҙашты, эскелек упҡынына ҡоланы. Һуңғы инаныуы ла ялған ине. Егерме беренсе быуатҡа аяҡ баҫманы Аҫҡар ҡарт. Егерменсе быуатта ҡалды.

"Ҡар бөртөгө ирей керпек осонда,

Томан ҡайта ҡояш нурында.

Кешенең дә ғәзиз, ай, йәнкәйе,

Тилмереп тә көтә ғәжәп мөғжизә ..." - уның табындарҙа күтәргән берҙән-бер йырының һүҙҙәре был.

...Эҙһеҙ юғалған Аҫҡар ҡарттың кәүҙәһен, яҙ етеп, ҡар әрселгәс, ауылдан алыҫ түгел яланда таптылар. Усына сүрә яҙылған ҡағыҙ киҫәген йомғайны ул.

**(Аҙағы. Башы 20-21-се һандарҙа).**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# АУЫР ҺҮҘ ӘЙТМӘ БАЛАҢА...

Танышым һөйләгән һүҙҙәр уйландырҙы әле мине лә. "Ҡәйнеш менән килендәшкә никах уҡытҡандың кисенә ҡоҙалар ҡайнымдарға ҡунаҡҡа килергә тейеш ине, - тип һөйләп китте ул. - Өҫтәл әҙерләп йөрөп, ике бәләкәс улымды күҙ уңынан ысҡындырып ебәргәнмен. Бер заман сыр-сыу килеп илашҡан тауышҡа йүгереп сыҡһам, улдарым йәшел үлән өҫтөндә аумаҡлашып һуғышып яталар. Бәләкәй генә ҡулдары менән бер-береһенә шул тиклем йәбешкәндәр, айырып алырлыҡ та түгел. Етмәһә, эргәләрендә торған ирҙәр, ҡыҙыҡ күреп, уларҙы бер-береһенә һөсләтә. Әле береһен, әле икенсеһен ҡеүәтләп, хахылдашып көләләр. Малайҙарҙы бер-береһенән йән көскә айырып, иремде эҙләргә йүгерҙем. Әле генә ошонда йөрөгән кеше әллә ҡайҙа юҡ булған. Аптырап, төпкө бүлмәгә керһәм, ҡәйнәм иремә массаж яһап ултыра. Уныһы, хәс тә бәләкәй балалай, әсәһенең алдына һуҙылып төшөп ятҡан, рәхәтләнеп күҙҙәрен йомған хатта. Асыуымдан шартлай яҙып, күҙҙәремә йәш төйөлөп сығып йүгерҙем дә, ике баламды ике яҡтан елтерәтеп ебәрҙем. Былай ҙа һыңҡылдап торған өлкән улым минең яман тауышымдан ҡурҡып, тағы ла нығыраҡ илай башланы. Ә бәләкәйе шундай итеп ҡарап тора миңә. Зәп-зәңгәр генә күҙҙәренә төйөлгән йәш бына-бына йылға булып ағып китерҙәй. Унда иҫ киткес аптырау, минең йәмһеҙ ҡылығыма ғәжәпләнеү, һыҙланыу тойғоһо сағыла. Ошо ҡарашҡа абынып тигәндәй туҡтап ҡалдым. Ике улымды ике яҡтан ҡосаҡлап, ергә сүкәйҙем дә, бер кемгә лә иғтибар итмәй, үкһеп-үкһеп иланым. Оят ине миңә, иҫ киткес оят. Улдарымды ҡосаҡлаған һайын, улар миңә нығыраҡ һыйына. Үҙҙәренең йөрәктәре күкрәктәренән атылып сығырҙай булып тибә. Дөп-дөп-дөп... Ошо тауыш һаман ҡолаҡ төбөндә яңғырай. Беләһеңме, шунан һуң үҙемә һүҙ бирҙем: бер ҡасан да улдарыма ауыр һүҙ әйтмәйәсәкмен, хатта тауыш та күтәрмәйәсәкмен..."

Шымып ҡалған танышымды йыуатырлыҡ һүҙҙәр таба алмай торҙом бер килке. Мин нимә эшләр инем икән уның урынында? Үҙемде нисек тотор инем? Кешене оҡшамаған ҡылыҡтары өсөн ғәйепләүе еңел дә ул, ә бына йыуатырлыҡ, көс бирерлек һүҙҙәр табыуы ауыр шул. Һәр хәлдә, шуны әйткем килә: сығырыңдан сыҡҡанда ла balаңдың бәҫен төшөргән һүҙ әйтмә. Һүҙ яраһы оҙаҡ төҙәлә бит. Бик әйткең килһә, "уңғанбай"ҙан һалдыр. Фәрештәнең "амин" тигән сағына тура килер ҙә, үҙе уңған, үҙе бай булыр...

**Гөлназ ИШЕМҒОЛОВА.**

***✓ "Институт баштан уҡ белем биреүсе ғилми берләшмә булараҡ ҡына түгел, ә тәрбиә эшен хәстәрләүсе булараҡ итеп үҙен таныта алды. Цивилизациялы йәмғиәтте тап мәҙәниәт, ватансылыҡ, толерантлыҡ төшөнсәләре булдыра".***

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Республиканың башҡа вуздары менән сағыштырғанда күпкә йәш булыуына ҡарамаҫтан, Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты үҙенең ныҡынған йолалары менән дан тота. Уҡыу йылы аҙағында студенттарҙың, уҡытыусыларҙың бар өлкәләге уңыштарын барлап, яуаплы имтихандар алдынан һәр кемгә ыңғай тойғолар, яҡшы кәйеф бүләк иткән һабантуй байрамы ла шундайҙар рәтенән. Институт һабантуйы быйыл да абруйлы ҡунаҡтар ҡатнашлығында, күтәренке рухта үтте.**

# МИЛЛИ БАЙРАМДАР...

## тәрбиә сығанағы ла







Мәғлүмәт быуаты тип аталған бик үҙенсәлекле мәлдә йәшәйбеҙ, шуға ла хәтергә бик уйылмаһа ла, күҙгә салынып ҡалған ҡайһы бер нәмәләр уйландырырға ла мәжбүр иткеләй. Шулай, күптән түгел интернет селтәрендә бөгөнгө заман өсөн идеаль булған юғары белем биреү йорто бар тип уйлау - тормошҡа ашмаҫ хыял, тигәнерәк фекергә тап булғайным. Күрепбелмәгәс, дөйөм ил кимәлендә һүҙ йөрөтә алмайым, шулай ҙа республикабыҙҙа ҡайһы берәүҙәр хыяллана ла алмаған белем усаҡтары бар һәм уларҙың барыһын да студенттарҙы милли рух нигеҙендә тәрбиәләү кеүек сифаттар берләштерә, тип ышаныс менән әйтергә булыр ине. Сибай институты ла шундайҙар рәтенән. "Институт баштан уҡ белем биреүсе ғилми берләшмә булараҡ ҡына түгел, ә тәрбиә эшен хәстәрләүсе булараҡ итеп үҙен таныта алды. Ҡайһы бер вуздарҙың, студенттарҙы тәрбиәләү менән шөғөлләнергә кәрәкмәй, тигәне менән килешә алмайым. Цивилизациялы йәмғиәтте тап мәҙәниәт, ватансылыҡ, толерантлыҡ төшөнсәләре булдыра. Тимәк, йәш быуында әхлаҡи ҡиммәттәр формалаштырыу - тәрбиә процесының иң яуаплы өлөшө" - уҡыу йортоноң директоры, иҡтисад фәндәре докторы, техник фәндәр кандидаты, профессор Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтовтың был хаҡ фекеренә өҫтәп, тағы нимә әйтәһең инде? Билдәле шағирҙар, яҙыусыларҙың бюстары, башҡорт мәғрифәтселәренең барельефтары, рәссамдарҙың картиналары - былар барыһы ла ҙур тәрбиәүи әһәмиәткә эйә икәнен аңлап эш итәләр бында. Институттың музейында Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арнап, быйыл тағы ла бер барельеф барлыҡҡа килгән. Генерал Миңлеғәле Шайморатовҡа һәм 112-се башҡорт кавалерия дивизияһына арналған монументаль-мемориаль композиция уларҙың данлы юлын һүрәтләй.

- Сибай институтының уҡыу йылын бар йолаларын, тәртибен үтәп, милли байрам - һабантуй менән йомғаҡлауы тотош ҡала өсөн матур бер күренешкә әүерелде. Бөгөн ил буйынса оптималләштереү тулҡыны барғанда белем биреү учреждениелары ла еңел булмаған осор кисерә. Әммә беҙҙең институт өсөн был ваҡыт тағы ла нығыныу, яңы үрҙәр яулау мәле булып тора, улар бар һынауҙарҙы ла лайыҡлы үтә һәм үтәсәк, сөнки бында уҡытыу ҙа, тәрбиә эше лә бик юғары ҡуйылған. Ҡарағыҙ әле, һабантуйҙа Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығы, Сибай ҡалаһының 60 йыллыҡ юбилейы ла, Әҙәбиәт йылы ла онотолманы, былар барыһы ла өҙлөкһөҙ алып барылған патриотик тәрбиә тураһында һөйләй. Сибай институты ҡаланың, Урал аръяғы төбәгенең генә түгел, республикабыҙҙың ғорурлығы, - тине үҙенең сығышында Сибай ҡалаһы хакимиәте башлығы Хәлит Хәмзә улы Сөләймәнов та. Ысынлап та, бындай кимәлдә һабантуй үткәреү барыһының хәленән дә килмәҫ ине. Сәхнәлә көнө буйы йыр-моң гөрләп торҙо, студенттар төрлө милли уйындарҙа, спорт төрҙәрендә үҙенең таһыллығын һынаны. Студенттарҙың "Төйәләҫ" уҡыу-эксперименталь комплексында ат спорты менән шөғөлләнеүсе ете ҡыҙҙың сығышы ла күптәрҙең хәтеренә уйылып ҡалғандыр, моғайын.

Йыл һайын һәр факультет тирмә ҡора, уны еренә еткереп биҙәү, милли аш-һыу әҙерләү ҙә уртаҡ тырышлыҡ менән башҡарыла. Этнографик ихата, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны мөйөшө, Әҙәбиәт йылына бағышланған стендтар, һөнәри йүнәлеш буйынса алып барылған эш һөҙөмтәләре - барыһы ла тирмәләрҙә сағылыш алғайны. Йола күрһәтеү ҙә һабантуйға үҙенсәлекле йәм өҫтәне. Тәбиғи-математик факультеты студенты Гөлнур Зарипова әйтеүенсә, йола өйрәнеү өсөн факультеттың студенттар ойошмаһы ағзалары ентекле тикшеренеүҙәр алып барған, өлкәндәрҙән йолаларҙы үҙләштергән. Сибай ағинәйҙәре, ҡаланың башҡа һөнәри уҡыу йорттары, Сибай музейы ла үҙ тирмәләрен тәҡдим итте. Бигерәк тә ағинәйҙәрҙең һалдат палаткаһын сит-ят күҙҙәрҙән һаҡлау өсөн ҡорған ауы иғтибар үҙәгендә булды.

Һәр тирмә төрлө номинацияларҙа бүләкләнде. Башҡаларҙан айырмалы рәүештә, технология факультеты тәҡдим иткән ҡул эштәре, селтәрҙәр, кейеҙҙән һуғылған, ағастан эшләнгән әйберҙәр ҡунаҡтарға айырыуса оҡшаны. Культурология фәндәре кандидаты, доцент Гөлнара Тажетдинова билдәләүенсә, факультетта студенттар башҡорттарҙың көнкүрешен, матди мәҙәниәтен, биҙәү әйберҙәрен өйрәнә. Һуңғы осорҙа халыҡ кәсептәренә күберәк иғтибар итәләр, кейеҙ баҫыу, сигеү һәм балаҫ һуғыу эше яйға һалынған. Быйыл төрлө төбәктәрҙә йәшәүсе башҡорттарҙың биҙәнеү әйбере - һаҡалды (селтәр) тергеҙеү проектын атҡарып сыҡҡандар. Уларҙың барыһы ла күргәҙмәлә тәҡдим ителгәйне. Гөлнара Фәрүәз ҡыҙы кейеҙҙән "Урал батыр" эпосы персонаждарының кейемдәрен әҙерләү проекты ҡатнашыусыһы, былтыр йыл аҙағында был ижади төркөм Милли мода Евразия конкурсында "Көнсығыш милли костюмы" номинацияһында беренсе урын алғайны. Әлеге мәлдә улар Республика халыҡ ижады йорто башланғысы менән кейеҙҙән башҡорт Ҡыш бабайы менән Ҡарһылыуын эшләү проектына тотонорға йыйына. "Төрлө төбәктә йәшәгән башҡорттарҙың кейемдәрен эшләнек, милли кейемдәге ҡурсаҡтар ҙа булды, хәҙер инде тағы ла ниндәй ҡыҙыҡлы эшкә тотонайыҡ икән, тип уйлап йөрөйбөҙ. Студенттарҙы ҡыҙыҡһындыра белһәң, улар әллә ниндәй ижади эштәргә лә һәләтле", - ти Гөлнара Фәрүәз ҡыҙы.

Студент уҡытыусыны аңлап, уҡытыусы студентты үҙенә тиң күреп эшләгәнгә лә Сибай институтының уңыштары юғары, күрәһең. Әгәр ҙә институт РФ Мәғариф һәм фән министрлығы ҡуйған критерийҙарҙың бөтә позициялары буйынса ла ыңғай һөҙөмтә күрһәтә икән, бында һәр кемдең өлөшө ята. Шулай ҙа бөгөнгө заманда аҡыллы етәксенең алдан күреп эш итә белеүсәнлеге лә мөһим. Зиннур Ғөбәйҙулла улының фиҙаҡәр тырышлығы булмаһа, өс заманса уҡыу-лаборатория корпусынан, дүрт ятаҡтан, спорт комплексынан, спорт майҙансыҡтарынан, саңғы трассаһынан, редакция-нәшриәт үҙәге, телевидение, студент гәзите, китапхана, ашханаларҙан торған тиңе булмаған матди-техник базаһы булыр инеме икән институттың? Етәкселәренең дәрт-дарманы йоҡмаһа, институтты тамамлаусы студенттар бында эшкә ҡалырға атлығып торор инеме? Әлеге көндә уҡытыусыларҙың 90 проценты фән докторы һәм кандидаты дәрәжәһенә эйә булһа, уларҙың яҡынса 40 проценты - Сибай институтын тамамлаған белгестәр. Әйткәндәй, ошо төбәк йәштәренә белем биргән, үрҙәр яулауға ҡанат үҫтергән Сибай институты 25 йыллыҡ юбилейын билдәләйәсәк быйыл. Йәмғиәттең мөһим социаль институттарының береһе булараҡ, белем биреү системаһының ролен баһалап бөткөһөҙ - тап ошонда милләтебеҙҙең шәхестәре тәрбиәләнә, буласаҡ милли кадрҙар әҙерләнә. Шуға ла Сибай институты кеүек тотош халҡыбыҙ өмөт бағлап торған уҡыу йорто бар икән, нисек бөгөнгө заман өсөн идеаль булған уҡыу йорто юҡ ул, тип әйтергә телең әйләнер?

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һабантуйҙа уҡыу, хеҙмәт алдынғылары, иң яҡшы спортсылар, бейеүселәр, йырсылар билдәләнде, тигәйнек инде. Уҡыу йортоноң үҙенең, ҡала хакимиәтенең, БР Мәғариф министрлығының, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының, "Киске Өфө" гәзитенең рәхмәт һәм маҡтау ҡағыҙҙарына, бүләктәренә лайыҡ булыусыларҙы һанай башлаһаҡ, һүҙ бик оҙонға китер ине. Һабантуй байрамы ойоштороп, Сибай институты үҙен тағы ла бер тапҡыр бар донъяға ишеттерҙе - ошоноһо күпкә әһәмиәтлерәктер, моғайын.**

**Һәр уҡыу йорто - ул тере организм. Уның йәлеп итеп торған тышҡы йөҙөнән тыш, эстәге атмосфераһының да ниндәй булыуы мөһим. Институттың тын алышының ниндәй булыуы бигерәк тә унда белем алыусы, әле буласаҡ студенттар өсөн тәүшарт. "Бәхетте юлдан эҙләмә, белемдән эҙлә" ти халыҡ. Белем алаһың икән, лайыҡлы уҡыу йортон һайла, тип кенә өҫтәйбеҙ беҙ ҙә.**

Ләйсән НАФИҠОВА.

ИНТЕРНЕТТАН



# ЕТЕШ ТОРМОШ...

## сәләмәтлеккә нигеҙ

■ Банкта ярайһы ҙур ғына суммала аҡса һаҡлау хроник ауырыуҙарҙан дауа булып тора. Америка ғалимдары раҫлауынса, аҙ тәьмин ителгән граждандар йәшәгән районда баш ауыртыуы, депрессия эпидемия характерын ала. Уларҙың фекеренсә, организмға кире хистойғолар насар экологик торошҡа ҡарағанда ла зыянлыраҡ. Ҡаҡшаған нервыларҙы нормаға килтереү һәм сәләмәтлекте ныҡытыу өсөн йәшәү кимәлен 10 процентҡа булһа ла күтәрергә йәки яҡшы кварталға күсеп китергә кәрәк.

■ Ниндәйҙер күңелһеҙ хәлде, бәләне еңел кисереүселәр һаны күпкә аҙыраҡ. Күпселек бындай ваҡиғаларҙы оҙаҡ, ауыр һәм үҙенең тәшенкә торошо менән эргә-тирәһендәгеләрҙең тормошон тамуҡҡа әйләндереп кисерә. Психологтар раҫлауынса, яҡыныңдың үлеме, айырылышыу кеүек хәлдәрҙән сығыу өсөн кеше бер нисә психологик торошто үтә. Бының өсөн 1-2 йыл үтергә тейеш. Бекман университеты (АҠШ) психологтарының яңы тикшеренеүҙәре уларға ярҙам итеү маҡсатынан башҡарылған. Төрлө ысулдарҙы ҡулланып ҡарағандан һуң, ғалимдар шундай һығымтаға килгән. Үҙенде ыңғай тойғолар менән уратырға тырышыу күңел яраларын ваҡытлыса ғына дауалай. Шуға ла кеше бер аҙ ҡайғырып, үҙенең юғалтыуына өйрәнергә тейеш. Әммә был хәлдә оҙаҡ ҡалыу ҙа зыянлы, тап ошо ваҡытта улар тормоштоң ыңғай яҡтарын да ҡабул итеп өйрәнергә бурыслы. Тап шунда ғына пациенттарҙың эмоциональ хәле тиҙерәк яҡшырасаҡ, ти психологтар

■ Ҡытайҙа һөттөң антиканцероген сифаттарын асыҡлаған тикшеренеү үткәрелгән. Илань университеты белгестәре һөт аҡһымында булған ферменттарҙы тикшереп, бер пептид ферменттың ашҡаҙан яман шеше күҙәнәктәре үҫеше хәүефен булдырмауын асыҡлаған. Ферменттың эффекты уның концентрацияһына, яман шеш күҙәнәктәренә тәьсиренең күләменә һәм оҙайлығына бәйле. Тикшеренеүҙең авторы Вэй Чжен Чен әйтеүенсә, был асыш ашҡаҙан яман шешенә ҡаршы препараттар уйлап табыуға булышлыҡ итәсәк. Әлегерәк оло кешеләр өсөн һөт зарарлы тигән ҡараш йәшәй ине, әммә белгестәр белдереүенсә, һөттө самаһын белеп ҡулланыу организмды онкологик сирҙәрҙән һаҡлай.

■ Генетиктар һәм нейропсихологтар фекеренсә, элек абсолют ишетеү һәләте һәр кешелә тыумыштан булған, әммә эволюцион процесс барышында практик ҡулланылыш тапмағанға күрә юғалып ҡалған. Бөгөн абсолют ишетеү һәләте кешеләр араһында бик һирәк осрай. Белгестәр әйтеүенсә, мең кешенең береһе генә быңдай сифатҡа эйә. Көнсығыш телдәре тональ телдәргә яҡын булыу сәбәпле, Азия кешеләрендә ишетеү һәләте юғарыраҡ, улар соната, симфонияларҙы еңелерәк ҡабул итә икән. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, азиаттар араһында билдәле музыканттар һаны европалыларға ҡарағанда күберәк түгел, ти тикшеренеүселәр.

■ Лос-Анджелестың Cedars-Sinai медицина үҙәге тикшеренеүселәре куркума нигеҙендә яңы препарат уйлап тапҡан. Ул инсульттан һуң һуң тиҙерәк һауығырға мөмкинлек бирә. Ғалимдар әйтеүенсә, был дарыуҙы ауырыуҙы иҫкәртеү маҡсатында ҡулланырға ла буласаҡ. Яңы дарыуҙың төп тәьсир итеүсе матдәһе булып куркумаға сағыу төҫ биреүсе полифенол - куркумин тора. Ул ялҡынһыныуға ҡаршы тора һәм антиоксидант тәьсиргә эйә. Яңы дарыуҙы инсульт кисергән кешенең организмына өс сәғәт эсендә индереп өлгөргәндә, баш мейеһе күҙәнәктәрен тере килеш һаҡлап алып ҡалырға мөмкин, ти ғалимдар.

БАЛАЛАР ҠОРО

# БӘХЕТ ӨСӨН...

## атай-әсәй булыуы ла етә

**Бәхет һәм бәхетһеҙлек төшөнсәләрен һәр кем үҙенсә аңлай. "Мин бәхетле!" тип әйтер өсөн кеше тик үҙенә генә кәрәкле нәмәгә эйә булырға тейеш. Берәүҙәргә бәхет - ул йорт тулы йыһаз, кесә тулы аҡса булһа, икенселәр өйө тулы балалар уйнап йөрөүҙе бәхет тип һанарға мөмкин. Әйткәндәй, балаларыбыҙ өсөн бәхет төшөнсәһе нимәне аңлата икән? Үҙебеҙҙе борсоған төрлө һорауҙарға яуап табыу өсөн Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнө алдынан Өфө ҡалаһының 13-сө башҡорт балалар баҡсаһы-башланғыс мәктәбе тәрбиәләнеүселәре Юлиә Ҡыуандыҡова, Розалия Аҙнаева, Айрат Ғайсин, Тамсы Үтәбаева, Тимур Зантыкин менән әңгәмәләштек.**

**➔ 1 июндә Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнө икәнен беләһегеҙ, эйеме? Әйтегеҙ әле, һеҙҙе кемдәр нимәнән яҡлай икән?**

**Тамсы:** Мине әсәйем менән атайым бөтә насар нәмәләрҙән дә яҡлай. Мәҫәлән, ауырыуҙарҙан...

**Розалия:** Мине лә өләсәй менән олатай яҡлаша ул...

**Тимур:** Өләсәйем менән олатайым мине ауылда уҫал эттәрҙән яҡлай.

**Айрат:** Беҙ бында, балалар баҡсаһында уйынсығын тартып алһалар, дуҫтарҙы яҡлайбыҙ.

**Тамсы:** Минең дуҫым малай кеше, ул Баязит исемле. Ул мине ҡарап ҡына йөрөтә...



**➔ Бәхет тигән һүҙҙе нисек аңлайһығыҙмы, ул нимә була ул?**

**Розалия:** Мин әсәйем эргәһендә булһам, бәхетлемен. Мин тағы ла сәскәләр йыйғанда бәхетлемен, минә бик-бик рәхәт була шул сакта, быйыл да йыйҙым сәскәләрҙе...

**Юлиә:** Минә йылмайғанда, күңелле булғанда бик тә рәхәт.

**Айрат:** Мин бәхеттең нимә икәнен белмәйемсе. Рәхәт булһа, бәхетле булалармы ул? Атай-әсәйем минә уйынсыҡ алып бирһә, мин шатланам, тимәк, мин бәхетле буламмы икән? Уйынсыҡ алып бирмәһәләр ҙә рәхәт ул минә.

**Тамсы:** Ә минә уйынсыҡтар алып бирһәләр, барыбер рәхәтерәк була.

**Тимур:** Мин ауылда олатайым менән балыҡ тоторға барғайным, ҡармаҡҡа бер балыҡ та ҡапманы. Шул мәлдә минә бик тә рәхәт булғайны, ул саҡты әле лә онота алмайым, тимәк, мин бәхетле булғанмын...

**➔ Йәйгеһен ниндәй эштәр менән мәшғүл буласаҡһығыҙ?**

**Тимур:** Мин атайымәсәйем менән санаторийға ял итергә китәм.

**Айрат:** Йыл да ауылға өләсәйемә барам, тыңлашып ҡына йөрөһәм, ул минә әкиәттәр һөйләй. Өләсәйемдең тауыҡтары күп, шуларҙы баҫтырам ҡайһы саҡ, тик улар гел ауырый.

**Юлиә:** Йәйгеһен иң яратҡан шөғөләм - бассейнда йөҙөү. Яҡшы йөҙәм мин.

**➔ Ниндәй байрамдарҙы яратаһығыҙ?**

**Айрат:** Ҡыш бабай бүләк биргәс, мин Яңы йылды яратам инде. Быйыл ул бүләк итҡән планшетта төрлө уйындар уйнайым, йәнһүрәттәр ҡарайым. Оҙаҡ ултырһам да минә атай-әсәйем көймәй.

**Розалия:** Ә минә компьютер артында оҙаҡ ултырырға ярамай, шуға яратҡан "Винкс", "Маша әкиәттәре" йәнһүрәттәрен күп ҡарай алмайым. Минә балалар баҡсаһында үткәрелгән бөтә байрамдар ҙа оҡшай, беҙ бында йырлайбыҙ, бейейбеҙ, шиғырҙар һөйләйбеҙ.

**Тамсы:** Беҙ компьютерҙың зарядкаһын юғалттыҡ шул...

**Юлиә:** Ҡыш бабай гел мин һораған уйынсыҡтарҙы ғына бүләк итә былай. Был йылы пони менән жираф алдым унан.

**Тимур:** Мин пультлы машина һорағайным, ул ни, аҡса бирҙе лә, беҙгә үҙебеҙгә һатып алырға тура килде. Ҡыш бабай ундай машиналарҙы белмәй, шуға боландар егеп йөрөй.

**➔ Балалар баҡсаһын тамамлағас, нимә эшләйһегеҙ инде?**

**Розалия:** Әсәйем инглиз теле уҡытылған мәктәпкә уҡырға барырһың, тине. Быйыл минә алты йәш, көҙгөһөн үк мәктәпкә барасаҡмын.

**Айрат:** Инглиз телен мин әҙерәк белә инем, һеҙҙең менән һөйләшкәнсе онотһам да ҡуйҙым.

**Тимур:** Мин турист инем (баҡтиһәң, төрөк икән - **Ред.**), башҡортҡа әйләндем, хәҙер тик башҡортса ғына һөйләшәм, мәктәпкә барғас, киренән төрлө телдәрҙе өйрәнеп алырмын әле.

**➔ Атай-әсәйегеҙҙе яратаһығыҙмы?**

**Розалия:** Бик ныҡ яратам, сөнки улар төрлө тәтәйҙәр алып бирә.

**Айрат:** Ата-әсәйемде лә, бәпәйҙе лә яратам. Уның исеме Риана, мин үҙем һайлаштым.

**Тамсы:** Ә минең әсәйем бәпәй алманы әле.

**Юлиә:** Байрамдар һайын яратҡан кешеләремә матур һүрәттәр төшөрөп, төҫлө ҡағыҙҙар менән открыткалар бүләк итәм. Улар мине яратып, бүләктәр алып бирә бит, мин дә уларҙы ҡыуандырырға тырышам.

**➔ Кәйефһеҙ саҡтарығыҙ буламы, әллә гел йылмайып ҡына йөрөйһөгөҙмө?**

**Розалия:** Бейеү түңәрәгенән ҡайтҡанда мин йылмаймайым, сөнки ныҡ арыйым, хәлем ҡалмай.

**Тимур:** Арыһам да кәйефем була ул, тик ауырығанда ғына минә күңелһеҙ, ҡыйын.

**Юлиә:** "Тыныслыҡ", "Бәхет өсөн" йырҙарын өйрәнгәйнек балалар баҡсаһында. Бәхетле булыу өсөн балаларға әсәй бешергән йылы икмәк кәрәк, тиелә унда. Һеҙгә йырлап күрһәтһәк, хәҙер үҙегеҙ ҙә аңларһығыҙ әле, бәхет өсөн нимә кәрәк булыуын.

**Айрат:** Минең әсәйем шул йылы икмәкте үҙе бешерә, йоморо ғына итеп. Тик беҙҙән әле ул йоморо икмәк ҡасып киткәне юҡ.

**Розалия:** Әсәйем тәртипле бул, тыңлаш, матур йөрө, тип өйрәтә, бәхетле бул, ти. Шуға мин бәхетле инде ул.

**➔ Һеҙ үҫкәс кемгә оҡшарға теләр инегеҙ?**

**Айрат:** Мин Человек-Паук һымаҡ булғым килә, уныҡы һымаҡ костюмым да бар. Уға рәхәт, үрмәксе ауы эшләп тотоноп йөрөй ала. Үҫкәс, полицейский булам - улар бандиттарҙы, машинала ҡайыш таҡмай шәп итеп йөрөүселәрҙе төрмәгә ябалар.

**Розалия:** Мин Винкс кеүек булғым килә, ул матур, аҡыллы. Ә үҫкәс, табип булам, балаларҙы дауалайым.

**Тамсы:** Үҫкәс кем булырға ла белмәйем әле. Гимнаст булырмын ул, мостик менән шпагат эшләргә күптән беләм.

**Тимур:** Минең геройым - Черепашки-ниндзя. Улар кешеләрҙе төрлө яуыздарҙан ҡотҡара. Мин дә кешеләрҙе ҡотҡарғым килә, шуға теш табибы булам.

**Юлиә:** Мин парикмахер булам, әле сәсте төрлөсә үрергә өйрәнә башланым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнө алдынан был байрамдың төп сәбәпселәре - балалар менән бына ошондай бик етди һөйләшеү килеп сыҡты. Баҡтиһәң, балаларыбыҙға бәхет өсөн әрләнергә яҡласыулар һәм бала саҡ хыялдарын тормошҡа ашырырға ярҙам итеүсе иң яҡын кешеләре - ата-әсәләре һәм олатай-өләсәләре булыуы ла етә икән.**

Камила ҒӘЛИЕВА
яҙып алды.

*Ағинәйҙәр изге урынға - Әүлиә шишмәһе башланғыс алған Әүеш тауына йүнәлде. Унда Учалы ағинәйҙәре "Хозурға сығыу" тип аталған программа тәҡдим итеп, сәхрәлә Ҡорбан аяты уҡытыу тәртибе менән таныштырҙы.*



АҒИНӘЙҘӘР ҠОРО

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ҡарамағындағы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы сираттағы йыйынын Учалы районында үткәрергә булды. Беҙ юлға сыҡҡанда ямғыр туҡтамай яуа, етмәһә, һалҡыны үҙәккә үтеп бара ине. Бындай көндә яҡшы хужа этен дә урамға сығармай торған мәлдә ер аяғы ер башынан саҡырылған ҡатын-ҡыҙҙар йыйынға килә алырмы, берәй һылтауын табып, өйҙәрендә тороп ҡалмаҫтармы, тигән икеләнеүҙәр ҙә булды. Әммә иртән иртүк йыйын майҙанына ағылған ағинәйҙәрҙе күреп, күңелгә йылы йүгерҙе. Әмәлгә ҡалғандай, көн дә яҡтырып, аяҙытып ебәрҙе. Нисәмә көндәргә һуҙылған һалҡын ямғырҙарҙан һуң тап ошо иртәлә ҡояш йылмайыуы Хоҙайҙың бер мөғжизәһе, ағинәйҙәргә изге эштәрендә фатиха биреүе булды шикелле.**

# ТӘБИҒӘТ ҮҘЕ...

## изге эшкә фатиха бирҙе



Был юлы Учалы районына Башҡортостандың 14 төбәгенән йыйылды ағинәйҙәр. Улар араһында, ойошма ҡуйған маҡсаттарға ярашлы, бихисап эштәр башҡарып өлгөргән Баймаҡ, Учалы, Әбйәлил, Белорет, Бөрйән, Күгәрсен, шулай уҡ яңы ғына ҡорға ойошоп, башҡаларҙың тәжрибәһен өйрәнергә теләк белдереүсе Асҡын, Дүртөйлө, Бүздәк, Әлшәй, Дәүләкән, Миәкә, Салауат, Ҡыйғы райондары ағинәйҙәре бар ине. Йыйындың төүге өлөшө Комсомол ауылы мәҙәниәт йортонда үтте. Йыйылыусылар Учалы районы ағинәйҙәренең ҡул эштәре күргәҙмәһен ҡараны, йыр-бейеүҙәрен тамаша ҡылды, эшләгән эштәре тураһында һөйләгәндәрен тыңланы. Йыйынды Учалы район хакимиәте башлығы урынбаҫары Зөһрә Гордиенко, "Берҙәм Рәсәй" партияһының Учалы районы вәкәләте етәксеһе Салауат Кәримов, Учалы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Ләйсән Фазлетдинова, БашДУ-ның Учалы институты деканы Зифа Рәхмәтуллина, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының сектор мөдире Рәйсә Кусбәкова сәләмләне.

Артабан йыйын дилбегәһен Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты эргәһендәге "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева үҙ ҡулына алды. Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы билдәләүенсә, ойошма башҡарған эштәр Рәсәй Президенты Владимир Путиндың йәмәғәтселек институты эштәрен әүҙемләштереү тураһындағы саҡырыуҙарына яуап бирә. Ә был саҡырыу, билдәле, халыҡтың глобалләшеү һөжүмтәһендә килеп тыуған һынауҙарға, ҡатмарлыҡтарға ҡаршы тора алыу һәләтен уятыуҙы күҙҙә тота. Ағинәйҙәр хәрәкәте быға сағыу бер миҫал: улар ауылдарға йән өрөү, халҡыбыҙҙы рухи көрсөктән арындырыу, балаларҙы, йәштәрҙе ата-бабалар традицияларында тәрбиәләү, тарихи хәтерҙе уятыу, изге еребеҙҙе, тәбиғәтебеҙҙе һаҡлау йүнәлешендә эшләй. Замана ауырлыҡтарын, иҡтисади көрсөктө еңеүгә тап ошо рухиәтте күтәреп кенә өлгәшеп була икәнен яҡшы белә ағинәйҙәр. Бына ошо йүнәлештәге эштәре менән таныштырҙы артабан Учалы, Әбйәлил, Баймаҡ, Хәйбулла райондары ағинәйҙәре ҡорҙары етәкселәре. Учалы районы ағинәйҙәре ауылдарҙа эскелеккә ҡаршы киң көрәш йәйелдереүҙәрен, буйҙаҡтарҙы ишле итеү өсөн димселек институтын тергеҙеүҙәрен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Әбйәлилдәр иһә, һәр мөһим йүнәлеш буйынса (милли кейемдәрҙе, боронғо йолаларҙы, элекке һөнәр төрҙәрен тергеҙеү, экологик өмәләр, айыҡлыҡ өсөн көрәш һ.б.) планлы эш алып барыуҙары тураһында һөйләне. Ағинәйҙәр ҡорона "сирҡансыҡ алырға" килеүсе район вәкилдәре өсөн баймаҡтарҙың да сығышы бик фәһемле булды, сөнки уларҙа "Ағинәйҙәр ҡоро"нан тыш, "Аҡһаҡалдар ҡоро"на ойошоп, ир-егеттәр ҙә йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнаша. Хәйбулла районы "Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе Миңзифа Ишемғолова район етәкселәре менән тығыҙ бәйләнештә эшләүҙәре, һәр аҙымда уларҙың ярҙамын тойоуҙары тураһында һөйләне. Шуға ла ағинәйҙәр район тормошонда ҡайнап йәшәй, бөтөн сараларҙа ла ҡатнаша. Мәҫәлән, өйләнешеүсе йәштәрҙең халҡыбыҙҙың туй йолаларына иғтибары кәмеүен күргән ағинәйҙәр никахты теркәү органдары, туй үткәреүсе ғаиләләр менән һөйләшеп, ул саралар ҙа йолалар буйынса атҡарыу эшен дә үҙ ҡулдарына алған, башҡаларға ла был йүнәлештә эшләргә кәңәш итте.

Икесе сәғәттән ашыу дауам иткән етди һөйләшеүҙән һуң ағинәйҙәр Иҫке Байрамғол ауылы эргәһендә урынлашҡан изге урынға - Әүлиә шишмәһе башланғыс алған Әүеш тауына йүнәлде. Унда хужалар - Учалы ағинәйҙәре "Хозурға сығыу" тип аталған программа тәҡдим итеп, тәбиғәттә ял итеү, сәхрәлә Ҡорбан аяты уҡытыу тәртибе менән таныштырҙы, Әүлиә шишмәһе һыуынан ауыҙ иттерҙе. Әйткәндәй, был Әүлиә шишмәһенең саф һыуы йыл һайын бер айға ғына ер өҫтөнә күтәрелә, уның шифалы һыуын тәм итеп, сырхау-сихәттәренән арынып ҡалырға ашығыусылар бик күп. Урындағы халыҡ һөйләүе буйынса, изге сығанаҡ боронғо Башҡортостан территорияһында Ислам дине таратыла башлаған заманда, ошо тауҙа яңылыш үлтерелгән Рамаҙан әүлиә вафат булғандан һуң, ерҙе тишеп бәреп сыҡҡан. Тау түбәһендә был Хоҙай илсеһенең ҡәбере лә урынлашҡан. Йыйында ҡатнашыусы ағинәйҙәр ойоштороусылар һөйләгән тарихты тыңлайтыңлай, Әүеш тауының түбәһенә менде, унда доға, намаҙ уҡып, илйортҡа именлек, башҡарған эштәрендә еңеллек, милләттәштәренә рух күтәренкелеге теләне, тау башынан ус төбөндә кеүек күренгән хозур тәбиғәтле иркен ерҙәрҙе, Әүешкүлдең йөрәк формаһындағы утрауын тамаша ҡылды. Башҡортостандың ҡайһы төйәгенә барһаң да гәзиз Ватаныбыҙ йөрәктәрҙә уйыла икәненә тағы бер ҡат инанды улар. Арыу йәштә булыуҙарына ҡарамаҫтан, тауға күтәрелгәндә лә, тауҙан төшкәндә лә ағинәйҙәр бер-береһен дәртләндереүҙән, шаяртыуҙан, бер-береһенең йылғырлығына һоҡланыуҙан бушаманы. Учалының һигеҙенсе тиҫтәне уҙған ағинәйҙәре тау үрен бик етеҙ яулауҙары менән бигерәк тә аптырышта ҡалдырҙы.

Ағинәйҙәр йыйынында йәштәр аҙ ҡатнашыуы, унда башҡарылған йолаларҙы, ҡорбан аяты тәртибен күҙәтеп, һөйләгәндәрҙе иғтибар менән тыңлап, илтифат итеп ултырыуы бигерәк тә күңелгә май булып яғылды. Етмәһә, шул мәлдә генә Силәбенән бер төркөм йәштәр экскурсияға килеп төштө. "Ой, ҡалай ваҡытлы килгәнбеҙ, бындай мөғжизәне тағы ҡайҙа күрер инек!" - тип һөйләнә-һөйләнә, милли кейемдәрҙәге ағинәйҙәребеҙҙе ихласлап фотоға төшөрә башланы, төрлө һорауҙар яуҙырҙы улар. Сит-яттар алдында иң тәүфиҡлы, иң тәрбиәле, иң матур ҡатын-ҡыҙҙар булып һынланды шулай ағинәйҙәребеҙ.

- Беҙ ата-бабаларыбыҙ борон сәхрәгә сығып, ниндәй йолалар үтәүен, изге урында үҙенде нисек тоторға кәрәклеген күрһәтергә тырыштыҡ был йыйында, - тип һөйләне аҙаҡ Учалы районының "Ағинәйҙәр ҡоро" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Мәрзиә Солтанбаева. - Маҡсатыбыҙға өлгәштек шикелле, сөнки шифалы Әүлиә шишмәһе һыуын тәм итеүсе ағинәйҙәрҙең йөҙҙәре балҡып киткән төҫлө булды. Эшлекле кәңәшмә лә яҡшы үтте, бер-беребеҙҙең тәжрибәһе менән таныштыҡ, фекерҙәр менән уртаҡлаштыҡ, киләсәктә дауам итәсәк эштәрҙе лә күҙалланыҡ. Әйткәндәй, киләсәктә беҙ Учалы районында ғына түгел, ҡалаһында ла "Ағинәйҙәр ҡоро" йәмәғәт ойошмаһына ағзалар туплағға, ир-егеттәребеҙҙе "Аҡһаҡалдар ҡоро"на ойоштороға ниәтләйбеҙ...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йыйын тамам булып, унда ҡатнашыусылар Әүеш тауындағы сәхрәнән ҡуҙғалап китә башлау менән, ямғыр тамсылары һибәләй башланы. Ағинәйҙәр ҙә, ошо шифалы тамсылар кеүек, Башҡортостандың төрлө тарафтарына шифалы рух таратырға ашығып таралышты...**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН

# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Уңышлы булыуҙың бөйөк сере

### 2-се бизнес-модель. Мәғлүмәт өлкәһендәге эшҡыуарлыҡ

Мәғлүмәт өлкәһендәге эшҡыуарҙар өсөн рентабелле булған тармаҡтар: маркетинг, өйҙә эшләү, музыка, персонал туплау, спорт, лидерлыҡ, күсемһеҙ милекте инвестициялау, сәләмәтлек һәм сәләмәт тормош рәүеше, антиквариат, интернет-маркетинг, артыҡ ауырлыҡҡа ҡаршы көрәш, сауҙа, кәсепселек, сәнғәт, селтәрле маркетинг, йорт хайуандары, инвестициялар, мода, капиталға эйә булыу, рухи мәғрифәтселек, яҡшы хеҙмәткәрҙәр эҙләү, баҙар стратегиялары, авиация һәм һауа юлдары аша йөрөү, шәхси мөнәсәбәттәр, нимәнелер коллекциялау, веб-сайттар дизайны, баҡсасылыҡ, ғаиләне аҫырау, интерьер дизайны, туҡланыу, сәйәхәт, презентация үткәреү оҫталығы һәм башҡа бик күп һөләттәр, хобби һәм ҡыҙыҡһыныуҙар.

Шул уҡ ваҡытта ул матбуғат өсөн ҡыҙыҡлы булмаҫҡа ла мөмкин; ғәмәлдә, ҡайһы берҙә бик тар баҙар нишаһы иң килемлеһе булыуы ихтимал, сөнки улар радарҙың төп йөғонтоһонан ситтә тора һәм маҡсатлы аудиторияға сығыу өсөн аҙ сығымдар талап итә, ә дөғүәселек бөтөнләй юҡ тиерлек.

Мәғлүмәт продукты бик ҙур килем килтерә, сөнки кеше производство сығымдарына түгел, ә уның йөкмәткеһенең ҡиммәтлелеге өсөн түләй. Мәғлүмәт һатыусы булараҡ, эш ваҡытын һәм урынын үҙегеҙ билдәләйһегеҙ. Әммә һеҙ хәстәрләргә тейешле нәмәләр бар - эш урынығыҙҙа интернет менән сифатлы бәйләнеш һәм кеше һеҙҙең белемегеҙ өсөн түләргә риза булһын. Әлбиттә, эшҡыуарлыҡ башлап ебәреү өсөн ниндәйҙер күләмдә башланғыс капитал да кәрәк. Әммә һеҙ уйлағанса уҡ түгел. Мин үҙемдең күп миллионлы бизнесымды аҙ ғына капитал нигеҙендә тупланым; бынан тыш, һеҙҙең үҙ продукцияғыҙҙы уларҙы етештерергә тиклем һатыу мөмкинлегегеҙ буласаҡ. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, мәғлүмәтегеҙҙе маҡсатлы аудиторияға еткереү өсөн ниндәйҙер күләмдә аҡсағыҙ булыуы зарур.

Бынан тыш, ниндәйҙер ғәҙәтегеҙҙе үҫтерергә, кәрәкле белем алырға кәрәгәсәк. Сөнки белем ике осраҡта мотлаҡ: һеҙ CD йәки DVD яҙҙырыусы студия менән килешеү төҙөргә өйрәнергә, электрон форматта китаптар сығарырға һәм ошо ресурстарҙы ҡуллана белергә тейешһегеҙ, шуға ла продукты эшләүҙән күп аспекттарын үҙләштерергә тура киләсәк - кәрәкле мәғлүмәтте үҙләштермәй тороп, бизнесҡа баш тығырға ярамай.

Был бизнес-модель талап иткән кәрәкле эш тәжрибәһен үҫтереү өсөн икенсе өлкә - маркетинг. Ошондай бизнеста уңыш ҡаҙаныу өсөн һеҙ реклама текстарын яҙырға, уларҙы тарата, веб-сайт дизайнын, ҡаптарға тултырырға, хаҡ ҡуйырға һәм маркетингтың башҡа мөһим аспекттарын белергә тейешһегеҙ. Шуға күрә, был бизнес ошо өлкәгә яңы ғына аяҡ баҫыусылар өсөн түгел. Әммә был эшкә һалырлыҡ аҡсағыҙ бар һәм яңы белем алырға, өйрәнергә ынтылаһығыҙ икән - һеҙҙе ҙур уңыш көтә.

**Рэнди ГЕЙДЖ.**



## 1 ИЮНЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.05 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Взрослые дочери". Мелодраматический сериал. 9-я и 10-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
01.15 "Время покажет" (16+).
02.05 "Наедине со всеми" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Модный приговор".
04.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.15 "Утро России".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Загадка судьбы". Ток-шоу.
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Между нами, девочками". 11-13-я серии. Комедийный сериал (12+).
23.55 "Дежурный по стране". Михаил Жванецкий.
00.50 "Праздник тысячи подношений".
01.30 "Я ему верю" (16+).
02.25 "Закон и порядок-20". Сериал (16+).
03.20 "Русский чернозем".
04.20 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.50 "Кәмит". Юмор (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "1 июнь - Халыҡ-ара балалар көнө"
16.00 "Еңмеш". Фильм (12+)
17.00 "Бүре һәм ете бәрән". Мюзкл (6+)
19.00 "Байыҡ-2015". 1 тур (12+)
20.00 "Беҙҙең өйҙөң йәме". Фильм (6+)
21.00 "Балалар Байығы". Концерт (12+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Новости недели (на башк. яз.).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Городок АЮЯ" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15 Новости недели.**
**12.00 "Специальный репортаж".**
**12.15 "Весело живем" (12+).**
**12.30, 16.30, 21.30 Новости (0+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Кружевное облако" (0+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Бауырһаҡ" (0+).**
**15.15 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**15.45 "Юные виртуозы Уфы" (0+).**
**16.00 "Золотой фонд Башкирского ТВ" (6+).**
**16.45 "КЛИО" (0+).**
**17.30 Новости культуры (0+).**
**17.45 "Большая Победа в маленьких сердцах" (0+).**
**19.30 Новости спорта.**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 "Народы Башкортостана" (12+).**
**21.00 "Дознание" с Ильдаром Исангуловым (16+).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**23.00 "Мост в Терабитию". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 2 ИЮНЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Взрослые дочери". Сериал (16+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.05 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Взрослые дочери". 11-я и 12-я, заключительная, серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "Структура момента" (16+).
01.20 "Наедине со всеми" (16+).
02.15 "Время покажет" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Модный приговор" (16+).
04.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Загадка судьбы" (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Между нами, девочками". 14-я-16-я серии (12+).
23.55 "Последний романтик контрразведки" (12+).
00.50 "Московский детектив. Черная оспа" (12+).
01.50 "Я ему верю". Сериал (16+).
02.50 "Закон и порядок-20". Сериал (16+).
03.45 "Полиграф" (12+).
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
22.00 "Кис ултырып". Азат Биксурин. 2014й. Концерт (12+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Настоящие охотники за привидениями" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Зеркальце" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 18.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (0+).**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Семәр" (0+).**
**15.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.45 "Фанташ" (0+).**
**16.00 "Башҡорттар" (12+).**
**16.45 "Дорога к храму" (0+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Золотой фонд башкирского ТВ" (12+).**
**18.30 "Застава". Сериал (12+).**
**19.30 Новости. Тема дня.**
**20.00 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.).**
**21.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Помпеи". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 3 ИЮНЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Взрослые дочери". Сериал (16+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.05 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Мама-детектив". Детективный сериал. 1-я и 2-я серии (12+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Политика" (16+).
01.25 "Наедине со всеми" (16+).
02.20 "Время покажет" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Время покажет" (16+).
03.15 "Модный приговор" (16+).
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Загадка судьбы". Ток-шоу (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Между нами, девочками". 17-я и 18-я серии (12+).
22.55 "Специальный корреспондент" (16+).
00.35 "Последняя миссия. Операция в Кабуле" (12+).
01.35 "Я ему верю". Сериал (16+).
02.35 "Закон и порядок-20". Сериал (16+).
03.35 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.50 "Кәмит". Юмор (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
19.00 "Башҡорт йыры". Хит-парад (12+)
22.00 "Кис ултырып". "Беҙ дуҫлыҡ менән көслө". Концерт (12+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Настоящие охотники за привидениями" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Борсаҡ" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 17.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (0+).**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Башҡорт йыры-2015" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.15 "Шәп арба" (0+).**
**15.45 "Физра. Спортблог спецкора" (6+).**
**16.00 "Тәмле" (12+).**
**16.45 "Здоровое решение" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Золотой фонд башкирского ТВ" (12+).**
**18.15 "История признания" (6+).**
**18.30 "Застава". Сериал (12+).**
**19.30 Телецентр.**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.) (12+).**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Дополнительное время". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 4 ИЮНЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.15 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами) (16+).
12.20 "Мама-детектив" (12+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.05 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Мама-детектив". 3-4-я серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "На ночь глядя" (16+).
01.25 "Время покажет" (16+).
02.15, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
03.00 Новости.
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00, 14.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Загадка судьбы". Ток-шоу (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Между нами, девочками". 19-я и 20-я, заключительная, серии (12+).
22.50 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.35 "Тайна трех океанов" (12+).
01.45 "Я ему верю" (16+).
03.40 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
19.00 "Байыҡ-2015". 1 тур (12+)
22.00 "Кис ултырып". Рәүис Заһитов (12+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Настоящие охотники за привидениями" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Цирк в 13 метров" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 18.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (0+).**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Шәп арба" (0+).**
**15.15 "Семәр" (0+).**
**15.45 "Книга сказок" (0+).**
**16.00 "Автограф" (6+).**
**16.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Золотой фонд башкирского ТВ" (12+).**
**18.30 "Застава". Сериал (12+).**
**19.30 Новости. Тема дня (12+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.) (0+).**
**21.00 "Наука 102" (6+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (12+).**
**23.30 "Только не сейчас". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 5 ИЮНЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости (с субтитрами)
09.10, 05.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Мама-детектив" (16+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.05 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Коллекция Первого канала "Голос". Второй сезон. Лучшее" (16+).
23.55 "Вечерний Ургант" (16+).
00.50 "Хозяин морей: на краю земли". Приключения (12+).
03.20 "Воспитание Аризоны". Комедия (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.10, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Хрустальный соловей".
09.50 "О самом главном".
10.45 "Мусульмане".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (16+).
16.00 "Загадка судьбы" (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести - ПФО".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир".
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Юморина". Главный юмористический фестиваль года (12+).
22.55 "Любовь на два полюса". Мелодрама (16+).
00.50 "Птица счастья" (16+).
02.45 "Горячая десятка" (12+).
03.50 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.50 "Кәмит". Юмор (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (0+)
20.00 "Ҡотлауҙар" (6+)
22.00 "Кис ултырып". Әлфиә Юлсурина. Концерт (12+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Настоящие охотники за привидениями" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Книга сказок" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (0+).**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**15.00 "Сулпылар" (0+).**
**15.15 "Байтус" (0+).**
**15.45 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**16.45 "ФК "Уфа" - наша команда!" (0+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Позывной "Барс" (12+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**18.30 "Застава". Сериал (16+).**
**19.30 Новости. Тема дня.**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.).**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Аль-Фатиха" (12+).**
**23.00 "Миф". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 6 ИЮНЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Школьный вальс" (12+).
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Виктор Тихонов. Последний из атлантов". Док. фильм (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "На 10 лет моложе" (16+).
14.00 "Обыкновенное чудо". Муз фильм.
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Обыкновенное чудо". Окончание фильма.
16.50 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Угадай мелодию".
18.50 Коллекция Первого канала "ДОстояние РЕспублики: Анна Герман".
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
22.55 "Танцуй!".
01.40 "Без предела" (16+).
03.35 "Субмарина" (16+).

### РОССИЯ 1

04.55 "Пядь земли" (12+).
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Военная программа" Александра Сладкова.
08.50 "Планета собак".
09.25 "Субботник".
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.30 "Кулинарная звезда" (12+).
12.35 "Последняя жертва" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.40 "Последняя жертва". Продолжение фильма (12+).
15.10 "Субботний вечер".
17.05 "Улица Веселая" (12+).
18.00 "Четвертый пассажир". Мелодрама.
20.00 "Вести в субботу".
20.45 "Моя мама против". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.40 "Хочу замуж" (12+).
02.40 "Все не случайно" (16+).
04.20 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
19.00 "Башҡорт йыры". Хит-парад (12+)
22.00 "Ҡурай дуҫтарын йыя". Концерт (12+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (12+).**
**07.05, 22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Ослепительный Барри и червяки диско" (0+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.30, 21.30 Новости.**
**12.45 "Наука 102" (12+).**
**13.15 "Весело живем" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Баик-2015" (12+).**
**17.00 "Золотой фонд башкирского ТВ" (6+).**
**17.45 "Киностудия "Башкортостан" - 25 лет" (6+).**
**18.15 "Орнамент" (0+).**
**18.30 "Замандаш" (0+).**
**18.45 "Казанские гастроли Башкирского академического" (12+).**
**19.30 "Башҡорттар" (12+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 "Башҡорт йыры" (12+).**
**21.00 Экономический атлас стран ШОС и БРИКС (12+).**
**22.00 "Легенды спорта" (6+).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2015" (12+).**
**23.45 "Разорванные объятия" (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 7 ИЮНЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.40 "В наше время" (12+).
06.00 Новости.
06.20 "В наше время" (12+).
06.40 "Самолеты".
08.10 "Армейский магазин" (16+).
08.40 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Теория заговора" (16+).
13.15 "Брак по завещанию. Возвращение Сандры". Мелодраматический сериал (16+).
17.00 "Парк". Новое летнее телевидение.
19.00 "Точь-в-точь" (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Что? Где? Когда?"
23.40 "Мистер и миссис СМИ".
00.15 "Контрабанда". Боевик (16+).
02.15 "Леди-ястреб" (12+).
04.30 "Контрольная закупка" (12+).

### РОССИЯ 1

05.15 "Испытательный срок". Детектив (12+).
07.20 "Вся Россия".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама Евгения Петросяна".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Россия. Гений места" (12+).
12.10 "Смеяться разрешается".
14.00 "Вести".
14.20 "Живой звук".
16.10 "Подмена в один миг". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
00.35 "Волшебник" (16+).
02.35 Торжественная церемония открытия XXVI кинофестиваля "Кинотавр".
03.50 "Планета собак".
04.30 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.50 "Кәмит". Юмор (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
20.00 "Ҡотлауҙар" (6+)
22.00 "Кис ултырып". Марсель Ҡотоев. Концерт (12+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (12+).**
**07.05 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома" (0+).**
**08.30 "Точка, точка, запятая" (0+).**
**10.00 "Физра. Спортблог спецкора" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Бауырһаҡ" (0+).**
**11.00 "Ал да гуль" (0+).**
**11.15 "Байтус" (6+).**
**11.30 "Сулпылар" (0+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.) (0+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Гагаринские дни" (0+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Вестник "Газпром трансгаз Уфа" (12+).**
**16.45 Башкирская юниор-лига КВН (0+).**
**18.15 "Орнамент" (0+).**
**18.30 "Замандаш" (0+).**
**18.45 "Весело живем" (12+).**
**19.00 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**19.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**19.30 "Историческая среда" (6+).**
**20.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**20.45 "История признания" (6+).**
**21.00 "Любимое дело" (12+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Баик-2015" (6+).**
**23.30 "Вечер.com" (12+).**
**00.15 "Свидание с джазом" (12+).**
**00.45 "Дневник его жены" (12+).**

---

Күренекле шағир, Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең Яҙыусылар союзы ағзаһы Йәнбәков Рәмил Әхмәт улының,

**ҡатыны Йәнбәкова Зилә Рәхимйән ҡыҙының**

вафаты сәбәпле, ауыр ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ.

**Зилә Рәхимйән ҡыҙының БДУ-ның филология факультетында 1975-1979 йылдарҙа бергә уҡыған курсташтары.**

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмәнең.**

✓ *10 литр һыуға 1 ҡалаҡ һеркә, 2 ҡалаҡ үҫемлек майы, бер аҙ шыйыҡ һабын һалып болғатырға һәм ҡырмыҫҡа ояһының уртаһына тишек ҡаҙып ҡойоп, бер-нисә көнгә пленка менән ябып ҡуйырға. Ҡырмыҫҡалар башҡаса был урында булмаясаҡ.*



*БАҠСА*



## ҠЫЙ ҮЛӘНДӘРЕНӘН АРЫНЫУ

Баҡсала түтәлдәр араһына сыҡҡан дегәнәк һәм ҡурйын үләне кеүек эре ҡый үләндәренең тамырын йолҡоп алыуы еңел түгел. Тамыры төпкә китеп үҫкән ҡый үләндәрен яҡшылап ҡаҙып та булмай, эргәһендәге файҙалы үҫентеләргә зыян килтереүе мөмкин. Был ҡый үләндәрен түбәндәге ысул менән бөтөрөргә була: үләндең өҫкө өлөшөн тулыһынса ҡырҡып алып, тамырһабағы өҫтөнә бер-ике семтем тоҙ һибергә кәрәк. Тоҙ үләндең тамырын ашап бөтөрә, үҫеүен туҡтата.

## ҠУРАЙ ЕЛӘГЕН КӘРТӘЛӘҮ

Ҡурай еләге бик тәмле емеш, әммә уның тамырҙары тиҙ таралып, бөтә баҡсаны баҫып алырға мөмкин. Ҡурай еләгенең тамырҙары баҡсаның кәрәкле өлөшөнән артыҡ ситкә сығып үҫмәһен өсөн ул ултырған ерҙе тирәләтеп ҡаҙып, шифер һалырға тәҡдим ителә. Әммә шиферҙе ҡырҡыуы ауыр, бынан тыш, матур күренмәй. Шифер урынына ҡурай еләге үҫкән территорияны пластик ҡалма менән уратып алырға була. Уның киңлеге 20 сантиметрҙан да кәм булмаҫҡа тейеш. Әгәр ҙә был рәүешле ҡалмалап ҡуйырға теләмәһәгеҙ, ҡурай еләге тирәләй һарымһаҡ һәм петрушканы бер йә өс рәт итеп сәсергә мөмкин.

## БАҠСАНЫ ҠЫРМЫҪҠА БАҪҺА

Баҡсаны ҡырмыҫҡалар баҫһа, түбәндәге әмәлдәрҙе күрергә була:

- Ҡырмыҫҡалар насар еҫтән ҡурҡа. Ҡырмыҫҡа иләүе өҫтөнә ыҫланған селедка башы, томат һәм петрушка һабағы, дәрсен, ҡором һалырға кәрәк.
- Ҡырмыҫҡалар төйәкләгән ерҙе йомшартып, эзбиз һирпергә. Унан тыш, лимон кислотаһы, аш содаһы, ҡайнар һыу ҡойорға мөмкин.
- Ҡырмыҫҡа ояһын йоморҡга һалған ҡатламына тиклем ҡаҙып, кер йыуыу өсөн тәғәйенләнгән порошок иретмәһен ҡойоп, янынан күмергә.
- 10 литр һыуға 1 ҡалаҡ һеркә, 2 ҡалаҡ үҫемлек майы, бер аҙ шыйыҡ һабын һалып болғатырға һәм ҡырмыҫҡа ояһының уртаһына тишек ҡаҙып ҡойоп, бер-нисә көнгә пленка менән ябып ҡуйырға. Ҡырмыҫҡалар башҡаса был урында булмаясаҡ.
- Бор кислотаһы һәм шәкәр иҙмәһе лә ҡырмыҫҡаларҙан ҡотолорға ярҙам итә. Әҙер иретмәне бәләкәй һауыттарға, дарыу һауыттарына ҡойоп, тәмле еҫ аңҡыһын өсөн бер аҙ бал ҡушып һалып, ҡырмыҫҡа иләүе тирәләй ултыртырға.
- Мамыҡты кәрәсингә манып алып, ҡырмыҫҡа иләүе эргәһенә һалған осраҡта ҡырмыҫҡалар был урындан ҡаса.
- Ҡырмыҫҡаларҙан ҡотолған осраҡта ла инә ҡорт урынында ҡала икән, был бөжәктәр кире шул урынға килеп тулыуын көт тә тор. Был осраҡта иң йоғонтоло ысул - ҡырмыҫҡа ояһын баҡсанан ситкә ҡаҙып алып сығарыу булыр.

*ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ*

# КӘЗӘ ҺАҠАЛЫ ҮЛӘНЕ



**"Дауалау сифатына эйә булмаған үҫемлек, үҫемлек менән дауалау мөмкин булмаған ауырыу юҡ", ти Көнсығыш аҡылы. Шундай үләндәр араһында халыҡта төрө исем аҫтында - кәзә һаҡалы, ҡырағай примула, кәкүк емеше, яҙ гөлө тип йөрөтөлөүсе дарыу үләне лә бар. Латин телендә "примус", йәғни "беренсе" тип йөрөтөлгән был үлән кешегә күптән билдәле.**

Боронғо гректар кәзә һаҡалы төрлө ауырыуҙарҙан, шул иҫәптән фалиж һуғыуҙан (паралич) дауа, тип билдәләгән. Друид жрецтары иһә унан мөхәббәт эсемлеге әҙерләгән. Шулай уҡ ҡырағай примуланы күңел төшөнкөлөгөнән ҡотҡарыусы, эс китеүҙе бөтөрөүсе, ауыҙ һәм тел елһенеүенән ярҙам итеүсе дарыу булараҡ ҡулланғандар. Йылан тешләгәндә, аяҡ-ҡул ҡалтырағанда, һыҙланғанда, тынысһыҙланғанда, быуындар шешкәндә лә кәзә һаҡалының төрлө өлөшөн файҙаланғандар.

Яҙын япраҡтарында күпләп С витамины һәм каротин тупланған ҡырағай примуланы ҡулланыу һәйбәт. Германияла, мәҫәлән, уның киптерелгән сәскәһен сәй итеп эсәләр, инглиздәр ҡырағай примуланың йәш япраҡтарынан салат эшләй, ә Швейцарияла иһә кәзә һаҡалының сәскәһенә бал ҡушып, шыжылдап торған эсемлек әҙерләйҙәр. Англияла шулай уҡ был үләндең әнис еҫе сығып торған тамырын тәмләткес һәм туберкулеҙҙан дауа булараҡ та ҡулланалар.

Ҡырағай примуланың ҡайнатмаһы менән бронхитты, үпкә шешеүен, быума йүтәлде лә дауалайҙар. Уның тамыры йүткереү, трахеобронхит, хроник бронхит сирҙәре ваҡытында эсергә кәрәкле күкрәк сәйе составында ла бар. Был төнәтмә түбәндәгесә әҙерләнә: 2-шәр балғалаҡ киптерелгән кәзә һаҡалы, андыҙ, үгәй инә үләндәрен 1 стакан эҫе һыу ҡойоп, 5 минут ҡайнатаһың һәм 15 минуттан һөҙөп алаһың. Көн дауамында, ашау ваҡытына ҡарамайынса, ошо төнәтмәне әҙ генә йотомдар менән эсеп йөрөргә кәрәк.

Икенсе рецепт буйынса 1-әр ҡалаҡ кипкән һәм ваҡланған кәзә һаҡалының һәм ҡурйын үләненең (солодка) тамырына, үгәй инә үләненең һәм пикульниктың япрағына, әнистең һәм фенхель емешенә 1 стакан бүлмә температураһындағы һыу ҡойоп, 2 сәғәт дауамында төнәтәһең. 5-10 минут тирәһе ҡайнатып алғандан һуң, һөҙөп, йылылай эсәһең.

Халыҡ медицинаһында ҡырағай примуланың сәскәһен йоҡоһоҙлоҡтан, баш ауырыуҙан да ҡулланалар. Уның япрағынан һәм сәскәһенән хуш еҫле сәй әҙерләргә була. Бының өсөн примуланың 1-әр ҡалаҡ киптерелгән япраҡ һәм сәскәһен 1 стакан ҡайнар һыу менән бешерәһең. Бер аҙ һыуынғас, һөҙөп алып, һыуыҡ тейгәндә, баш әйләнгәндә, тирләткес һәм һейҙерткес сара булараҡ көнөнә 4-6 ҡалаҡ эсәләр.

1 ҡалаҡ кипкән һәм ваҡланған кәзә һаҡалы тамырын эмаль һауытта 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут ҡайнатаһың. 30 минут һыуытып, һөҙәһең һәм стакан тулғансы ҡайнар һыу өҫтәп, көнөнә 3-4 тапҡыр 1-2 ҡалаҡлап ашағанға тиклем ҡулланыу ҡаҡырыҡты сығарырға ярҙам итәсәк.

25 грамм кәзә һаҡалының сәскәһен 200 мл ҡайнар һыуҙа 30 минут төнәтеп, һөҙөп алаһың. Көнөнә 1-3 тапҡыр 100-200 миллиграмлап баш әйләнеүе ыҙалатҡанда, баш әйләнгәндә, хроник эс ҡатҡанда эсәһең.

Ҡырағай примула күп ауырыуҙарҙан шифа булһа ла, уның ҡайһы бер төрҙәре көслө аллергияға сәбәпсе булырға мөмкин, шуға күрә бик һаҡ эш итергә кәрәк.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1436 һижри йыл.*

| Июнь (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 (14) дүшәмбе | 3:19 | 4:49 | 13:30 | 20:08 | 21:38 | 23:08 |
| 2 (15) шишәмбе | 3:18 | 4:48 | 13:30 | 20:10 | 21:40 | 23:10 |
| 3 (16) шаршамбы | 3:17 | 4:47 | 13:30 | 20:11 | 21:41 | 23:11 |
| 4 (17) кесе йома | 3:16 | 4:46 | 13:30 | 20:12 | 21:42 | 23:12 |
| 5 (18) йома | 3:15 | 4:45 | 13:30 | 20:13 | 21:43 | 23:13 |
| 6 (19) шәмбе | 3:15 | 4:45 | 13:30 | 20:14 | 21:44 | 23:14 |
| 7 (20) йәкшәмбе | 3:14 | 4:44 | 13:30 | 20:15 | 21:45 | 23:15 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙән алынды.*

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Май айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Дүртөйлө ҡалаһынан** Лилиә Шәйәхмәтова, **Дүртөйлө районы** Таймырҙа ауылынан Миләүшә Байрамшина, Мәҫкәү ауылынан Зилә Князева, **Яңауыл ҡалаһынан** Гөлсәсәк Фахрова, **Яңауыл районы** Максимово ауылынан Рәмил Даутов, **Благовар районы** Языково ауылынан Светлана Кәлимуллина, Ағарҙы ауылынан Ғәлиә Ғәйнуллина, **Бишбүләк районы** Дим ауылынан Раушания Тиканова, **Бүздәк районы** Ҡыҫҡайылға ауылынан Илүзә Ғәтиәтова, Кәпәй-Ҡыбау ауылынан Айгөл Авзалетдинова, Ташлыкүл ауылынан Әлминә Батыргәрәева, **Ауырғазы районы** Үрге Ләкәнде ауылынан Илнар Йәғәфәров, Мөхтәр Йәғәфәров, Үтәймулла ауылынан Рәмилә Ғибәҙуллина, **Өфө ҡалаһынан** ошо көндәрҙә 90 йәшен түйлаған Мәхтүмә апай Яхина, Әлфиә Зәбдинова, Зәкинә Хисамова, Фәрзәнә Вәлиева, **Туймазы ҡалаһынан** Гәүһәр Фәйзуллина, **Туймазы районы** Нижнетроицкий ауылынан Алһыу Хаматханова, **Миәкә районы** 2-се Миәкәбаш ауылынан Зөлфиә Хәкимова, **Ғафури районы** Ҡауарҙы ауылынан Әлфиә Хәмзина, Красноусол ауылынан Эльвера Ҡунафина, Сәйетбаба ауылынан Рәзифә Юлбарисова, **Мәләүез ҡалаһынан** Шакир Ураҙбаев, **Федоровка районы** Бала Сытырман ауылынан Рәйсә Сәлишева, Гүзәл Залилова, Федоровка ауылынан Айрат Йәнбирҙин, **Өфө районы** Дорогино ауылынан Аза Низаметдинова, **Баймаҡ районы** Ярат ауылынан Гүзәл Монасипова, Маһикамал Иҫәндәүләтова, Клара Юлғотлина, Аҡморон ауылынан Алһыу Байегетова, **Әбйәлил районы** Дәүләт ауылынан Әмирхан Шаһимәрҙәнов, Йәнгел ауылынан Фәниә Ғәлимова, Салауат ауылынан Мәрхәбә Ноғоманова, **Благовещен ҡалаһынан** Альбина Ғәсимйәнова, **Стәрлетамаҡ районы** Алға ауылынан Әлифә Ғәҙелшина, **Стәрлетамаҡ ҡалаһынан** Ләйсән Хәкимова, Таңһылыу Фамутдинова, **Дыуан районы** Мәсәғүт ауылынан Гүзәлиә Баева, **Йылайыр районы** Ҡашҡар ауылынан Илүзә Ҡудашева, **Белорет районы** Ҡаҙыш ауылынан Әминә Абуталипова, Инйәр ауылынан Әлфирә Мөхәмәткилдина, Рәйфә Низамова, **Хәйбулла районы** Байғускар ауылынан Мөнирә Моратова, **Күгәрсен районы** Үрге Бикҡужа ауылынан Сәриә Айҙарбәкова, Яңы Хвалын ауылынан Гөлсөм Суҡбаева, Бикбулат ауылынан Гөлнәзирә Кинйәбаева, Мораҡ ауылынан Алмира Суҡбаева, Рүзилә Янсина һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас йөрәктән ҡотлайбыҙ! Тыуған көнөгөҙҙә теләктәрҙең иң изгеләрен теләйбеҙ, тандарығыҙ аҡ бәхеттәр менән атһын, йөҙөгөҙҙә гел йылмайыу булһын, Хоҙай йән рәхәтенән, тән сихәтенән айырмаһын!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

*ИҒЛАН*

## "БЕРЕНСЕ"ЛӘР ҺАБАНТУЙҒА САҠЫРА!

Хөрмәтле уҡытыусылар һәм Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының барлыҡ сығарылыш уҡыусылары!

"Беренсе"ләр Ассоциацияһы 6 июндә барығыҙҙы ла "Ташлы" ял базаһына (Аҡбирҙе ҡасабаһы) традицион "Беренселәр һабантуйы"на саҡыра.

Яраткан уҡытыусыларығыҙ һәм класташтарығыҙ менән осрашып, ҡыҙыҡлы программа ҡарап, уйындарҙа ҡатнашып, күңелле ял итеп ҡайтырһығыҙ. Инеү хаҡы - 800 һум.

Һабантуй көндөҙгө 15.00 сәғәттә башлана. Теркәү 14.00 сәғәттән.

Тулыраҡ мәғлүмәтте vkontakte "Ассоциация "Беренсе"лә төркөмөндә һәм www.berense.com сайтында ҡарағыҙ.

Һабантуйҙа ҡатнашыу өсөн: 8-917-3512343, 89371561100 телефондары буйынса яҙылырға кәрәк (координатор Ғәзизова Сәүиә).

ӘЙТЕШ

# НИҢӘ ҺАМАН БЕҘ ЯРЛЫБЫҘ,

## Йәшәһәк тә бик бай илдә?

**Гәзитебеҙҙең 18-се һанынан Йәнһылыу менән Көфө сәсән әйтеште дауам итә. 20-се һанда Көфө сәсән Йәнһылыуға шундай фекерҙәрен төбәгәйне:**

"Асыл" һүҙе асылыуҙы,
Аңлата изгелекте.
Шул асыл бит ябылыуҙан
Илебеҙ емерелде.
Ошо хаҡта фекерең де
Апай, бик белгем килә.
Гәзит уҡыусыларына
Белеп, еткергем килә...

**Йәнһылыуҙың Көфө сәсәнгә әйткәне:**

Аҡҡош түгел, ала ҡарға
Тубынан сителгәндәр.
Киҫкән телем берекмәй ул,
Ялғанмай кителгәндәр.
Аҡҡош - тоғролоҡ өлгәһе,
Ташламай ишен, тубын.
Тоҡом ҡалһын өсөн генә
Бутамаясаҡ генын.
Ныҡ рухлы, телле, ер-илле
Милләт булыу - беҙҙең асыл.
Башҡорт зыялы, аңлы булһа,
Булыр изгелек хасил.
Беҙ тырышһаҡ, Хоҙайыбыҙ
Ниәткә сәбәп итер.
Асылдарын япҡандарҙың
Вавилонын емертер.
Бабаларҙың аманатын -
Башҡортлоҡто һаҡлайыҡ.
"Киске Өфө"лә Өфөнө
Асыл үҙәге итәйек.

**Көфө сәсәндең Йәнһылыуға әйткәне:**

Ниңә һаман ярлыбыҙ беҙ,
Йәшәһәк тә бик бай илдә?
Тиеп әйтеш башлағайныҡ,
Юҫыҡ алдыҡ ана ниндәй.
Ә бит төптән уйланиһыҡ,
Бар бәләләр асылда бит.
"Сим-сим, асыл!" тиеү менән
Киләсәк тә асылмай бит.
Милләтteке генә түгел,
Кешелектең юлы харап.
Ысын тормош ябылыуҙан
Эргәбеҙҙән үтеп бара.
Үкенесле, беҙ тормошта
Актер түгел - тамашасы.
Беҙһеҙ генә вәҡыт аға,
Беҙ уртала - аралашсы.
Яңылыштыҡ ҡайһы ерҙә,
Юл сатының ҡайһыһында?
Ошолай ҙа хаталарҙы
Яһар бары аңһыҙ ғына.
Миллиондар яңылыша,
Быуат һайын түңкәрелеш.
Яҙмышыбыҙ аймылышҡан,
Тик тәҡдирҙә юҡ үҙгәреш.
Аңһыҙлыҡҡа бер аҙым тик,
Ҡан буталһа һәм аҙашһа.
Үҙ тубына ойошалмай,
Асылыбыҙ ҡаңғылдаша.
Кешелектең һәм милләттең
Башҡайына нимә етә?
Тәмле-татлы, комфорт, рәхәт...
Йәнебеҙгә "мина" икән.
Асылыбыҙ икенсе бит,
Беҙ башҡаса яратылған.
Асылыбыҙ һынамаҡҡа
Ер өҫтөнә таратылған.
Шул һынауҙы кемдәр үтә,
Үтә, тиҙәр йәннәттәргә.
Ә беҙ ожмах ғүмерҙә, тип,
Әйләнгәнбеҙ бәйнәттәргә.
Мәғәнәһе ошондалыр
Асылдарҙы юғалтыуҙын.
Намыҫ ғәфләт йоҡоһонда,
Бармы ысул уятырлыҡ?
Ниңә һаман ярлыбыҙ беҙ,
Йәшәһәк тә бик бай илдә?
Һорау дөрөҫ ҡуйылғанмы:
Байлыҡ кемдә, күпме, ниндәй?
Бәлки, тием, был һорауҙы
Башҡасараҡ ҡуйырғалыр?
Бөтән төрлө үтергәләр
Тормош тигән был йылғаны?

**Йәнһылыуҙың Көфө сәсәнгә әйткәне:**

Яңылыштар, хата, бәлә
Ҡуша йөрөй шауҙә һымаҡ.
Эркелеп уҙа киләсәккә
Сим-сим әйтеп, ҡапҡа асһаҡ.
Ағым һыуҙағы юнысҡы
Булып алабыҙ ҡайһы саҡ.
Юл табалмаҫтай булабыҙ
Асылыбыҙҙан тайпылһаҡ.
Бәндәселегебеҙ ҡай саҡ
Кеше булыуҙан яҙҙыра.
Быуат һайын түңкәрелеш
Аңдарыбыҙҙы аҙҙыра.
Өмөт-хыялды яндыра,
Милләттәребеҙ ҡаңғыра.
Үҙең дә әйткәйнең, сәсән,
Үҙгәрешһеҙ беҙҙең тәҡдир.
Ҡалыплап биргән тормошта
Булырбыҙмы телһеҙ актер.
Беҙһеҙ аҡҡан ваҡыттарҙа
Йәшәр өсөн ваҡыт та юҡ.
Хата сүпләй ҙә сүпләйбеҙ,
Үҫеш тә юҡ, асыш та юҡ.
Юлдарыбыҙ тура түгел,
Борма-борма, һаңһыҙ саты.
Унға? Һулға? Турананмы?
Һәр юл саты - тағы хата.
Һин әйтәһең, хаталарҙы
Яһай бары аңһыҙ ғына.
Ә "трибуна" һатҡан аҡыл -
Беҙҙең өсөн - аксиома!
Асыл, аң, ти ҙә ҡалаһың,
Бына ҡайҙа беҙҙең ҡаҙа.
Һаман ныҡлыҡты һынайҙар,
Тәжрибәнең сиге ҡайҙа?
Һөйләнниһәм, һүҙ оҙайыр,
Апайыңды тыңлап арып,
Ҡолағың майшөмдәй тәҙәйер.
Һорауың бирәү, сәсән,
Агастың үҙәге һымаҡ.
Беҙ башҡараҡ яратылған,
Яуабым, шуғалыр, тарбаҡ.
Миллиондарҙы әйтмәйем,
Һәр ҡәүемдең юлы, яйы.
Беҙ үҙгәлә менталитет.
Беҙҙә башҡараҡ мейе.
Тормош-булмышты һаҡлайыҡ
Үҙебеҙсәрәк көйө.

**Көфө сәсәндең Йәнһылыуға әйткәне:**

Һин әйткәнгә уйландым да,
Ҡуҙландым һәм ҙарҡыраным.
Булмышымды яулап алды
Оло тойғо - аптыраныу.
Ниңәләр беҙ үҙебеҙҙе
Тәрәйбеҙ гел упҡындарға.
Тормош булғас, төрлөһө бар,
Тигеҙ булмай тулҡындар ҙа.
Күңелдәре төшкәндәргә
Аҡһаҡал юҡ кәңәш иткән.
Саҡ ҡына көн бозолдиһә
Әйләнәбеҙ бәләсиккә.
Ә бит ниндәй замандарҙың
Иҫкәнендә ниндәй иле.
Һелкенмәгән, таш-ҡаялай
Мәғрүр торған Башҡорт иле.
Ахырыһы заман беҙҙе
Комфорт менән иркәләтә.
Иркәләтеп ала ла бер,
Ыҙа биреп һеңгеҙәтә.
Ойомаһын өсөн беҙҙе
Хоҙай шулай һынайҙыр ул.
Сыныҡҡандар ғына елгә
Бөгөлмәй ҙә, һынмайҙыр ул.
Һүҙең дөрөҫ, үҙсәлекте
Беҙгә хәҙер һаҡлау лазым.
Ашығыуҙан фәтеүә юҡ,
Уйландырһын һәр бер аҙым.
Эт саба, тип, бет саба, тип
Малай түгел беҙ сабырға.
Менәр йылдар йәшәй-йәшәй
Әйләнгәнбеҙ беҙ сабырға.
Әйләнәм дә тағы ҡайтам
Асыл тигән төшөнсәгә.
Үҙ асылын һаҡлағандар
Әүерелмәй күшексәгә.
Асыл башы тәрбиәлә,
Ә нигеҙе рухта ята.
Ә милләтте тәрбиәләп
Була микән, "духтыр апай"?

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәнһылыу менән Көфө сәсәндең әйтеше артабан да дауам итә. Яғылса менән Супай сәсәндәр сиратҡа баҫты. Өшөрә менән Айыҫтужа, Йәнһылыу менән Көфө сәсәндәрҙең әйтештәре гәзит уҡыусыларҙа ниндәй фекерҙәр уятты икән - шул хаҡта ла белергә теләр инек. Бәйгелә әйтеш ҡоророға теләүсе яңы авторҙарҙы көтәбеҙ. Улар ҡарамағында - СМС өсөн +7-937-835-34-74 телефоны, "Киске Өфө"нөң электрон почтаһы kiskeufa@ufacom.ru. Бәйге барышын "Бәйләнештә" сайтының "Башҡорт ҡатын-ҡыҙы" битендә күҙәтеп барыу мөмкинлеге лә бирелә.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# ТАС МАЙ БУЛ!

**Ишембай районы Ҡолғона яҡтарындағы яҡташтарымдың һөйләше башҡорт теленең байлығын, матурлығын туплауы менән айырылып тора. Әсәйемдең һөйләше һуң! Кешегә һис ҡаты бәрелмәй, ауыр һүҙ әйтмәй, кинәйәләп кенә әйтәһен әйтә лә ҡуя.**

**"Алла: "Тукта, ҡолом!" тиер** - бик шашынып киткән кешегә ҡарата әйтелә.
**Ҡаурыйығыҙ ҡаты икән** - үсал булыу.
**Барыһына ла ҡул булмау** - бөтә кешегә лә ярап булмай.
**Һаулыҡ һүҙле булыу** - асыуланышыу.
**Донъя бөткәнсе тороу** - оҙаҡ йәшәү.
**Эс көтөрләү** - кешенең уңышынан көнләшеү.
**Май ҡуңыҙы кеүек булыу** - шат булыу.
**Тас май булыу** - ҡәнәғәт булыу.
**Көфөр һүҙ һөйләмә** - дөрөҫ булмағанды һөйләмә.
**Һыуын, балам** - тыныслан, балам.

**Көнһылыу НАСРЕТДИНОВА.**
**Илеш районы Үрге Йәркәй ауылы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АСЫУЫНДЫ АТ ИТ,

## аҡылыңды теҙген ит

Тау башындағы тәкәгә... тау аҫтындағы арыҫлан сәләм бирер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Фекер һәр ваҡытта ла аҡыл менән түгел, ә тойғолар менән билдәләнә.

**(Герберт Спенсер).**

Шәхси яуаплылыҡ тойғоһо булмағандарҙа яман инстинкттар өҫтөнлөк итер.

**(Сара Бернар).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше алдынғы йәмғиәттә лә әҙәмдәрҙең ҡырағайҙарса йәшәүен күреп, Алланан:**
**- Йә, Хоҙай, мин аңрағаа аңлатсы: ни өсөн әҙәмдәрҙең бар уйы ашау-эсеүҙә, һуғыштар ойоштороуҙа һәм байығыуҙа ғына икән?- тип һораған.**
**- Ул әҙәмдәр - хайуандар, - тигән Хоҙай.**
**Был яуап кешене шул тиклем ғәжәпләндергән һәм ул:**
**- Улар бит тышҡы йөҙө менән кешеләр... - тигән.**
**- Эйе, ләкин аңдары менән - хайуандар, - тигән Хоҙай. - Һин уларға ҡарап тор әле: туймаҫ, нәфсеһе әҙәм хайуандан ҡайһы яғы менән айырыла?**
**- Тышҡы йөҙө менән инде...**
**- Тышҡы йөҙө менән генә, әлбиттә. Ашау тураһында ғына уйлаған кешенең аҙыҡ артынан бар донъяны ҡыҙырған хайуандан айырмаһы бармы? Үҙенә кәрәккәндән мең артыҡ байлыҡ, запас йыйған әҙәм ауыр ваҡытҡа запас туплаған хайуандан айырыламы? Үҙенә уңайлы биләмәләр өсөн һуғышҡан әҙәмдәр яҡшы көтөүлектәр өсөн һөҙөшкән хайуандарға оҡшамағанмы?..**
**- Улайһа, аңлат әле миңә, Хоҙай, үҙҙәре тураһында онотоп ижад иткәндәр кемдәр һуң?- тип һораған кеше тамам аптырап.**
**- Улар аҡыллы һәм киләсәк өсөн йәшәгән кешеләр, сөнки улар - ижадсылар. Улар был донъяны булдырыусы Миңә яраҡлашҡандар, улар Минең ижадсыларым, - тип яуап биргән Хоҙай.**
**- Тимәк, улар шулай уҡ аллалар буламы инде?**
**- Юҡ, Алла булыр өсөн барыһын да таныр белергә кәрәк...**
**- Әммә был мөмкин түгел!**
**- Бер ғүмер эсендә, эйе, мөмкин түгел, - тигән Хоҙай. - Ә күп ғүмер эсендә - мөмкин. Шуға ла ошо хайуанға тиң әҙәмдәр күп ғүмерҙәр йәшәй һәм шул ғүмерҙәр эсендә улар ижадсыларға әйләнергә тейеш. Алла-кешеләр ер белемен дә, йыһан ғилемен дә үҙләштергән була. Улар барыһын да белә һәм кешеләрҙе хайуандарҙан өҫтөн булыр өсөн ни эшләргә кәрәклегенә өйрәтә. Әммә бындай кешелектең Уҡытыусыһы булырҙай алла-кешеләр күп түгел...**
**Кеше Аллаға рәхмәт әйтеп, хушлаша. Алла-кеше булыу өсөн аңға, донъя аҡылына эйә булырға, бар яҡтан камиллыҡҡа өлгәшергә кәрәк икәненә төшөнә ул..."**

158221891006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 29 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**
Тиражы - 5010
Заказ 2454